ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

29-4 июль - август (майай - урағай)

2017

№30 (760)

15 йыл

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Зәбихулла Искужин**



Уның шәжәрәһе тураһында һүҙҙе дауам итеп 6-7

**Баланды тәрбиәләмә, үҙеңде тәрбиәлә...**

балаң бит барыбер һиңә оҡшаясаҡ



8-9

**Ысын ҡурайсы икәнһең,**

ҡыныңда үлән ҡурай йөрөт



11

**Туҡ буйҙарына сәфәр**



15

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Июлдән август аҙағына тиклем 2018 йылдың беренсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә элекке хаҡтар менән ваҡытынан алда яҙылыу бара. Республикабыҙҙың һәр районы-ҡалаһында, иң төпкөл ауылдарҙа ла 50665 индекслы "Киске Өфө"гә - 559 һум 56 тингә, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары 447 һум 64 тингә яҙыла алаһығыҙ. Июль-августа гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер, ғәҙәттәгесә, матур китаптарға лайыҡ буласаҡ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Йәйге миҙгелдең һәр кем белергә тейешле хәүефһеҙлек саралары хаҡында низәр әйтер инегеҙ?

***Шәмсинур БУЛӘКОВА, Стәрлетамаҡ ҡала балалар дауаханаһының поликлиника мөдире:*** Йәй бөтәбеҙ өсөн дә оҙаҡ көтөп алынған ял, тәбиғәт ҡосағына сәйәхәт, туристик походтар мәле генә түгел, ялан-ҡырҙарҙа, дача һәм баҡсаларҙа ҡыҙыу эш осоро ла. Үҙегеҙ беләһегеҙ, бындай уттай ҡыҙыу мәлдәрҙә төрлө көтөлмәгән хәлдәр килеп тыуыуы ла ихтимал. Шуға күрә лә йәй күңелебеҙҙә тик матур хәтирәләр генә ҡалдырһын һәм мөмкин тиклем файҙалы үтһен, тиһәгеҙ, һәр кем белергә тейешле ябай ғына хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен иҫтә тоторға тырышырға кәрәк. Быйылғы йәйҙең яртыһы беҙҙә, әлбиттә, аяҙ, ҡояшлы көндәре менән әллә ни кинәндермәне, ләкин халҡыбыҙҙың күп йыллыҡ күҙәтеү-һынамыштары, шулай уҡ метеокүҙаллауҙар буйынса, йәйҙең ҡыҙыуы алда әле, тигән фараздарға бик тә өмөт итке килә. Шулай була ғына күрһен, сөнки өлкәндәр ҙә, айырыуса балалар йәйге ҡояш нурҙарында ҡойоноп, ҡыҙынып, һыу инеп, урман-ҡыр һауаһын һулап, оҙон ҡышҡа етерлек көс туплап, сынығып өлгөрөргә тейеш бит ни тиһәң дә. Тик бына ошо юҫыҡта беҙҙе әллә күпме хәүеф-хәтәр һағалауын онотторға ярамай, тип ҡабатлағы килә тағы бер, сөнки был хаҡта күпме генә һөйләмә, яҙма - бәғзе бер ҡыҙыу ҡанлылар барыбер был турала онота һәм күңелһеҙ хәлдәргә тарый.

Мәҫәлән, шундай бер төркөм биктырыш баҡсасылар хаҡында әйтеп китеү был йәһәттән урынлы булыр ине. Ҡояш ҡыҙыуы аҫтында ундайҙар көн оҙоно баш күтәрмәй ерҙә соҡона. Уларҙы аңларға ла була, бигерәк тә быйылғы йәйҙә. Дым артығы менән етерлек булғанлыҡтан, йәшелсә-емеш үҫентеләре урынына баҡсаларҙа ҡый үләне гөрләп үҫте. Шуға күрә күптәр түтәлдән баш күтәрмәй сүп утай, картуфын күмә һәм башҡаһын эшләй. Ҡан баҫымы түбән йә, киреһенсә, юғары булған кешеләр өсөн был бик тә хәүефле мәл. Уларға баҡсала иртәле-кисле һалҡынсараҡ мәлдә эшләргә, ә көндөҙ ял итергә кәңәш бирер инем, юғиһә, баш мейеһенә ҡан һауыуы, йөрәк өйәнәге был осорҙа бик йыш осрай торған хәл. Йәйгеһен күптәр төҙөлөш-балта эштәре менән була, махсус техника ярҙамында мал аҙығы әҙерләй, бесән саба. Аңһыҙҙан бында ла йәрәхәтләнеү, ҡулаяҡ һындырыуы оҙаҡ түгел, үкенескә. Бына ошондай саҡтарҙа зыянланыусылар янында тәүге ярҙам күрһәтә алырлыҡ кешеләр булыуы хәйерле. Һәм, ғөмүмән, һәр кем ҡазаға ҡалғандарға тәүге ярҙам күрһәтеү алымдарына эйә булырға, йәғни аңын юғалтҡанды - иҫенә килтерә, һыуға батҡанды ҡотҡарғас, уға яһалма тын алдырыу, йөрәккә массаж яһау, яранан ҡан аҡҡанда - жгут, һынған урынға шина һалыу кеүек ярҙам сараларын мотлаҡ белергә, белмәй икән, өйрәнергә тейеш. Әйтәйек, вена тамырынан аҡҡан ҡанды туҡтатыу сараһының нескәлектәрен ҡайһы берәүҙәрҙең белеп етмәүе лә бар бит әле. Яраны ҡыҫып бәйләгәндән һуң да ҡан туҡтамаһа, йәрәхәттән юғарыраҡ урынға (тик яланғас тәнгә түгел) жгут һалына, тик уны бер сәғәттән дә оҙағыраҡ торорға ярамай. Күп осраҡта, ашығыс ярҙам машинаһы килеп еткәнсе, ваҡытында һәм дөрөҫ күрһәтелгән тәүге ҡотҡарыу саралары кеше ғүмерен һаҡлап ҡалырға булышлыҡ итә - шуны иҫтән сығармайыҡ. Тағы ла шуны өҫтәп, йәйге осор айырыуса балаларға иғтибарлы булыу кәрәклеген әйтер инем. Бер үҙҙәрен генә һыу инергә, еләк-емеш йыйырға урманға сығарып ебәреү - ҙур аҡылһыҙлыҡ ул. Улар янында мотлаҡ өлкәндәр булырға тейешлекте иҫтән сығармағыҙ. Бала-сағаға ярамаған емеш-еләк, үлән һәм бәшмәк ашап, ағыуланыуға юл ҡуймағыҙ, зинһар.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*ЙӨҘ ЙЫЛЛЫҠҠА - ЙӨҘ ОБЪЕКТ*

# ШҮЛГӘНТАШ МӘМЕРЙӘҺЕН...

## музейға һыйҙырмаҡсыбыҙ

**Һеҙ һүрәттә күргән был һыҙмалар - "Шүлгәнташ мәмерйәһе" тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығы проекттары. Музей-ҡурсаулыҡ быйылғы йыл башынан үҙ эшен башланы. Ә уны төҙөү идеяһы бынан бер нисә йыл элек үк йәмәғәтселек иғтибарына еткерелгәйне.**

2016 йылда музей-ҡурсаулыҡтың проекты эшләнде, әле ул проект дәүләт экспертизаһына тапшырылды. Ағымдағы йылда төҙөлөш эштәре башланыр тип көтөлә. Проект "Йөҙ йыллыҡҡа - йөҙ объект" программаһы сиктәрендә тормошҡа ашырыла. Әлеге көндә Шүлгәнташ мәмерйәһендәге һүрәтле залдар туристар өсөн ябыҡ булғанлыҡтан, мәмерйәләге һүрәттәрҙе, хатта шул һүрәттәр төшөрөлгән стена өлөштәрен мәмерйәнән ситтә урынлашҡан музейҙа бар тулылығында тергеҙеп, туристарға тәҡдим итеү маҡсатында төҙөлә лә инде был комплекс.

Тағы бер маҡсат: ошо заманса музей коплексы төҙөмәй тороп, ЮНЕСКО-ның профиль комитеты белгестәре мәмерйәне ойошманың Бөтә донъя ҡомартҡылары исемлегенә индермәйәсәк. Күсермәләр эшләүҙе халыҡ-ара белгес, Францияның күсермәләр рәссамы, Chauvet мәмерйәһе экспозицияларын эшләүсе Ален Далис үҙе етәкләйәсәк. Шулай итеп, Шүлгәнташыбыҙҙың тарихи мираҫын килер быуындарға ҡалдырыу һәм донъяға танытыу маҡсатында мәмерйә һынлы мәмерйәне затлы, зиннәтле, заманса музей комплексына һыйҙырмаҡсыбыҙ.

**Фәүзил МАЛИКОВ,**
**"Шүлгәнташ мәмерйәһе" тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығы директоры вазифаһын башҡарыусы.**



12+

✓ **Көньяҡты билдәләү өсөн ҡырмысҡа иләүенә күҙ һалыу ҙа етә, ул ағастың тап шул тарафында булыр. Ағастың көньяҡҡа ҡараған ботаҡтары ҡуйыраҡ булыр, ә мүк ағас олононоң төньяҡ тарафын һайлап ҡына үҫә.**



ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# ТОТОҒОҘ ҘА ЭШЛӘГЕҘ!



**"Территория смыслов на Клязьме" Бөтә Рәсәй йәштәр мәғариф форумында быйыл да Башҡортостан йәштәренең проекттары еңеү яуланы. Шулар араһында "Иҡтисад һәм бизнес өлкәһендәге йәш белгестәр" сменаһында ҡатнашыусы Байрас Азаматов үҙ проекты өсөн йөҙ меңлек грант отто. Унан форум тураһында һораштыҡ.**

- Форум, йылдағыса, тәьҫораттарға бай булды. Быйыл мин байтаҡ фекер алышыуҙарҙа, лекцияларҙа, күренекле спикерҙар менән осрашыуҙарҙа, проекттар яҡлауҙа ҡатнаштым. Был майҙансыҡта күтәрелгән мөһим мәсьәләләргә килгәндә, күп фекерҙәр киләсәккә ҡағылышлы булды. Был аңлашыла ла, сөнки бизнес тәҙөгән кеше бер нисә йылға алдан уйлап, төрлө үҙгәрештәргә әҙер булырға тейеш. Беҙгә яңы йәмғиәт шарттарында нисек эш итергә кәрәклеге, нимә ул криптовалюта, бизнесҡа яңы технологиялар һәм эштә еңеләйткән саралар индереү тураһында һөйләнеләр. Ә проекттар яҡлауға килгәндә, быйыл барыһы 250-нән ашыу эш тәҡдим ителде, шуларҙың 154-ен ҡаранылар, 80 проекты яҡлауға һайлап алдылар һәм 20 генә проектҡа аҡсалата ярҙам бирелде. Ошо ике тиҫтә проект араһында Башҡортостан йәштәренең өс проекты булыуы яҡшы күрһәткес, тип уйлайым. Был тиклем күп проект араһында беҙҙең эштәр алға сығыуының сәбәбе еренә еткереп башҡарылған булыуҙан тыш, "Иҡтисад һәм бизнес өлкәһендәге йәш белгестәр" сменаһында социаль проекттарға өҫтөнлөк биреләүҙә ине. Бик күп ҡатнашыусылар килем алыуға ҡоролған бизнес-проекттар эшләп, төшөп ҡалды. Сөнки проекттарҙың маҡсаты аҡса, табыш алыу булырға тейеш түгел, ә йәштәрҙе эшҡыуарлыҡ өлкәһенә йәлеп итеү ине.

Мин "Йәш эшҡыуарҙар өсөн форсайт мәктәп" проектын тәҡдим иттем. Был бизнес өлкәһендәге мәғариф саралар аша йәштәрҙе эшҡыуарлыҡ эшенә ылыҡтырыу, үҙ эштәрен асырға ярҙам итеүҙе маҡсат итеп ҡуйған проект. Ошондай мәктәп асыу идеяһына арабыҙҙағы әүҙем йәштәрҙең йәлап эшҡыуарлыҡҡа күсеүе сәбәпсе булды. Бынан бер нисә йыл элек Йәш яҡташтар берләктәре ассоциацияһында ла бизнес-клуб булған, унда шөғөлләнгән йәштәрҙең күбеһе бөгөнгә көндә шәхси эшҡыуарҙар булып киткән. Шуға киләсәктә проектымды тормошҡа ашырһаҡ, файҙаһын һәм һөҙөмтәләрен күрербеҙ, тип ышанам. Әйткәндәй, проект эшен әҙерләгәндә Владимир өлкәһе йәштәре менән аралашып, кәңәшләшергә тура килгәйне, уларҙа ошоға оҡшаш сара күптән тормошҡа ашырылған. Йәш эшҡыуарҙар өсөн форсайт мәктәп эшенә ҡушылырға теләүселәрҙең ғаризаларын быйыл октябрь айында уҡ ҡабул итә башлаясаҡбыҙ. Әйтергә кәрәк, форсайт мәктәптең эше бөтәһе өсөн дә бик ҡыҙыҡлы, фәһемле һәм кәрәкле итеп төҙөләсәк. Проект сиктәрендә төрлө экскурсиялар, файҙалы осрашыуҙар, иҡтисадҡа ҡағылышлы уйындар һәм хатта бизнес-китапхана булдырыу ҡаралған. Ғөмүмән алғанда, йәштәр мәғариф форумына йомғаҡ яһап, йәштәштәремә шуны әйтергә теләйем: тотоғоҙ ҙа эшләгеҙ! Килеп сығырмы, юҡмы тип шикләнеп, күп уйлап, ҡулға килеп эләккән мөмкинлекте ысҡындырмағыҙ. Килеп сыҡмаһа - бер ҡурҡынысы ла юҡ, иң мөһиме, һәр ваҡыт хәрәкәттә булырға, камиллашырға кәрәк.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Йәйге миҙгелдең һәр кем белергә тейешле хәүефһеҙлек саралары хаҡында ниҙәр әйтер инегеҙ?



(Башы 1-се биттә).

***Ринат ҒӘБДУЛЛИН, һәүәскәр турист, Белорет районы Тирлән ҡасабаһы:*** Йәй күптәр өйҙә сыҙап ултырырға теләмәй, тәбиғәт ҡосағына ашыға. Ләкин тәбиғәт бай һәм матур ғына түгел, үҙендә тейешле тота белмәһән, бик ҡырыҫ та ул. Бер ни уйлап тормайынса, еңел-елпе генә урманға сығып китеп, ҡайһы берәүҙәр бәләгә юлыға, аҙаша. Әгәр һеҙ походҡа йәки еләкемеш, бәшмәк йыйырға йыйынаһығыҙ икән, бер ниндәй әҙерлекһеҙ сығып китергә ярамай. Тиҙ генә, яҡынға ғына барып киләм, тип уйлаған хәлдә лә хатта. Йәтеш һәм еңел генә рюкзак йөрөтөгөҙ. Унын төбөндә һәр саҡ компас, шырпы, бысаҡ, йылы кейем, зарядкаланған кеҫә телефоныгыҙ һәм бер-ике телем икмәк булһын. Арҡаға артмаҡлаһаң, уның бер ауырлығы ла юҡ. Нисек кейенеү хаҡында ла уйларға кәрәк. Серәкәй һәм талпандан һаҡланыу өсөн оҙон еңле һәм балаҡлы кейем, итек йә уңайлы кроссовка, баш кейеме хаҡында онотмағыҙ. Баш йә өҫ кейеменең әллә ҡайҙан күренеп торған сағыу төҫтәгеһен һайлағыҙ. Ҡайһы берәүҙәр бәшмәк артынан мауығып китеп, урман төпкөлөнә үк инеп китә лә, һәтигәнсә аҙашып та ҡуя. Шулай булмаһын өсөн барған юлығыҙҙа ниндәйҙер билдәләргә иғтибар итегеҙ, уларҙы иҫегеҙҙә ҡалдырырға тырышығыҙ. Бик булмаһа, һалып алған әлеге үткер генә бысаҡ менән ағас олондарында билдәләр ҡалдырып барығыҙ. Аҙашып киткән хәлдә лә үҙегеҙҙе тыныс тотоғоҙ, ғауғаламағыҙ - был иң беренсе шарт ундай хәлдә. Компасығыҙ булмаһа ла йүнәлештәрҙе билдәләй торған бик күп ысулдар барлығын иҫегеҙгә төшөрөргә тура килер. Мәҫәлән, көньяҡты билдәләү өсөн ҡырмысҡа иләүенә күҙ һалыу ҙа етә, ул ағастың тап шул тарафында булыр. Ағастың көньяҡҡа ҡараған ботаҡтары ҡуйыраҡ булыр, ә мүк ағас олононоң төньяҡ тарафын һайлап ҡына үҫә. Ҡояшҡа, йондоҙҙарға ҡарап та үҙегеҙгә кәрәк йүнәлеште табырға мөмкин. Ә шулай ҙа аҙашырға яҙмаһын инде. Шуға ла тәбиғәткә яңғыҙ-ярым түгел, ә бергәләп сығыу хәйерлерәк. Күңелле лә, хәүефһеҙерәк тә. Бергәләшеп ултырып тамаҡ туйҙырып алыуы ғына ни тора. Урман-ҡырҙа йөрөгәндә аппетит та асылып китә бит ул, тик был осраҡта ла хәүеф һағалай: сыҫҡан биҙгегенән һаҡ булығыҙ, йыуылмаған емеш-еләк ашамағыҙ.

Әйткәндәй, үҙегеҙгә таныш булмаған бәшмәктәрҙе лә йыймағыҙ. Емеш, бәшмәк мәлендә ағыуланыу осраҡтары йыш була, шуны иҫтән сығармағыҙ. Аяҙ көндәр теләйем һеҙгә, тинем дә тағы бер нәмә иҫкә төштө. Йәшенле ямғыр көтмәҫтән генә килеп сығыусан, шуға ла Хоҙай йәшен уҡтарынан һаҡлаһын һәммәбеҙҙе лә. Ә был стихиянан нисек һаҡланыу юлын, моғайын, беләһегеҙҙәр: яңғыҙ ағас төбөндә тормағыҙ, был ваҡытта һыу инмәгеҙ берүк.

***Рөстәм УТӘШЕВ, Өфө дәүләт авиация-техник университеты студенты:*** Студент тормошо үҙегеҙгә мәғлүм: стипендияға йәшәп булмай, шуға күрә йәй ауылға ла ҡайтып тормай, егеттәр менән берәй эшкә урынлашыу яғын ҡарайбыҙ. Спорт менән шөғөлләнәм, йөҙөү буйынса разрядҡа эйәмен. Был минә йәй көнө пляждарҙа һыу инеүселәрҙе ҡурсалау, хәстәрләү мөмкинлеген бирә. Анығыраҡ әйткәндә, мин - һыуға батыусыларҙы ҡотҡарыусы. Ҡотҡарыу станцияһында ваҡытлыса булһа ла ни бары икенсе йыл ғына эшләйем, ләкин шул аҙ ғына ваҡытта ла бик күп ғибрәтле хәлдәр күрергә тура килде. Бар бит шундай дыуамалдар: үҙ ғүмерҙәрен һуҡыр тин шайы ла күрмәйҙәр. Былай тип мин иң беренсе иҫерек килеш һыу инергә батырсылыҡ иткән ир-егеттәр хаҡында әйтәм. Рәсми статистика хәбәр итеүенсә, быйылғы һыу инеү сезоны башланғандан бирле ике тиҫтәнән ашыу кеше батып үлгән дә инде. Ә бит йәйҙең яртыһында һыу инерлек көндәр ҙә булмаһы. Төп сәбәптәрҙең береһе тип әлеге лә баяғы эскелек фактары килтерелә. Иҫеректең ни, шул инде - бер кемде лә тыңлап тормай, ә бына балаларҙы көн дә иҫкәртеп кенә торһон ине ата-әсәләре. Беренсенән, уларҙы ҙур һыу янында ҡараусыҙ ҡалдырырға ла ярамай. Таныш түгел урындарҙа һыу инеү, бигерәк тә ярҙан һикереү, сумыу бик хәүефле икенен дә белергә тейеш бала. Тәрән, өйөрмәле, ылымыҡ баҫҡан һыу яткылыҡтарын, ғөмүмән, урап үтергә кәрәк. Көслө ел-дауыл сыҡҡанда, йәшенле ямғыр ваҡытында да һыу инеү ҙә батырлыҡ түгел һис тә. Ҡайһы берәүҙәрҙе һыу ингәндә көҙән йыйыра, был саҡта ярҙағыларҙы ярҙамға саҡырырға, ә үҙенә салҡан әйләнеп ярға табан йөҙөргә һәм бер үк ваҡытта аяҡты ыуғылап, массаж яһарға тырышырға кәрәк. Ошоноң кеүек сараларҙы һәр кемгә лә белеү мотлаҡ, ә шулай ҙа иң яҡшыһы - оҫта итеп йөҙөргә өйрәнеү.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов төбәктә коррупцияға ҡаршы эш итеү буйынса эште координациялау комиссияһы ултырышын үткәрҙе. Ул мәнфәғәттәрҙең конфликтын асыҡлауға һәм уға юл ҡуймауға арналды. Башҡортостан Башлығы 6 июлдә муниципаль кимәлдә коррупцияға ҡаршы эш итеү йәһәтенән бер нисә республика законына үҙгәрештәр индерелеүен хәбәр итте. Хәҙер муниципаль вазифа биләгән кешеләр республика етәксеһенә килемдәр һәм сығымдар тураһында мәғлүмәт бирергә тейеш.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Өфө районының "Алексеевский" совхозында теплица комплексының икенсе сиратын асыу тантанаһында ҡатнашты. "Бөгөн "Алексеевский" совхозының иҡтисади хәле маҡтанырлыҡ түгел. Унан да бигерәк, ҡайһы бер күрһәткестәр буйынса бөлгөнлөккә төшөп бара ине. Шуға ла совхозды акционерҙар милкенә тапшырырға һәм баҙарҙа аҡса эҙләргә, модернизациялау эшендә ҡатнашырға теләгән партнерҙар йәлеп итергә хәл ителде. Әгәр быны эшләмәһәк, "Алексеевский" үҙенең конкурентлыҡ һәләтен юғалтасаҡ", - тине Рөстәм Хәмитов.

✓Башҡортостан Хөкүмәтендә "Асылыкүл курорт-паркы" туристик-рекреация кластерын үҫтереү буйынса килешеүгә ҡул ҡуйыу тантанаһы булды. Килешеү Дәүләкән, Әлшәй, Бәләбәй һәм Бүздәк райондарының хеҙмәттәшлек итеүенә ҡағыла. "Экология, инвестициялар һәм "Асылыкүл" тәбиғәт паркын үҫтереү" консорциумы рәйесе Марат Сәхәпов күлдең Рәсәйҙең туристарҙы йәлеп иткән ун һыу яткылығы исемлегенә инеүен билдәләне.

✓Башҡортостан Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының халыҡ мәшғүллеге мәғлүмәт порталында менеджерҙар өсөн яңы вакансиялар баҫылған. "Ренессанс жизнь" страховкалау компанияһының Нефтекамалағы филиалына страховкалау агенттары төркөмө менеджеры талап ителә. Өфөләге "220 Вольт" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенә һатыуҙар өлкәһендә өс йылдан кәм булмаған эш тәжрибәһенә эйә менеджер талап ителә. Баш ҡалалағы "Респект" хоҡуҡ компанияһы менеджерҙы эшкә ала.

✓ *Егеттәребеҙҙе лә, ҡыҙҙарыбыҙҙы ла бала саҡтан үҙ ереңдең ҡәҙерен белергә, ауылыңа, районыңа, республикаңа үҙеңдеке итеп ҡарарға өйрәтеп, йәғни патриоттар итеп үҫтерергә кәрәк.*



*БЫЛ АЙҘА*

# КӨН ЯМАНЫ КИТЕР УЛ...

**Йәй булдымы, юҡмы, әммә уның һуңғы айы тыуа, йәмәғәт! Августа, йәғни, халыҡса әйткәндә, урағайҙа, билдәле сәбәптәр буйынса, ихтимал, бер-ике аҙнаға һуңлабыраҡ уңыш йыйыу эштәре башланыр, тип көтөлә.**



Быйылғы йәйҙең ғәҙәти булмағанса шулай ямғырлы һәм һалҡын килеүенә аптырарға ла түгел бер уйлағанда. Тәбиғәт үҙенә ҡарата кешелекһеҙ һәм аяуһыҙ мөнәсәбәткә ҡарата ана шулай яуаплай, тигән фаразда хәҡиҡәт юҡ түгелдер. Ҡойма яуындар, һыу баҫыу, ураган кеүек күренештәр ҡайҙалыр алыҫ ҡитғаларҙа ғына була һәм ул беҙгә ҡағылмай, тип уйлаған бәхетле йылдарыбыҙ артта ҡалды. Бындай афәт беҙҙең тормошҡа ла бәреп килеп инде һәм беҙҙең климат шарттарына ла яраҡлашырға уйлай. Ошо йәй эсендә Мәскәүҙе генә лә нисә тапҡыр һыу баҫты! Мәскәү яны райондарының береһендә көслө дауыл тотош бер йортто мебеле һәм көнкүреш техникаһы менән бергә осороп алып китте, тип яҙҙы гәзиттәр. Ә кеше ҡорбандары һаны күпмегә барып етте! Бөгөн күренекле ғалимдар һәм климат торошо буйынса эксперттар ҡыҙыу бәхәстәр алып бара, үҙ фараздары буйынса фекер алыша. Улар планета кимәлендә һауа торошоноң ҡырҡа үҙгәрешенә йоғонтоһо булған төп сәбәптәрҙе атай һәм уларҙың күпселегендә кеше факторын танырға мәжбүрҙәр. Шул уҡ ваҡытта белгестәр климат үҙгәрештәренең кешелек донъяһын ҡотолғоһоҙ һәләкәткә илтеү хәүефен ядро һуғышы афәтенә ҡарағанда ла яманыраҡ тип иҫәпләй.

Әйткәндәй, Хиросима һәм Нагасаки фажиғәһе тарих хәтерендә һаман ҡанһырай әле. Иллә мәгәр ошо ике ямандың береһен дә Хоҙай күрһәтмәһен. Көн яманы китер, әҙәм яманы баҫмаһын донъяны. Яманлыҡҡа ҡаршы берләшеп ҡаршы тороу шарт. Шуға ла Хиросима көнө **(6)** Ядро ҡоралын тыйыу өсөн ғәмәлдәрҙең Бөтөн донъя көнө лә тип иғлан ителгән. Иң изге һәм кешелекле һөнәр эйәләренең "Табиптар - тыныслыҡ өсөн" тигән Бөтөн донъя көнөнөң дә тап шул датаға тап килеүе осраҡлы түгелдер. Дөрөҫөн әйткәндә, Ер йөҙөндә тыныслыҡ тантана итһен өсөн Ядро ҡоралын һынауҙарға ҡаршы халыҡ-ара көн **(29)** иғлан итеү генә етмәйҙер ул бөгөн. Планетабыҙ именлеге өсөн прогрессив кешелек донъяһы тарафынан тамырынан яңы һәм йоғонтоло саралар күрелергә тейештер.

Бына ошондай глобаль проблемалар фонында ил-ара ыҙғыштар, ҡара-ҡаршы әрепләшеү-ғәйепләшеүҙәр, нисектер, ваҡ ығы-зығы, кәмит һымаҡ ҡына тойолоп киткәндәй, ләкин ҙур бәләләрҙең бәләкәй генә сәбәптән килеп сығыу ихтималлығын да онотորға ярамай. Шуға ла илебеҙ ҡеүәтен арттырыу, уның хәрби потенциалын, данын үҫтереү өҫтөнлөклө бурыстарҙың береһе тип ҡарала. Рәсәй Хәрби Көстәренең тыл көнө **(1)**, Һауа-десант ғәскәрҙәре көнө **(2)**, Милли полиция көнө **(4)**, Хәрби-һауа көстәре көнө **(12)**, Рәсәй Һауа флоты көнө **(20)**, Рәсәй Хәрби Көстәренең спецназ көнө **(29)** тап шул маҡсаттарҙан сығып календарь биттәренә индерелгәндер ҙә. Ил тарихында Рәсәйҙең хәрби дан көнө булып уйылған тағы бер дата билдәләнә августа. Ул - совет ғәскәрҙәренең шанлы 1943 йылғы Курск һуғышында бик ҙур юғалтыуҙар аша немец фашистарын тар-мар иткән көн **(23)**. Тап ошо тиңһеҙ алыш Бөйөк Ватан һуғышында киҫкен һынылышҡа сәбәп булып, Еңеү көнөн яҡынайта ла инде.

Әленән-әле иҡтисади күрсәткәре, ауыр һынауҙары тетрәндереп торһа ла, шөкөр, ете тиҫтә йылдан ашыу илебеҙ именлектә, тыныс хеҙмәттә көн күрә. Ана шундай тыныс һөнәр эйәләренән был айҙа Тимер юлсы **(6)**, Башҡортостан умартасыһы һәм Төҙөүсе **(13)**, Археолог **(15)** һәм Шахтер **(27)**, шулай уҡ Ветеринария хеҙмәткәрҙәре **(31)** байрам итә һөнәри көндәрен. Халыҡ-ара йәштәр көнөнөң **(12)** Физкультурниктар көнө менән тап килеүе лә яҡшы күренеш, сөнки спорт һәм йәшлек һәр саҡ бергә атлай. Фотография **(19)**, Кино **(27)** һәм Блог **(31)** көндәренең дә үҙ аудиторияһы бар, ижади уңыштар, илһам юлдаш булһын уларға, тигән теләктә ҡалайыҡ.

Тағы ла бер матур һәм зарур көн хаҡында телгә алып китмәү яҙыҡ булыр ине. Үкенескә, календарҙа исем өсөн генә теркәп ҡуйылған кеүек үк, беҙ ҙә ул хаҡта телгә алып китеү менән генә сикләнергә мәжбүрбеҙ, сөнки был юҫыҡта аныҡ һәм эшлекле бер генә ғәмәлдең дә башҡарылғаны, тормошҡа ашырылғаны юҡ. Донъяның Халыҡ-ара аҫаба халыҡтары көнө **(9)** иң боронғо һәм ҡеүәтле ҡәүемдәрҙән булған башҡорттарға ла туранан-тура ҡағыла. Республикабыҙ уның исемен йөрөткән төп этнос булараҡ, халҡыбыҙ бөгөн һис ҡасан булмағанса дәүләт яҡлауына мохтаж. Был тәү сиратта милләтте милләт итеүсе туған телебеҙ яҙмышына ла, уның аҫабалыҡ айышына ла, шуға бәйле төп халыҡ булараҡ көн күргән тыуған ере, уның байлыҡтары һәм тәбиғи ресурстарына законлы өлөшө һәм, ахыр килеп, юғары етәкселек, парламент һәм урындарҙағы власть органдары составында күҙәтелергә тейешле вәкиллек нисбәте мәсьәләләренә лә ҡағыла. Беҙҙә был йүнәлештә төп халыҡтарҙың хоҡуҡтары тураһында Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының Генераль ассамблеяһы тарафынан 2007 йылда ҡабул ителгән Декларация положениелары һанға һуғыла, тип әйтеп булмай...

**Шулай итеп, урағай юбилярҙары:**

**1 -** Башҡортостандың халыҡ артисы, режиссер **Азат Нәҙерғоловҡа** - 55 йәш (1955).

**16 -** Тарих фәндәре кандидаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Инга Гвоздиковаға** - 80 йәш (1937).

**18 -** М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артисы, БАССР-ҙың халыҡ артисы **Рәмзиә Хисамоваға** - 70 йәш (1947).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ҠУЛДАН КИЛӘ!*

# ЭШЛӘГӘНГӘ...

## эш ҡарышмай

**Һүҙ ҙә юҡ, бөгөнгө глобалләшеү заманында, иңебеҙгә әллә күпме һынауҙар ишелеп, колхоздар юҡҡа сығып, ауылдарыбыҙ бөлөп барған саҡта, көн итер, йән аҫырар өсөн үтә лә тырыш булыу кәрәк. Бигерәк тә йәштәргә ауыр бөгөн, үҙ йүнен йүнләр өсөн байтаҡ ауырлыҡтар аша үтергә мәжбүр улар ҙа. Әммә кешемен тигән кеше бер ниндәй ауырлыҡтар алдында ла бөгөлөп ҡалырға тейеш түгел. Ошо үҙгәрештәр алдында бер аҙ баҙап ҡалған милләттәштәр ҙә хәҙер шуны аңланы, башты күтәрҙе, тубыҡтарҙы турайтты, Аллаға шөкөр.**

Минең тыуған яғымда, Стәрлебаш районында, мәҫәлән, бөгөнгө көндә икмәк бешереү комбинаты, май һыҡтырыу, бауырһаҡ бешереү цехтары, билмән эшләү, милли ҡамыр аштары цехы бик әүҙем эшләй. Көнбағыш майы һыҡтырыу менән 4 эшҡыуар шөғөлләнә. Бигерәк тә Ибрай ауылынан Сабирйәнов Илнур Әхтәм улы бик күп йылдар дауамында ауылдаштарын ғына түгел, Ырымбур өлкәһенә, Татарстанға, Стәрлетамаҡ, Салауат, Ишембай ҡалаларына ла үҙ продукцияһын еткерә, шулай уҡ Ибрай ауылы халҡын эш урыны менән тәьмин итә. Ошондай егеткә маҡтау һүҙҙәренән башҡа ни әйтәһең инде! Стәрлебаш үҙәгендә йәшәгән Буранголовтарҙың бауырһаҡ бешереү цехы тураһында ла республикала ғына түгел, күрше өлкәләрҙә лә яҡшы беләләр.

Шулай уҡ икмәк бешереү комбинаты бик күп йылдар халыҡҡа тоғро хеҙмәт итә. Арымай-талмай эшләгән Фархшатовтар райондың һәр ауылына күпереп бешкән икмәктәрен тарата. Ошо ғаилә райондың өс тиҫтәнән ашыу кешеһен эш менән тәьмин итә. Райондаштарым шулай уҡ солоҡсолоҡ, мебель эшләү, тимер бөгөү эштәре менән дә әүҙем шөғөлләнә.

Үҙемә килгәндә, Ҡабыҡҡыуыш ауылы егетемен. Төп һөнәрем буйынса уҡытыусы, 20 йылға яҡын мәктәптә эшләгәндән һуң, тирә-яғыма күҙ һалып, уйға ҡалдым. Тормошомдо икенсе яҡҡа үҙгәртеү уйы мине күптән борсой ине һәм, ниһайәт, ҡатыным Рузилә менән уртаҡ бер фекергә килдек. Тәүге йылда иң төп ризығыбыҙ - икмәк бешереү ысулдарын өйрәнеп, эшкә тотондоҡ. Бөгөнгө көндә эшебеҙ төрлөләнде, яйға һалынды, магазин асып ебәрҙек. Үҙебеҙҙең ғаиләбеҙҙән тыш, 8 кешегә эш урыны булдырҙыҡ. Ауылымдың эшсән апайҙары бешергән бәлештәрҙе бик күп ауылдарҙа теләп һатып алалар хәҙер.

Милләттәштәргә: "Барыһы ла үҙебеҙҙән тора. Әҙергә бәҙерҙе көтөп ятыу замандары артта ҡалды. Үҙ юлыбыҙҙы табайыҡ, үҙебеҙгә үҙебеҙ эш ойоштораййыҡ, диванда уфтанып, күктән төшкәнде көтөп ултырмайыҡ", тип өндәшке килә. Ә бит теләгән кешегә үҙ эшен булдырыу өсөн бөтә мөмкинлектәр бар. Эйе, эшкә ең һыҙғанған кеше алдында бюрократик кәртәләр ҙә юҡ түгел. Булдыҡлы, өмөтлө, айыҡ тормош алып барған, спорт менән шөғөлләнгән уҡымышлы егеттәребеҙ, үкенескә ҡаршы, ошондай кәртәләрҙе аша сығырға ҡыймай, ауылдан ситкә сығып китеү яғын ҡарай. Себер тарафтарына юллана. Ситтә лә яҡшы тормош әҙерләп ҡуймағандар, әлбиттә. Шуға ла егеттәребеҙҙе лә, ҡыҙҙарыбыҙҙы ла бала саҡтан үҙ ереңдең ҡәҙерен белергә, ауылыңа, районыңа, республикаңа үҙеңдеке итеп ҡарарға өйрәтеп, йәғни патриоттар итеп үҫтерергә кәрәк. Ер-һыуыбыҙҙы ҡайғыртҡан йәштәребеҙ үҙ төйәгендә ғаилә ҡороп, рухлы балалар тәрбиәләп, үҙ эштәрен асып йәшәһә, киләсәгебеҙ яҡты, өмөтлө булыр.

**Дамир ИШЕМБӘТОВ,**
**шәхси эшҡыуар.**
**Стәрлебаш районы Ҡабыҡҡыуыш ауылы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓26 июль - берҙәм дәүләт имтиханы һөҙөмтәләре буйынса ғына юғары уҡыу йортона инеүсе абитуриенттар өсөн документтар ҡабул итеүҙең һуңғы көнө. 27 июлдә вуздар үҙҙәренең рәсми сайттарында һәм мәғлүмәт стендтарында уҡырға ингәндәрҙең исемлеген, һәр һынау һәм шәхси ҡаҙаныштар өсөн балдар һанын баҫтырып сығара башланы. 28 июлдә ике йәки унан күберәк вузға ғариза биргән айырым хоҡуҡҡа эйә абитуриенттарҙан һәм маҡсатлы ҡабул итеү квоталары сиктәрендә уҡырға инеүселәрҙән алыныуға ризалыҡ тураһында ғаризалар ҡабул итеү тамамланды. Артабан дөйөм конкурс буйынса уҡырға инеүсе абитуриенттарҙы ҡабул итеүҙең тәүге этабы башлана.

✓Йылдан ашыу ваҡыт элек "Ласселсбергер" концерны етәкселеге Башҡортостанда мөһим инвестиция пландары хаҡында белдергәйне. Әбйәлил районында аҡ цемент нигеҙендә ҡоро төҙөлөш ҡатышмаларын сығарыу буйынса завод төҙөү планлаштырыла.

✓Өфөнөң Черниковка биҫтәһендә М. Горький урамын төҙөкләндереү тамамланды. Юл төҙөүселәр йөрөй торған юлды һәм тротуарҙарҙы киңәйтте, бордюрҙар ҡуйҙы, асфальт япмаһын алмаштырҙы. Бынан тыш, коляскалар менән йөрөү өсөн шарттар булдырылған.

✓Башҡортостанда "Ҡала төҙөү сәйәсәте, халыҡтың йәшәйеше өсөн уңайлы мөхит булдырыу һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡты үҫтереү" номинацияһында "Иң яҡшы муниципаль тәжрибә" Бөтә Рәсәй конкурсының төбәк этабы еңеүселәре билдәләнде. Беренсе категорияла Күмертау, икенсе категорияла Әбйәлил районының Аҫҡар ауылы еңеүсе тип танылды. Башҡортостан хөкүмәтендә хәбәр итеүҙәренсә, комиссия республикалағы 24 ҡала округының һәм 11 ауыл биләмәһенең ғаризаларын ҡараған.

✓Мәскәүҙең иң гүзәл урындарының береһендә, "Коломенское" музей-ҡурсаулығында, "Һабантуй-2017" байрамы уҙғарылды. Уны ойоштороусылар булып Мәскәү Хөкүмәте ярҙамында Башҡортостан һәм Татарстан сығыш яһаны. Башҡортостандың Стәрлетамаҡ һәм Мәләүез райондары һабантуйҙың колоритлы программаһын тәьмин итте, музей-ҡурсаулыҡта этнографик ауыл, тирмәләр, халыҡ һөнәрҙәрен, милли кейемдәрҙең, милли аш-һыуҙың үҙенсәлеген сағылдырған күргәҙмәләр ойошторҙо. Яр буйындағы стилләштерелгән башҡорт ауылынан халыҡ өҙөлмәне.

**"Башинформ"дан.**

*✓ Дүрт йыл эсендә Өфөлә йорт эргәләрендә 130 спорт объекты төҙөлгән. Улар араһында - турник комплекстары, универсаль спорт, стритбол, футбол менән шөғөлләнеү майҙансыҡтары, йүгереү һәм велосипед юлдары бар.*



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## АЛКОГОЛЬ ҺАТМАҪҠА!

**Рәсәй Федерацияһы Һаулыҡ һаҡлау министрлығында ял көндәрендә спиртлы эсемлектәрҙе һатыуҙы тыйыу мәсьәләһе тикшерелә.**

Был тәҡдим Халыҡтың сәләмәт тормош рәүешен формалаштырыу стратегияһы проектына индерелгән. Документты әҙерләүсе профилактик медицина дәүләт ғилми-тикшеренеү үҙәге фекеренсә, бындай сара һөҙөмтәле булыуы мөмкин. Урындағы властарҙың алкоголде һатыу урынын һәм ваҡытын сикләү хоҡуғы бар, әммә тотош ил буйынса тыйыуҙар бер тәүлектән артмай, ә закон киске сәғәт 11-ҙән иртәнге 8-гә тиклем генә тыя.

## ЭШЛӘЙ БИР, ӘЙҘӘ!

**"Рәсәй Федерацияһында дәүләт граждан хеҙмәте тураһында" Федераль Закондың статьяһына үҙгәртеүҙәр индереү тураһында" Федераль закон үҙ көсөнә инде.**

Уға ярашлы, билдәле йәшкә еткән дәүләт хеҙмәткәренә хеҙмәт ваҡыты үҙенең рөхсәте менән оҙайтылыуы мөмкин, әммә 70 йәшкә тиклем генә. Быйылғы йылдың ғинуарынан бындай норма федераль граждан хеҙмәткәрҙәре өсөн генә ғәмәлдә булһа, хәҙер барыһына ла ҡағыла. Төбәктәрҙә 70 йәшкә тиклем дәүләт хеҙмәтендә булыуға республика парламенты рәйесе Константин Толкачев шулай тип аңлатма бирә: "Федераль һәм төбәк граждан хеҙмәте дәүләт хеҙмәтенең бер төрө булып иҫәпләнә. Был ҡарар законға элек индерелгән төҙәтеүҙәрҙең логик дауамы булып тора. Ошо норманың актуаллеге хаҡында һүҙ йөрөткәндә, ул үҙен аҡлай, сөнки тәжрибәле етәкселәр өсөн 65 йәш - пенсияға сыға торған йәш түгел. Кешенең сәләмәтлеге яҡшы, теләге бар икән, артабан да эшләргә, йәштәр менән тәжрибә уртаҡлашырға кәрәк. Әлбиттә, һәр осраҡта ҡарар шәхсән ҡабул ителергә тейеш. Закон тап ошондай һайлап алыуҙы күҙаллай, ә барыһы өсөн дә түгел".

## БАҪСАНДЫ ӨЙӨҢ ИТ

**Дәүләт Думаһы һәм Федерация Советы "урман амнистияһы" менән бер үк ваҡытта баҡсасылыҡ тураһында закон ҡабул итте.**

Ул 2019 йылдың 1 ғинуарынан баҡса участкаларында йорт һалырға мөмкинлек бирә. Унда пропискаға торорға була. Бының өсөн урындағы ауыл советында рөхсәт алырға кәрәк. Баҡса йортон рөхсәтһеҙ ҙә төҙөргә мөмкин. Торлаҡ һәм баҡса йортон теркәү өсөн кадастр инженеры әҙерләгән техник план талап ителә, тип аңлатма бирҙеләр Росреестрҙа. Закон шулай уҡ баҡса йортон йәшәргә яраҡлы итеп таныуҙы күҙ уңында тота. Йәки - киреһенсә. Тейешле тәртип Хөкүмәттә раҫланырға тейеш.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Краснодарҙа "Кала мөхите" Бөтә Рәсәй партия форумы үтте. Уның эшендә БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Рәйесе Константин Толкачев, РФ Дәүләт Думаһы депутаты Павел Качкаев, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов, шулай уҡ "Берҙәм Рәсәй"ҙең ҡала мөхитен төҙөкләндереүгә йүнәлтелгән федераль проекттары координаторҙары, экспертар, Дәүләт Думаһы депутаттары, РФ Хөкүмәте вәкилдәре, РФ Төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы, РФ субъекттарының закондар сығарыу һәм башҡарма властары вәкилдәре, муниципалитеттар хакимиәттәре башлыҡтары - барлығы илдең 85 төбәгенән меңгә яҡын кеше ҡатнашты.**

# БАШҠАЛАРҘЫ ҠАРАП...

## үҙебеҙҙе күрһәтеп



Форум эше пленар ултырыш һәм дүрт фекер алышыу майҙансығы форматында ойошторолдо. "Уңайлы ихата" секцияһында йорттарҙа йәшәүселәрҙе үҙ ихаталарын төҙөкләндереү эшенә йәлеп итеүҙең заманса ысулдары, ҡулланылған иң яҡшы тәжрибәләр, шулай уҡ торлаҡ райондарҙы комплексы төҙөкләндереү мөмкинлектәре һәм ғәмәлдәге сикләүҙәр буйынса фекер алышынды. "Кала йәмәғәт киңлеге" майҙансығы халыҡтың һәм бизнес вәкилдәрен ҡаланы төҙөкләндереү проекттарына йәлеп итеү мәсьәләләренә арналды. "Бәләкәй ҡалаларҙы төҙөкләндереү" секцияһында ҡала мөхитен, бигерәк тә йәмәғәт урындарын файҙалы итеп тултырыу, үҫтереү, халыҡтың күпләп ял иткән урындарын (парктар, скверҙар) төҙөкләндереүгә федераль ярҙам күләмен арттырыу мөмкинлеге ҡаралды. Бында Белорет һәм Нефтекама ҡалалары мэрҙары үҙҙәренең тәжрибәһе менән уртаҡлашты. "Кала мөхите: сифат стандарты һәм индексы" майҙансығында 2025 йылға тиклем Ҡала үҫеше стратегияһын формалаштырыу, "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Кала мөхите" проекты на федераль финанс ярҙамын арттырыу, һәр муниципаль берәмектең ҡала мөхите сифаты торошо мониторингы системаһын булдырыу мәсьәләләре күн үҙәгенә ҡуйылды.

Өфөнөң дә бөтә был йүнәлештәрҙә уртаҡлашыр тәжрибәһе етерлек. Мәҫәлән, "Рәсәй ҡалаларының яңы юлдары" проекты сиктәрендә 1186 ихата, йәғни 1500 самаһы күп фатирлы йорттоң эргә-тирә территорияһы, төҙөкләндерелгән. Республика баш ҡалаһында шулай уҡ урындағы инициативаларға нигеҙләнгән "Аныҡ эштәр" проекты тормошҡа ашырыла. Дүрт йыл эсендә Өфөлә йорт эргәләрендә 130 спорт объекты төҙөлгән. Улар араһында - турник комплекстары, универсаль спорт, стритбол, футбол менән шөғөлләнеү майҙансыҡтары, йүгереү һәм велосипед юлдары бар. "Кала мөхите" федераль проекты сиктәрендә Башҡортостандың баш ҡалаһында муниципаль программа ҡабул ителгән. Уға ярашлы, быйыл 105 күп фатирлы йорттоң 81 ихатаһы төҙөкләндереләсәк. Бөгөн программаға ингән йорттар эргәһендәге территорияларҙа әҙерлек эштәре алып барыла, гараждар алына, ҡарт ағастар ҡырҡыла. Ремонт эштәрен теләгән бер кеше ихатаға ҡуйылған видеокамера ярҙамында күҙәтә ала.

ТӨРЛӨҺӨНӨН

## БЫЛ НИНДӘЙ ВӘХШИЛЕК!




**Өфөлә вандаллыҡ осраҡтары арта, һөҙөмтәлә ҡала хужалығының матди зыян күләме күбәйә.**

Торлаҡ ойошмалары йыл һайын подъездарҙағы тәҙрәләрҙә быяла ҡуйыу, дөйөм йорт милкен ремонтлау өсөн 1,5 миллион һумдан ашыу өҫтәмә аҡса тотона. Коммуналь хужалыҡ тураһында һүҙ алып барғанда, йылдың беренсе кварталында вандалдар тарафынан 2 миллион һумдан ашыу зыян күрелгән, икенсе квартал йомғаҡтарын ҡуҡҡандан һуң, был сумма 3 миллион 674 һумдан артып китә.

Өфөлә вандалдарҙан зыян күрмәгән бер генә аллея ла, бер генә парк та юҡ. Уларҙа эскәмйәләр, яҡтыртҡыстар, сүп һауыттары, ҡоймаларҙың декоратив биҙәктәре урлана йә ҡыйратыла, клумбалар һәм сәскәләктәр боҙола, евроконтейнерҙар яндырыла.

Әгәр һеҙ вандаллыҡ йәки йәмәғәт тәртибен, дөйөм йорт милкен боҙоу шаһиты булһағыҙ, хоҡуҡ һаҡлау органдарына мөрәжәғәт итегеҙ, сөнки был осраҡтарҙа хоҡуҡ боҙоусыға закон буйынса яза бирелә, уларға штраф һалына йәки һаҡ аҫтына алыналар.

Икенсе мөһим мәсьәлә - юлдарҙы капиталь ремонтлаған участкаларҙа автомобилселәрҙең тәртибе, сөнки иҫкәртеүҙәргә ҡарамаҫтан, улар яңы ғына һалынған асфальт өҫтөнән үтеп китергә лә күп һорамай. Ә был иһә юл ҡатламының боҙолоуына килтерә, соҡор барлыҡҡа килеү мөмкинлеген арттыра. Асфальт-бетон ҡатламы ныҡлы ҡатһын өсөн бер тәүлек ваҡыт кәрәк. Был осраҡта ла ЮХХДИ экипаждары капремонт участкаларында тәртип боҙоусыларҙы асыҡлаясаҡ.

## ҠЫРЫЛАБЫҘ...



**Ярты йыл эсендә Башҡортостанда спиртлы эсемлектәр эсеү һөҙөмтәһендә 94 кеше вафат булған.**

Дөйөм алғанда, ошо осорҙа алкоголь менән ағыуланыусы 652 осраҡ теркәлгән, шул иҫәптән 14 йәшкә тиклемге 11 бала. Бындай мәғлүмәттәр хаҡында БР буйынса Роспотребнадзор идаралығы хәбәр итә. Ағыуланыуҙарҙың этил спиртына - 91,1, суррогат алкоголенә - 2,3, метанол спиртына - 3,7, метил спиртына - 0,9, башҡа асыҡланмаған спирттар өлөшөнә 2 процент тура килә. Мониторинг һөҙөмтәләре буйынса, алты айҙа төбәктә химик этиологиялы ҡискен ағыуланыуҙарҙың 1327 осрағы теркәлгән, 227 кеше вафат булған, уларҙың 41,4 проценты спиртлы эсемлектәр эсеү һөҙөмтәһендә яҡты донъя менән хушлашҡан.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓30 июлдә Өфөлә "Тылсымлы донъя" паркында ("Кала советы" туҡталышы) "Игеҙәктәр фестивале" була. Фестиваль дүртенсе тапҡыр уҙғарыла. Был игеҙ, өс һәм хатта дүрт игеҙ балалар менән танышыу өсөн яҡшы мөмкинлек. Көндөҙгө сәғәт 12-лә башлана.

✓Хеҙмәт министрлығы рәсәйҙәрҙең 2018 йылда нисек ял итәсәген билдәләне. Йыл дауамында илебеҙ халҡын бер нисә оҙайлы каникул көтә. Беренсенән, киләһе йылда Яңы йыл каникулдары 30 декабрҙән 8 ғинуарға тиклем дауам итә. Февраль каникулдары 23-нән 25-нә тиклем, мартта - 8-нән 11-нә ҡәҙәр, майҙа - 29 апрелдән 2 майға тиклем. Еңеү көнөндә - ял бер генә көн, 9 май шаршамбыға тура килә. Июндә өс ял көн көтөлә - 10-нан 12-нә тиклем, ноябрҙә иһә 3-нән 5-нә ҡәҙәр. 2018 йылда рәсәйҙәр 28 өҫтәмә ял көнө алаcаҡ. Ысынында иһә был - икенсе отпуск.

✓Башҡортостанда капиталь ремонт өсөн иғәнәләрҙе түләү ябайлашты. Хәҙер милек хужалары капиталь ремонтҡа иғәнә түләү өсөн квитанцияны үҙенең электрон почтаһына алып, уны өйҙән сыҡмайынса түләй ала. Түләү документын алыу ысулын үҙгәртеү өсөн Төбәк операторы офисына йәки "Электрон ҡабул итеү" бүлеге менән файҙаланып, рәсми сайт аша ғариза менән мөрәжәғәт итергә кәрәк. Капиталь ремонтҡа иғәнәне шәхси иҫәптең номерын йәиһә бинаның адресын хәбәр итеп, Һаҡлыҡ банкының теләһә ниндәй бүлексәһендә комиссияһыҙ түләргә була.

✓Өфөнөң Октябрь районы биләмәһендә эттәрҙе йөрөтөү өсөн махсус майҙансыҡ төҙөләсәк. Өфө хакимиәтендә хәбәр итеүҙәренсә, дүрт аяҡлы дуҫтар өсөн махсуслаштырылған майҙансыҡ Рихард Зорге урамындағы "Өфө йүкәләре" сәләмәтлек һуҡмағында урынлашасаҡ. Биләмәне кәртәләү һәм күнекмәләр, өйрәтеү һәм ял итеү өсөн кәрәкле инвентарь менән йыһазландырыу күҙ уңында тотола. Киләсәктә был зона эт аҫрауселарҙың осрашыу һәм кинолог конкурстарын ойоштороу урыны булырға тейеш.

✓Башҡортостанда шәхси йорттар баҙары аҡрынлап осһоҙланыуын дауам итә. Һуңғы бер йыл эсендә (2016 йылдың йәйенән алып) ул хатта бер аҙға арҡкан: "Фатирҙар донъяһы" федераль порталы мәғлүмәттәре буйынса, йорт хаҡының уртаса арзанайыуы 2,2% тәшкил итә.

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ*

# ҺИН НИНДӘЙҺЕҢ, ХАЛЫҠ?



**Мәғлүм булыуынса, 2015 йылдың октябрендә Рәсәйҙә халыҡтың микроиҫәбен алыу кампанияһы үтте. Сарала ил субъекттарының һайлап алынған ҡалаларында һәм ауыл биләмәләрендә айырым һайланған участкалары ҡатнашты. Бында шуны асыҡлап китеү зарур, иҫәп алыусылар иҫәп алыуҙы үҙе теләгән йортҡа йәки фатирға инеп түгел, ә махсус күрһәтмәгә ярашлы һәм бары тик даими теркәлеүе булған категория араһында ғына башҡарҙы.**

Башҡортостанда һайланмыштарға 46,4 мең кеше, йәғни 2010 йылда иҫәпкә алынған халыҡтың 1,1 проценты инә. Исемлеккә ингән 20 мең бина халҡының 2 проценты яуап биреүҙән баш тарта, 8,3 процент бина буш булып сыға йәиһә иҫәп алыусылар унда йәшәүселәрҙе тап итә алмай.

**Микроиҫәп алыу йомғаҡтары шундай картинаны күҙ алдына баҫтыра:**

• Социаль-демографик хәл. Барлығы 18,6 мең йорт хужалығы яуап бирә, бер йортҡа уртаса 2,5 кеше тура килә. Ике йәки күберәк кешенән торған хужалыҡтарҙың 46 процентында 18 йәштән йәш балалар бар, шул иҫәптән 54,6 процентында - бер генә бала, 35 процентында - ике, 10,4 процентында өс һәм унан да күберәк.

• Социаль-иҡтисади хәл. Йәшәү сығанағын күрһәтеүселәрҙең 78 процентының бер генә килем сығанағы бар. 20,6 процентының - ике, 1,4 процентының өс һәм күберәк. Бер генә сығанаҡ, ғәҙәттә, ҡала халҡына хас.

Килем сығанағы тип яуап биреүселәр йышыраҡ хеҙмәт эшмәкәрлеген билдәләй (43,4 процент), 15 процент - шәхси хужалыҡты күрһәтһә, 26,6 процент - пенсия ала, 27 процент - башҡалар ҡарауында. 15 - 72 йәшлек респонденттар араһында 64 процентты эшсе көсө алып тора (шуларҙың 93 проценты - эшләй, 7 проценты - эшһеҙ), ҡалғандар эшсе көсөнә инмәй. Улар - пенсионерҙар (50,3), белем алыусылар (19,5), үҙ хужалығында эшләүселәр йәки бала тәрбиәләүселәр (13,8).

• Тыуым һәм респонденттарҙың репродуктив пландары. 15 йәшлек һәм унан өлкән барлыҡ ҡатын-ҡыҙҙарға ла бала табыуҙары тураһында һорау бирелә. Шул йәштәге 1000 ҡатын-ҡыҙға уртаса - 1761, ә 18 - 44 йәшлек 1000 ҡатын-ҡыҙға - 1260 бала тура килә.

20 - 24 йәшлек респондент ҡатын-ҡыҙҙарҙың 70 процентының әлегә балаһы юҡ, бала тапҡандарының 1/3 өлөшөнөң бер генә балаһы бар. 25 - 29 йәшлектәрҙең 1/3 өлөшөнөң балаһы юҡ, 37 процентында бер генә бала, 26,4 процентыныҡы - 2, ни бары 5 проценты ғына 3 һәм күберәк бала тапҡан. Беренсе төркөм һөҙөмтәләре шуны күрһәтә: уҙған быуаттың 90-сы йылдарында тыуған ҡатын-ҡыҙҙар әле саҡ үҙ потенциалын файҙалана башланы.

Икенсе төркөмдәгеләрҙең, йәғни 1980 йылдарҙа тыуғандарҙың бала табыу мөмкинлектәре ҙур. 18 - 44 йәштәге ҡатын-ҡыҙҙарҙың 50,7 проценты һәм 18 - 59 йәштәге ир-аттың 48,9 проценты барлыҡ шарттар булғанда - ике, 20 процент ҡатын-ҡыҙ һәм 16,2 процент ир-ат - өс, 20 процент ҡатын-ҡыҙ һәм ир-ат бер генә бала булыуын теләй. 18 - 39 йәштәге респонденттар төркөмө ике бала табыуҙы күҙаллай: һәр мең респонденттың яртыһы ошо һанды әйтә. Икенсе яртыһы бер бала планлаштыра йәки бөтөнләй бала теләмәй. 10 - 15 процент өс бала күҙаллай. Күп бала табырға теләүселәр бик аҙ. Юғары репродуктив өмөт ауыл халҡы араһында ғына күҙәтелә.

Микроиҫәп алыу респонденттарҙың күҙаллауын һәм шарттар булғанда нисә бала табырға теләүҙәрен сағыштырыу мөмкинлеге бирә. Мәҫәлән, ике енес араһында бала табырға теләмәүселәр бөтөнләй юҡ. 1000 ир-аттың 981-е һәм шул уҡ һандан 985 ҡатын-ҡыҙ - бер, 938 ир-ат һәм 922 ҡатын-ҡыҙ - ике, 773 ир-ат һәм 667 ҡатын-ҡыҙ өс бала табырға теләүен белдерә. Йәғни өс бала табырға теләүселәр бар, әммә быны өсөн йәшәү шарттары юҡ. Ҡала халҡы өсөн дә бындай сағыштырыу килтерергә була: өс һәм унан күберәк бала табыу теләгенә йәшәү урыны һәм шарттар кәртә ҡуя.

Теләгәнсә бала табыу өсөн мөһим шарттар - улар әсәлек капиталы, икенсе йәки артабанғы балалар тыуғанда торлаҡ һатып алыу өсөн процентһыҙ ссуда, төбәк әсәлек капиталы, 3 йәшкә тиклем бала ҡарап өйҙә ултырғанда түләүле отпуск (айлыҡ түләүҙәр). Тәүге ике шарт ирҙәр өсөн дә, ҡатындар өсөн дә бер тиң әһәмиәтле тип һанала. Артабан мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларына гарантиялы урын бирелеүе, өсөнсө балаға ай һайын бирелгән төбәк түләүҙәре, ғаилә килеменең артыуы тора. Өс балалы ғаиләләргә шәхси төҙөлөш өсөн ер участкалары биреү, эшләүсе ата-әсәләр өсөн һалым льготалары ла ҙур урын биләй.

• Халыҡтың сәләмәтлек торошо. Яуап биреүселәрҙең 12 проценты тормош эшмәкәрлеген сикләүсе хроник сирҙәре булыуы, шул иҫәптән яртыһының күберәгенә инвалидлыҡ бирелгәнлеге тураһында белдерә. Хеҙмәт йәшенән оло респонденттарҙың 32 процентының тормош эшмәкәрлеген сикләүсе хроник сире бар. Хеҙмәт йәшендәгеләрҙә был күрһәткес 6,2 процент, йәшерәктәрҙә - 2,1.

Хроник сирле респонденттарҙың 35 проценты көндәлек кеше ярҙамына мохтаж. Уларҙың 96 проценты ярҙам ала. 66,2 процент осраҡта ярҙамды бергә йәшәүсе туғандары, таныштары күрһәтә. 28 процентта - айырым йортта йәшәүсе туғандары, таныштары, күршеләре ярҙам итә. 10,8 процентта - социаль хеҙмәткәрҙәр һәм медиктар, 1 процент осраҡта - махсус ялланған кешеләр.

• Этнолингвистик характеристика. Башҡортостан буйынса микроиҫәп алыуҙа 48 милләт һәм төркөм вәкиле ҡатнаша. Телдәр буйынса бирелгән һорауҙарҙа 49 позиция, һөйләшеү теле менән сағыштырғанда, республикала 33 позиция, туған тел тураһындағы яуаптарҙа 34 позиция теркәлгән. Республикала рус телен микроиҫәп алыуҙа ҡатнашыусыларҙың 97,5 проценты белә, көндәлек тормошта 88 проценты ҡуллана, туған теле тип рус телен 44,4 процент иҫәпләй. Респонденттарҙың 52,6 проценты ике һәм унан да күберәк тел белеүен күрһәтә, 36,1 процент көндәлек тормошта ике йәки күберәк тел ҡуллана.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**2015 йылда үткәрелгән Микроиҫәп алыу 2020 йылда уҙғарыласаҡ Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуға мөһим аҙым булып тора һәм уның барышында яңы алым - һорау алыу ҡағыҙҙарын планшет компьютерҙарында тултырыу һынала.**

**Ирина ҮТӘШЕВА,**
**Башҡортостанстаттың халыҡ һәм һаулыҡ һаҡлау статистикаһы бүлеге етәксеһе.**

*ҺОРАУ - ЯУАП*



# ТӨҘӨЛӨШКӘ АҠСА ҺАЛАМ...

**Һуңғы йылдарҙа төҙөлөп ятҡан йорттарҙан фатир һатып алыусылар күбәйҙе. Бындай саҡта фатир өлөшләтә төҙөлөштә ҡатнашыу килешеүе нигеҙендә һатып алына. Шул уҡ ваҡытта аҡсаларын төҙөлөшкә һалып та, ваҡытында фатирлы була алмаусылар ҙа бар. Ошондай килешеү төҙөргә теләүселәргә нимәгә иғтибар итергә кәрәк һуң?**

Башҡортостан буйынса Росреестр идаралығының ер участкаларын һәм төҙөлөштә өлөшләтә ҡатнашыуҙы теркәү бүлеге етәксеһе Эльвира Рауил ҡыҙы Смирнова белдереүенсә, Өлөшләтә төҙөлөштә ҡатнашыу килешеүе нигеҙендә килеп сыҡҡан бөтөн һорауҙар "Күп фатирлы йорттар һәм башҡа күсемһеҙ милек объекттары төҙөлөшөндә өлөшләтә ҡатнашыу тураһында"ғы Федераль закон (№214, 2004 йылдың 30 декабрендә ҡабул ителгән) тарафынан көйләнә.

Әгәр ҙә һеҙгә Өлөшләтә төҙөлөштә ҡатнашыу килешеүе урынына Инвестициялау килешеүе, Өлөшләтә ҡатнашыу тураһында алдан төҙөлгән килешеү, Фатирҙы һатыу-һатып алыу тураһында алдан төҙөлгән килешеү һ.б. төҙөргә тәҡдим итәләр икән, иғтибарлы булығыҙ. Ҡағиҙә булараҡ, бындай төҙөүсенең рөхсәт биреүсе документтары булмай.

Иҫегеҙҙә тотоғоҙ, Өлөшләтә төҙөлөштә ҡатнашыу килешеүе Күсемһеҙ милектең берҙәм дәүләт реестрында дәүләт теркәүе үткәндән һуң ғына үҙ көсөнә инә. Ошонан һуң ғына төҙөүсе компанияға аҡса күсерергә була. Килешеүҙә Росреестрҙа дәүләт тарафынан теркәү граждандарға үҙ хоҡуҡтарын һәм ҡыҙыҡһыныуҙарын яҡлауҙы тәьмин итә.

Килешеүҙә тапшырыласаҡ объекттың тасуирламаһы, төҙөүсе тарафынан уны тапшырыуҙың ваҡыты, килешеүҙең хаҡы һәм уны түләүҙең ваҡыты, тәртибе, объекттың, шулай уҡ инженер һәм технологик ҡоролмаларҙың гарантия срогы, килешеү буйынса төҙөүсенең бурыстары күрһәтелергә тейеш. Быларҙың береһе генә лә үтәлмәһә, килешеү үҙ көсөнә инә алмай һәм суд уны яраҡһыҙ тип табыуы ихтимал.

2014 йылдың 1 ғинуарынан закон тарафынан өлөшләтә төҙөлөштә ҡатнашыусыларға махсус гарантиялар, шул иҫәптән, банктың яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алыуы һәм төҙөүсенең килешеүҙә күрһәтелгән бурыстарын теүәл үтәйәсәген страховкалау билдәләнгән.

Иғтибар итегеҙ, күп фатирлы йортто төҙөү өсөн өлөшләтә төҙөлөштә ҡатнашыусыларҙан аҡса алыу өсөн төҙөүсенең билдәләнгән тәртиптә төҙөлөшкә рөхсәте, проект декларацияһының баҫылып сығыуы кәрәк. Проект декларацияһында төҙөүсе һәм төҙөлөш проекты тураһында мәғлүмәт, унда шулай уҡ төҙөүсенең йортто төҙөү өсөн граждандарҙың һәм юридик шәхестәрҙең матди сараларын йәлеп итеүҙә хоҡуҡ күләме билдәләнә. 2017 йылдың 1 ғинуарынан проект декларацияһы Башҡортостан Республикаһының Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитетында ғәмәлдәге закон талаптары буйынса килешеү үтергә тейеш.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Бауыр ауыртһа

❖ Бал менән мүк еләген ҡушып ашарға кәрәк. Көн һайын 1 стакан баллы еләк бауырҙың ауыртыуын бөтөрөр.

❖ Тырнаҡ гөлө (календула) ла файҙалы. 40 грамм самаһы кипкән үләнде 1 литр ҡайнар һыуҙа бешереп, көнөнә 3 мәртәбә 1-әр стакан эсергә.

### Яман шештән

❖ Ирен буяғыстарҙың ҡулланыу ваҡыты сыҡҡан булһа, ташлағыҙ. Уны һөртөүҙән ирендәрҙә яман шеш, ҡутыр, күпертке барлыҡҡа килә.

### Сүп инһә

❖ Сүп ингән урынға мул итеп солидол йәки дегет һылап, сепрәк менән бәйләп ҡуйырға. 1-2 сәғәттән һуң сүптең башы күренер, алып ташларға ла була.

### Һомғол бул

❖ Спортты ярат - йүгер, велосипедта йөрө. Көндө 5 минутлыҡ гимнастиканан башлап ебәр. Көнөнә 1 мәртәбә булһа ла үҙеңде тирләргә мәжбүр ит - был майҙарҙы яндыра, ҡан әйләнешеп яҡшырта.

### Оҙаҡ йәшәргә теләһәң

❖ Тоҙ ашауҙы кәмет. Был алым - ҡан баҫымы күтәрелеүгә ҡаршы иң файҙалы сара. Көндәлек норманы (3 грамм) кәметһәң, ҡан баҫымы ла яйлана, йөрәк ауырыуҙары ла кәмей.

### Баш ауыртыуы

❖ Кемдер гел башы ауырыуға зарлана. Был мәлдә 15 грамм лимон бөтнөгөнә 1 стакан ҡайнар һыу ҡушырға, урап 30 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм эсергә.

### Бетсә

❖ Бетсә йонсотһа, һары мәрүшкәне 1:5 миҡдарҙа 40 %-лы спиртта төнәтергә. Биткә сыҡҡан майлы бетсәләрҙе лә бөтөрә, бары тик даими һөртөргә генә кәрәк.

### Үҙәк көйһә

❖ 1 балғалаҡ порошок итеп төйөлгән имән сәтләүеген һөт менән эсергә була.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

### Әбү Джәхел һәм Хәмзә

Ислам дине таралған һайын, Мәккә аҡһаҡалдары менән юлбашсылары тарафынан мосолмандарға ҡаршы баҫым көсәйә. Улар мөмкин тиклем күберәк халыҡты һөсләтергә тырыша. Мөхәммәт бәйғәмбәргә "диуана", "алдаҡсы", "сихырсы", "шағир" тигән ҡушаматтар тағыла. Тик "шағир" тип мыҫҡыллауға Мәккә шағирҙары ҡаршы сыға. Уларҙың береһе, Әл-Вәлид, йыйылышта сүрәләрҙең ритм яғынан да, рифма яғынан да шиғри ҡанундарға тап килмәүен иҫбатлай һәм Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе "шағир" тип атауҙарына ризаһыҙлыҡ белдерә. Аҡһаҡалдарға уның менән ризалашырға тура килә.

Мәккә шағирҙары үҙҙәре лә мосолмандарға ҡаршы көрәш алып бара. Бер-береһе менән ярышып, улар хатта Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең улдарынан яҙыуын да иҫкә төшөрөп, илаһтар ҡәһәре, тип төртөрәләр. Әсе телле һәм үткер шиғри юлдар халыҡ араһында тиҙ тарала һәм, әйтергә кәрәк, Ислам диненең таралыуына ярайһы уҡ тотҡарлыҡ яһай.

Шуны ла билдәләп үтергә кәрәк, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе мәсхәрәләүҙә бигерәк тә Мәккәнең түбәнге ҡатламдары ихлас ҡатнаша. Хашим кеүек данлыҡлы нәҫелдән булған кешене түбәнһетеү айырыуса ләззәт килтерә уларға. Сөнки уларҙың күбеһе Хашим нәҫеленән булғандарға ла, абруй ҡаҙанып, Мәккә ҡалаһының аристократтары һаналған башҡа нәҫелдәрҙең вәкилдәренә лә мөрәжәғәт иткәндә айырыуса итәғәтлелек күрһәтергә тейеш була. Абруйлы нәҫел вәкиленән үс алып, яҙаһыҙ ҡалыу мөмкинлегенә шатлана улар. Шуға күрә саманан да арттырып ебәрәләр. Хашим нәҫеленән булғандарҙың һәм мосолмандарҙың күҙенә күренмәйенсә, йәшенеп, боҫоп, Мөхәммәт бәйғәмбәргә бысраҡ ырғыталар, төндәрен уның өйө алдына бысраҡ түгәләр.

Ҡөрәйш ырыуының данлыҡлы нәҫелдәре былай түбәнселеккә бармай, әлбиттә. Улар асыҡтан-асыҡ әрләй, бәхәсләшә, көлә. Тик уның Хашим нәҫеленән булыуын иҫтә тотоп, ҡул күтәрмәйҙәр.

Тик шулай ҙа бер-ике тапҡыр ҡаты ғына бәрелештәр булғылай. Шуларҙың береһендә Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе Әбү Бәкир, кәүҙәһе менән ҡаплап, ҡотҡарып алып ҡала.

- "Минең Раббым - Алла", тигән һүҙҙәре өсөн генә кешене үлтерергә уйлайһығыҙмы ни? - тип ҡат-ҡат ҡысҡыра ул, һөжүм итеүселәрҙе ситкә этеләп.

Аҙаҡтан Әбү Бәкирҙең ҡыҙҙарының береһе һөйләүенсә, шул ваҡиғанан һуң атаһы өйгә ҡайтҡанда, уның һаҡалы урыны-урыны менән йолҡҡоланғанлығын күрә. Күрәһең, был юлы, эш һуғышҡа тиклем барып етмәһә лә, тартҡылашыу бик ярһыу барғандыр.

Әбү Бәкирҙе мосолмандар, хөрмәтләп, "Ислам намыҫы" тип атай. Байтаҡ йылдар үтеп, Мөхәммәт бәйғәмбәр был донъяны ҡалдырғандан һуң, ул, Ҡәғбәләге Изге ташты үпкәндә, шул ташҡа мөрәжәғәт итеп:

- Һинең бары тик таш икәнеңде беләм мин. Тик мин Алла Илсеһенең һине үбеүен үҙ күҙҙәрем менән күрҙем. Һине бары тик шуға ғына үбәм, - тип әйтер булған.

Бер көн Мөхәммәт бәйғәмбәр Мәккә урамы буйлап яңғыҙы ғына китеп барғанда, Әбү Джәхел тигән кеше осрай һәм уны мыҫҡыллай башлай. Мөхәммәт бәйғәмбәр өндәшмәгән һайын, ул ҡыҙа бара. Шунан һуң иң алама һүҙҙәр әйтеп, оятһыҙ ишаралар яһап, мәсхәрәләргә тотона. Мөхәммәт бәйғәмбәр был юлы ла бер ни өндәшмәй ҡарап тора ла, юлын дауам итә. Әбү Джәхел Ҡәғбә янына дуҫтары менән осрашыуға китә.

Ошо ваҡыт Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең олатаһы - баһадир Хәмзә һунарҙан ҡайта. Ҡайтып килешләй уны бер ҡатын туҡтата ла, Әбү Джәхелдең ҡыланышы тураһында һөйләй.

**(Дауамы бар).**

АРҘАҠЛЫ ШӘХЕСТӘРЕБЕҘ

# ЗӘБИХУЛЛА ИСҠУЖИН

## Уның шәжәрәһе тураһында һүҙҙе дауам итеп

**Филология фәндәре кандидаты Гөлсәсәк Дәүләтбай ҡыҙы Саламатова республика матбуғатында баҫтырған мәҡәләләре менән онотолоуға дусар ителгән, ҡыҫҡа ғына ғүмере эсендә шағир, ҡурайсы, ғалим һәм йәмәғәт эшмәкәре булараҡ билдәлелек алған Зәбихулла Исҡужиндың (1911-1936) тормош юлын, эшмәкәрлеген һәм әсе яҙмышын яҡтыртты, уның быға тиклем билдәле булмаған әҙәби, музыкаль, ғилми һ.б. мираҫының ҙур өлөшөн халыҡҡа ҡайтарҙы. Ғалимәнең яҙмаларында Зәбихулла Исҡужиндың хәҙерге Йылайыр районы Мәкүт ауылында тыуып үҫеүе, ата-әсәһе, бөгөнгө көнгә билдәле булған туғандары хаҡында ла хәбәр ителә.**



Гөлсәсәк Саламатова баҫтырған материалдарҙан билдәле булыуынса, Зәбихулла Исҡужин яңы стиль буйынса 1911 йылдың 3 ғинуарында Йылайыр кантоны Мәкүт ауылында донъяға килгән. Иҫке стилгә күсерһәк, был дата 1910 йылдың 22 декабренә тап килә. Ошо урында уҡ шуны билдәләп китәйек, Мәкүт - Түңгәүер ҡәбиләһе башҡорттары Ялан Түңгәүер ырыуының иң боронғо ауылдарының береһе, документарҙа ул XVIII быуаттың уртаһында уҡ теркәлгән. 1910-1911 йылдарҙа Йылайыр кантоны исемле административ берәмек булмай әле, архив материалдарына ярашлы, ул йылдарҙа хәҙерге Йылайыр районындағы Мәкүт ауылы Ырымбур губернаһы Орск өйәҙенең Түңгәүер улысы составында була. Зәбихулла Исҡужиндың ата-бабалары кем булған? Быны белеү өсөн беҙ архив документарына, Түңгәүер ырыуының беҙҙең көндәргәсә һаҡланған ҡулъяҙма шәжәрәһенең күсермәһенә, Исҡужиндарҙа һаҡланған яҙмаларға таянып эш иттек.

Шәжәрә ебенең боронғораҡ осорҙарын өйрәнеү һөҙөмтәһендә түбәндәге факттар билдәле булды: Зәбихулланың төп ата-бабаһы Мәкүт үҙ заманының күренекле шәхесе булған, ауыл XVIII б. уртаһында уҡ уның исемен йөрөткән. Документарға ярашлы, Мәкүт Асҡар улы 1735-1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалы етәкселәренең береһе, Түңгәүер ырыуы батыры Күсәп Солтанғолов менән берлектә башҡорттоң азатлығы өсөн көрәшеп, Мәкүт батыр исеме менән тарихҡа ингән.

Мәкүт батыр 1755 йылғы башҡорт ихтилалында ла әүҙем ҡатнашҡан. Иҫәнғол ауылы крайҙы өйрәнеүсеһе Винер Байгилдин табып, беҙгә өйрәнергә тапшырған 1765 йылға ҡараған республика архивы документынан күренеүенсә (уға оло рәхмәтлебеҙ), 1755 йылғы ихтилалды баҫтырыу барышында Мәкүт батыр ғаиләһе менән башҡа бик күп баш күтәреүсе башҡорттар (түңгәүерҙәр, бөрйәндәр, үҫәргәндәр, ҡыпсаҡтар һәм тамъяндар) менән берлектә Яйыҡ йылғаһын кисеп, ҡаҙаҡ далаларына күсенергә мәжбүр була. Документта Нуғай даруғаһы Өфө өйәҙенең Түңгәүер улысы старшинаһы Татлымбәт Әлимбәтов командаһы Мәкүт ауылы башҡорто 20 йәшлек Ейәнбай Мәкүт улының Ҡырғыҙ-ҡайсаҡ (ҡаҙаҡ) урҙаһынан ҡасып, тыуған яғына ҡайтып килгәнендә Рәсәй сик һаҡсылары тарафынан тотолоуы теркәлгән. Ейәнбайҙың допроста һөйләүенсә, уға 10 йәш булғанда, 1755 йылғы башҡорт ихтилалын баҫтырыу барышындағы карателдәрҙең эҙәрлекләүе сәбәпле, ул ата-әсәһе һәм башҡа башҡорттар менән бергә Яйыҡ йылғаһын кисеп сығып, Ҡырғыҙ-ҡайсаҡ (ҡаҙаҡ) урҙаһына ҡаса. Туған күреп, яҡлау эҙләп килгән башҡорттарҙы, ҡаҙаҡтар бүлешеп алып, төрлө яҡтарға ҡоллоҡҡа оҙаталар (документта "ҡоллок" тигән һүҙ ҡулланылмаһа ла былың шулай икәне аңлашылып тора). Ейәнбай тәүҙә Түлән улысы Ҡунзебай исемле ҡаҙаҡта 1 йыл йәшәй, аҙаҡ уны Уаҡан улысы ҡаҙағы Ҡалбай Түнәбәков һатып ала. Ҡалбай ҡаҙаҡта йәшәгәнендә Ейәнбай тыуған яғы Түңгәүер улысына,

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ



# КЕСЕРТКӘН ТУҠЫМА ЭШЛӘҮ...

## башҡорттарҙың бер шөғөлө

**Башҡорттарҙа кесерткән үләнен хужалыҡ эштәрендә ҡулланыу күренеше киң таралған. Ҡатындар һәм балалар кесерткән үләнен йыйып алып, унан еп иләйҙәр. Балыҡ ауҙары эшләү өсөн был ептәрҙән туҡылған материал бик ҡулай иҫәпләнә. 1769 йылдың декабрь айында мин комиссия менән башҡорттар йәшәгән ерҙәр буйлап сәйәхәт иттем һәм башҡорттарҙың кесерткән үләненән еп иләүҙәренә бер нисә тапҡыр шаһит булғаным бар. Кесерткән үләне Башҡортостанда бик күп үҫә һәм мин был үләндә йыйыу, киптереү, еп иләү ысулы хаҡында ҡат-ҡат һорашып яҙып алдым. Белгән-күргәндәрем хаҡында мин Ирекле иҡтисади йәмғиәткә рапорт тапшырҙым.**

Кесерткән үләне яландарҙа һәм сүплектәрҙә, ҡыуаҡтар, ҡомалаҡтар янында үҫә. Ул әллә ни ҡалын һәм оҙон булмай - бейеклеге ҡайһы саҡ өс аршинғаса етә. Кесерткән йәй айҙарында бесән өлгөргән мәлдәрҙә һәм август айҙарында ныҡлап үҫә. Башҡорт ҡатындары һәм балалар кесерткәнде тамыры менән йолҡоп ала ла көлтәләргә бәйләй һәм кесерткән үҫкән ҡыуаҡ янында уҡ ҡалдырып китә. Етен эшкәрткәндәгесә, кесерткәнде һыуларға һәм таҫлап һалып киптерергә кәрәкмәй. Ҡыуаҡтар янында һөйөп киптерелгән кесерткәнде өйгә алып ҡайталар һәм күләгәле ергә һалалар. Кесерткән эшкәртелеүгә әҙер булғас, һыйыр малының һөйәген юныл, кесерткәнде уртаға ярып алар һәм, айыу ҡурайын таҙартҡан ише, тышын һыҙыралар. Һыҙырылған сүсте оҙаҡ ҡына киле менән төйөргә кәрәк. Таҙартҡандан һуң, сүбәк иләү эше башлана.

Башҡортостанда шулай уҡ ҡырағай киндер үҫә. Башҡорттар уны ҡайһы саҡ тарпан тип тә йөрөтә. Ошо ҡырағай киндерҙе лә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йыйып ала, һыулай, йәйеп һала һәм, киптергәс, иләү өсөн эшкәртә. Ләкин башҡорттар барыбер кесерткән үләненән иләнгән епте ныҡ һәм сифатлы тип һанай һәм һәр саҡ уға өҫтөнлөк бирә. Киләһе йәй башҡорттар янына барғанда киндер еп иләү ысулы тураһында яҡшылап һорашып, Ирекле иҡтисад йәмғиәтенә тапшырырға иҫәп тотам.

Минең фекеремсә, беҙҙең Рәсәйҙә лә кесерткән үләне хужалыҡ эшендә әүҙем файҙалана алыр ине. Беҙҙең кесерткән дә башҡорт кесерткәненән әллә ни айырылмай. Башҡорт кесерткәненең буйға бер аҙ оҙон булыуын

**✓ Һатыусалдан таралғандарҙың быуындан-быуынға бирелеүсе тарханлыҡ дәрәжәһенә лайыҡ булыуы күренә. Бынан сығып, Һәрекәй, Һаҡкол, Көсөктөң һәм уларҙан таралғандарҙың да тархан булыуын билдәләргә мөмкин.**



туғандары янына ҡайтып йәшәү ниәте менән ҡасып китә. Ейәнбай Мәксүтовтың эше тикшерелгәндән һуң, 1765 йылдың 23 августында уға тыуған яғына ҡайтып йәшәү өсөн рөхсәт документы - "билет" тапшырыла һәм ул тыуған ауылы Мәксүткә ҡайта ала. Документта Ейәнбайҙың ата-әсәһе, башҡа туғандарының яҙмышы хаҡында мәғлүмәт юҡ. Мәксүттең башҡа улдары - Ейәнғол (1755 йылғы) менән Йәнгилденең (яҡынса 1740 йылдарҙа тыуған) ошо уҡ ауылда йәшәп, уларҙан күп балалар таралыуынан сығып, уларҙың да, Мәксүт батырҙың да ҡаҙаҡтарҙан имен-һау әйләнеп ҡайтыуын фаразларға була. Быны халыҡ хәтере лә дәлилләй: яҡташыбыҙ, билдәле журналист С. Ярмуллин тарафынан Мәксүт ауылында яҙып алынған легендала Мәксүтте Көләс исемле ҡатыны менән бергә баҫҡынсы ҡаҙаҡтар урлап алып китәләр һәм улар ҡаҙаҡтарҙа 40 йыл хеҙмәтсе булып йөрөй, ҡаҙаҡтар Мәксүтте үлтерергә уйлағас, улар тыуған яҡтарына ҡасып ҡайталар, тип һөйләнелә.

Шулай итеп, Ейәнбай Мәксүт улы үҙ заманында батырлыҡ күрһәтеп, ҡаҙаҡ ҡоллоғонан ҡасып ҡотолмаған булһа, ауылына ҡайтып, ғаилә ҡороп йәшәүен дауам итмәһә, бөгөн Зәбихулла Исҡужин исемле шәхес беҙгә билдәле булмаҫ ине...

Артабан Зәбихулланың тағы ла боронғораҡ дәүерҙәге ата-бабаларына күҙ һалайыҡ. Түңгәүер ырыуының ҡулъяҙма шәжәрәһенән мәғлүм булыуынса, Мәксүттең атаһы Асҡар булған. Был исем документтар менән дә дәлилләнә. 1816 йылғы ревизияла Мәксүттең бер туған ҡустылары 1725 йылғы Исламғол Асҡар улы (улы Әҙел Исламголов (1764 йылғы), хәҙерге Хәйбулла районы Әҙел ауылын нигеҙләүсе) һәм 1739 йылғы Бүкәнбай Асҡаров (улы сотник Ишкилде (1778 йылғы) һ.б. теркәлгән.

Түңгәүер шәжәрәһе буйынса Асҡарҙың ата-бабалары: Көсөк - Һаҡкол - Һәрекәй - Һатыусал - Ҡустәнә батыр - Иламан - Хаҡколай (икенсе исеме Ҡара төлкө) - Түңгәүер - Ҡуңғрат. XIX б. рус тикшеренеүсеһе П.С. Назаров билдәләүенсә лә, Түңгәүерҙең атаһы Ҡуңғрат бей булған. XIX б. рус тарихсыһы В.В. Вельяминов-Зернов баҫтырған башҡорт тархандары тураһындағы документтар буйынса, Һатыусалдан таралғандарҙың XVII-XVIII бб. Ҡырым, Азов һәм Швед яуҙарында ҡатнашҡандары өсөн быуындан-быуынға бирелеүсе тарханлыҡ дәрәжәһенә лайыҡ булыуы күренә. Бынан сығып, Һәрекәй, Һаҡкол, Көсөктөң һәм уларҙан таралғандарҙың да тархан булыуын билдәләргә мөмкин. Шулай итеп, Мәксүт батыр Асҡаровтың ата-бабалары тарханлыҡ дәрәжәһенә эйә булған. Артабан да был дәрәжә уларҙың тоҡомдарында һаҡланған булырға тейеш. Мәҫәлән, Һатыусалдың Ситәй исемле улынан таралған тоҡомдан булған Түңгәүер улысы Исҡужа ауылында йәшәүсе Йәнгилде Бөтөков 1816 йылда ла быуындан-быуынға күсеп килеүсе тарханлыҡ дәрәжәһен йөрөткән.

Артабан был эште теүәлләп ҡуйыу маҡсатында, Зәбихулланың бер туғандары хаҡында ентекләберәк ҡарап үтергә кәрәктер. Бының өсөн беҙ Мәксүт ауылы мәсетендә XIX быуатта гәрәп графикаһында яҙылған метрика китаптарын махсус рәүештә өйрәндек. Был эштә Зәбихулла Исҡужиндың яҡын туғандары Рафиҡ Имаметдин улы һәм Гәзиз Йомағужа улы Исҡужиндарҙың, архив хеҙмәткәре Зөфәр Ғәтиәтуллиндың ярҙамы ҙур булды.

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, Зәбихулланың атаһы, 1920 йылда мәрхүм булған Ғәбделғәзим Ғибаҙулла улының тыуған йылын билдәләп булманы. XIX б. икенсе яртыһында тәҙелгән метрика китаптары беҙҙең көндәргәсә тулыһынса килеп етмәгән, һаҡланғандарында был турала мәғлүмәт юҡ. Яҡынса билдәләгәндә, уның тыуған ваҡыты 1869 йылдан да һуң булмаҫҡа тейеш. Ырымбур өлкәһе дәүләт архивында беҙҙең тарафтан табылған бер документҡа ярашлы, Ғәбделғәзим Ғибаҙулла улы Ишкужин 1907 йылда Түңгәүер улысы ерҙәрен межалау эшенә Мәксүт ауылы башҡорттарының "уполномоченный"ы сифатында йәлеп ителгән. Шуныһы ҡыҙыҡлы, документтарҙа уның тамғаһы ла бар. Ул түңгәүерҙәрҙең төп тамғаһы - айтамғаның осона һәм уртаһына вертикаль ике һыҙыҡ өҫтәп яһалған булған.

Архив документтары буйынса, 1889 йылда Ғәбделғәзим менән Сәбиләнең ғаиләһендә Сәмиғә исемле ҡыҙ тыуа. Тимәк, ул - Ғәбделғәзимдең беҙгә билдәле булған иң өлкән балаһы. Артабан был ғаиләлә 1891 йылда Шәрифулла, 1893 йылда Хәйбулла (Хәбибулла), 1898 йылда Рәхимйән, 1904 йылда Хәмизулла, 1911 йылда - Зәбихулла донъяға килә.

Шулай итеп, беҙ архив документтарын, ҡулъяҙма шәжәрәне өйрәнеп, Зәбихулла Исҡужиндың шәжәрә ебен Түңгәүер һәм Ҡуңғрат бейҙәргәсә бәйләп байҡай алдыҡ. Зәбихулла Исҡужиндың ата-бабалары данлы булған, улар түңгәүерҙәрҙең төп ауылдарының береһе булған һәм бөгөн дә үҙенең ғалимдары, йырсылары, ҡурайсылары менән билдәлелек алған Мәксүтте һәм тағы бер нисә ауылды нигеҙләгән, аралары алдынғы, уҡымышлы шәхестәр, дин әһелдәре, азатлыҡ көрәшселәре, яугирҙар, ҡурайсылар байтаҡ булған. Зәбихулла Исҡужиндың ата-бабалары һәм туғандары 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнаша, I Донъя, Граждандар, Бөйөк Ватан һуғыштарында ла әүҙем көрәшә, араларында орден-миҙалдар менән наградланыусылар, офицерҙар бар, ил азатлығы өсөн күптәр яу яланында баштарын һала. Уларҙың тарихы ла айырым өйрәнелергә тейеш.

Һүҙҙе йомғаҡлап, башҡорт халҡының арҙаҡлы ир-егеттәренең береһе, күп өлкәлә талант эйәһе булған Зәбихулла Исҡужиндың шәжәрәһе тәҙәлдә, тип әйтә алабыҙ. Унда барлығы 200 яҡын исем асыҡланды. Бында, әлбиттә, тура нәҫел ебен генә күрһәтә алабыҙ: Зәбихулла (1911) - Ғәбделғәзим (яҡынса 1869-1920) - Ғибаҙулла - Дуҫмөхәммәт (1817, указлы мөәзин) - Ишкужа (1773, мөәзин) - Ейәнбай (1745) - Мәксүт батыр (яҡынса 1690-1775. 1735-1740, 1755 йылдарҙағы башҡорт ихтилалдары батыры) - Асҡар - Көсөк - Һаҡкол - Һәрекәй - Һатыусал тархан - Ҡустәнә батыр - Иламан - Хаҡколай (Ҡара төлкө) - Түңгәүер бей - Ҡуңғрат бей.

Зәбихулла Исҡужиндың ҡатыны Сараның һәм ҡыҙы Алһыуҙың 1936 йылдан һуңғы яҙмышы әлегә билдәһеҙ булып ҡала. Аллаһ бойорһа, Алһыу Зәбихулла ҡыҙы Исҡужинанан таралған нәҫел дә киләсәктә һис шикһеҙ табылыр, тигән өмөттә ҡәмәйек.

**Фуат СӨЛӘЙМӘНОВ,**
**тарих фәндәре кандидаты.**

урындағы климаттың үҙенсәлектәре менән аңлатып була. Башҡортостанда тупраҡ уңдырышлы, бай - унда кесерткән генә түгел, башҡа үҫемлектәр ҙә иркенләп үҫә. Беҙҙең алпауыттар һәм ауыл ерендә йәшәүсе башҡа хужалыҡ әйәләре кесерткәндән әллә күпме файҙа күрер ине. Киләһе йыл мин шулай уҡ иләнгән кесерткән ебен һәм туҡымаларын Ирекле иктисад йәмғиәтенә ебәрәсәкмен.

Кесерткән тураһында хәбәрҙар булмаған кеше юҡтыр. Немец теленда кесерткән "төпһәле"ләр бүленешенә инә. Урыҫ теленә тәржемә ителгән Савариев лексиконы экстрактында түбәндәге мәғлүмәт бәйән ителә: Голландияла йәшәүсе халыҡ, Гальбия йылғаһы буйлап коммерция менән шөғөлләнеү маҡсатында Ялов короллегенә барып, башҡа әйберҙәр менән бер рәттән, кесерткәндән иләнгән тауарҙар алып ҡайтыра тырыша. Иң боронғо яҙмаларҙа уҡ кесерткән туҡыманан яһалған карап елкәндәре тураһында телгә алып киткәндәр. Һинд һәм Европаның иң сифатлы туҡымаларының береһе - кесейә (йоҡа, үтә күренмәле туҡыма) немец телендә Rebeltuch, йәғни "кесерткәнле" тигән атама менән йөрөй. Тимәк, кесерткәндән ямалған туҡыма борон-борондан уҡ таныш булған күренеш.

Кесерткән бик күп үҫә торған сүп үләне һәм унда мохтажлыҡ бер ҡасан да тыумаясаҡ. Шулай булғас, кесерткән үләне етенгә һәм киндергә ҡарағанда ла күпкә отошлораҡ материал булып сыға - бер аршинын бер нисә тингә алып була. Беренсенән, ул бик арзан материал булһа, икенсенән, ул ныҡлығы менән айырылып тора - кесерткән сүсенән һуғылған күлдәкте йыл әйләнәһенә сисмәй кейеп йөрөргә мөмкин һәм ул озаҡ ваҡыт туҙмаясаҡ. Өсөнсөнән, кесерткәндән яһалған туҡыманы эшләп сығарыу исулы бик ябай һәм уны һәр бер кеше енел генә тормошҡа ашыра ала.

Әлбиттә, һәр яңы ысулға ҡаршы килеүселәр табылып ҡына тора. Ҡайһы берәүҙәр кесерткәндән туҡыма яһауҙа ниндәйҙер ҡыйынлыҡтар таба, йәиһә бер ни белмәйенсә, белгән булып ҡыланып, ниндәйҙер һығымталар яһаған була. Бәғзе берәүҙәр кесерткәндән туҡыма һуғыуы бик ауыр һәм ҡатмарлы эш, тип һөйләй. Һәр бер эш үҙенсә ауыр булмаһа, эш буламы һуң инде? Башҡалар кесерткәндән һуғылған туҡыма тәндә ҡыҙҙыра һәм ышҡый, тигән була. Әммә, миненсә, ерҙә ул туҡыма тәнгә берәй төрлө зарарлы эшләр булһа, башҡорттар уны йыл дауамында сисмәй кеймәҫ ине, тип уйлайым. Шуға күрә лә, Ирекле иҡтисади йәмғиәт минең әҙерләгән яҙмаларҙы уҡығандан һуң, тейешле һығымталар яһар, тигән өмөттәмен.

**Петр РЫЧКОВ.**



**Петр Иванович Рычков (1712 - 1777)** - билдәле географ, натуралист, тарихсы, иҡтисадсы, этнограф. Ярлы Вологда сауҙагәре ғаиләһендә тыуа. 1720 йылда Рычковтар ғаиләһе Мәскәүгә күсенеп килә һәм талантлы малай сит телдәрҙе, иҡтисадты өйрәнә. Сенаттың обер-секретары И.К. Кириллов менән танышыуы Павел Рычков тормошонда хәл иткес роль уйнай - 1734 йылда Кириллов Ырымбур экспедицияһын төҙөй һәм йәш Петрҙың таланттарын иҫәпкә алып, уны бухгалтер вазифаһына саҡыра. П.И. Рычков, канцелярия һәм бухгалтерия эштәре менән шөғөлләнеү менән бер рәттән, фәнни эшмәкәрлек менән дә ихлас ҡыҙыҡһына, геодезия, картография серҙәренә төшөнөргә ваҡыт таба. Уның менән И.К. Кириллов ҡына түгел, В.Н. Татищев, В.А. Урусов, Л.Я. Сойманов, И.И. Неплюевтар бик дуҫ була. Талантлы йәмәғәт кешеләре менән аралашыу Павел Рычков өсөн эҙһеҙ үтмәй - шуның арҡамында ул ғалим дәрәжәһенә күтәрелә. Тикшеренеүсе, администратор вазифаларын йөкмәгән Рычковтың эшмәкәрлегенә Башҡортостан менән тығыҙ бәйле була. Ул йыш ҡына Башҡортостанда була, хатта бер аҙ Өфөлә лә йәшәп ала. Шунлыҡтан уның ғилми эшмәкәрлегендә Башҡортостан буйынса тикшеренеүҙәр ҙә урын алыуы бер ҙә ғәжәпкә ҡалдырмай.

## БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### Юрматы

Төрки ҡәбиләнең юрматы атамаһы X быуаттың Византия сығанаҡтарында корбоюрматы рәүешендә лә йөрөп, был һүҙ ҡорт һәм диюрматы тип уҡылған. Һуңғы һүҙ башҡорт ҡәбиләһе юрматы менән ауаздаш. XVI быуаттағы юрматы шәжәрәһенең тәүге вариантында XIII-XIV быуат ваҡиғалары хаҡында һүҙ барып, уларҙың төрки сығышлы булыуы әйтелә. Күп ғалимдар юрматыларҙың уғыр сығышлы булыуын ғәҙел билдәләй. В.Ф. Генинг фекеренсә, юрматы һәм юрмый атамалары самаҙый сығышлы. Урта быуаттарҙағы гәрәп-фарсы көнбайыш Европа сығанаҡтарында "боронғо венгрҙар" хаҡында мәғлүмәт табылыуы тикшереүселәрҙең иғтибарын йәлеп итте. Бында башҡорт һәм венгр телдәрендә "юрматы" һүҙҙәре булыуы нигеҙ булып торҙо.

Ғарипов менән Кузеев юрматы этнонимының уғыр теленән алыныуы хаҡында әйтә, әммә улар венгрҙар менән уғырҙарҙың уртаҡ нигеҙе булмауына иғтибар бирмәгән. Был хаҡта венгр лингвисы Гомбоц Золтан: "Башҡорт-венгр туғанлығы теорияһы - риүәйәт кенә, фәнни дәрәжәлә быны нигеҙе юҡ", - тип яҙа. Д. Немета башҡорт һәм венгр халыҡтары боронғо замандарҙан уҡ үҙаллы этник үҫеш кисергән, тип әйтә.

Артабан юрматылар тарихын XIII-XIV быуаттарҙа ҡуҙәтәбеҙ. Шәжәрә буйынса юрматылар Зәй һәм Шишмә йылғалары буйында йәшәгән. Тарихи (халыҡ) риүәйәттәр юрматыларҙың ерҙәре Волга һәм Сембер яғында булған тип һөйләй. Хәҙер был ерҙәр Татарстанға ҡарай. XIV быуат аҙағында Аҡһаҡ Тимер менән Туҡтамыш хан һуғышында юрматылар Шәғәле бей етәкселегендә Каманың уң ярына китә. Шәғәле бей үлгәндән һуң улар Ғәли шәйех етәкселегендә кире Зәй, Шишмә буйына әйләнеп ҡайта.

Уларҙың артабанғы яҙмышы нуғайҙар менән бәйле. Нуғайҙар юрматыларҙың боронғо ерҙәренә килеп ултыра башлай. Юрматыларҙың төп өлөшө көньяҡ-көнсығышҡа табан китеп, Һаҡмар, Яйыҡ, Ағиҙел йылғалары буйына төпләнә.

XIV быуат аҙағында юрмый ҡәбиләһе көнсығышҡа, Ыҡ йылғаһы буйына күсенә. Улар Уралға киткән юрматылар менән бәйләнешен юғалта. Тиҙҙән юрмыйҙар Ыҡ ҡәбиләләре составына ҡушылып, Танып йылғаһы башына, Төй йылғаһына барып сыға. Танып йылғаһы үрендә йәшәүсе юрматыларҙы йыш ҡына "сирмеш башҡорттары" тип атағандар. Бында уларҙың XVI быуатта мариҙар һәм сыуаштар менән аралашып йәшәүе сағыла.

Юрмыйҙар һәм юрматылар төркөмө көньяҡ Уралға үтеп инә. Юрматылар Ағиҙелдең һул ярына ултыра. XVII-XVIII быуаттарҙа улар Ағиҙел һәм уның ҡушылдыҡтары Һуҡайлы, Ашҡаҙар, Ҡоғанаҡ, Егән, Һәләүек йылғалары буйлап урынлаша. Уларҙың бер өлөшө хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Туҡ һәм Кесе Соран йылғалары буйына төпләнә. Хәҙерге ваҡытта юрматыларҙың вариҫтары Мәләүез, Федоровка, Стәрлебаш, Стәрлетамаҡ, Ишембай, Ҡырмыҫҡалы, Ауырғазы һәм Ғафури районлары ауылдарында йәшәй.

**(Дауамы бар).**

*✓ Стенаға эшләп эленгән этажерканы күреп, ҡайным: "Оо, минең улым конструктор икән дә", - тип маҡтап алды. Баҡһаң, был һәр ыңғай нәмәне күрә һәм баһалай белеү ғәҙәте икән. Донъяға оптимистик ҡараш уятыусы бер алым.*



# БАЛАҢДЫ ТӘРБИӘЛӘМӘ,

## балаң бит барыбер

**Аллаға шөкөр, республикабыҙҙа өлгө итеп ҡуйырлыҡ башҡорт ғаиләләре аҙ түгел. Ҡайҙа йөрөһәк тә: "Шул-шул ғаиләне гәзитегеҙгә яҙығыҙ әле, шулар матур пар, былар һоҡланғыс шәхестәр", - тип кенә торалар. Әле таныштырасаҡ Нурыевтар ғаиләһен дә шулай "күп тауыш" йыйып һайлап алдыҡ. Уларҙы белеүселәр, аралашып йәшәүселәр, бергә эшләүселәр: "Аңлашып ҡына йәшәй белеүсе күркәм ғаилә", - тип хупланы. Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәте белгесе Гөлдәр Мирсаяф ҡыҙы менән Республика инженер интернат-лицейы директоры Фәнил Жәмил улы НУРЫЕВтар менән сәй артында булған ихлас һөйләшеүҙе һеҙгә лә тәҡдим итәбеҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусыларыбыҙ.**

**Һәр ғаиләлә төүге танышыу тарихы йәшәй. Уны, ғәҙәттә, ир менән ҡатын, аҙаҡ өләсәй менән олатай, балаларына, ейәндәренә һөйләргә ярата. Ғүмер үткән һайын был тарих ҡыҙығыраҡ булып тойола. Һәр кем уға үҙ мәғәнәһен һала, ҡасандыр иғтибарға алынмаған ерҙәренә, һүҙҙәргә баҫым яһала. Бындай тарих һеҙҙә лә бар, шулай бит?**

**Гөлдәр:** Бар, әлбиттә. Абитуриент саҡ, ятаҡҡа урынлаштыҡ та әхирәтем менән коридор буйлап китеп бара инек, ҡаршыбыҙға ике егет осраны. "Башта һүҙ булған" тиһәләр ҙә, мөхәббәт тарихында башта күҙ ҡарашы булалыр. Беҙ ҙә бер-беребеҙгә ҡарашып үттек. Әхирәтемдән һорайым: "Башҡорттар, ивет?" Ул: "Әллә, ҡараманым", - тигән була. Аҙаҡ кухняға сыҡҡайным, егеттәрҙең береһе, Фәнил була инде, тәҙрә янында эре генә сигарет тартып тора. Өҫтөндә шундай модалы джинсы, зәңгәр күлдәк, сәстәре бөҙрә... Миңә һүҙ ҡушҡан булды, үҙе күҙҙәрен алмай ҡарай. Ә мин уның исемен һораным. "Ә һеҙҙең исемегеҙ нисек, тип, һин мине бөтөнләй үлтерҙең", - тип яҙҙы аҙаҡ Фәнил төүге хатында, ошо төүге танышҡан мәлде иҫкә төшөрөп.

Абитуриент саҡта артыҡ байлыҡ юҡ, хатта сәй эсеүгә һауыт-һаба ла етешмәй бит инде. Киттем әле генә кухняла күргән яңы танышҡа стакан һорап. Барһам, былар ҡатыҡ эсеп ултыра. Артыҡ стакандарығыҙ юҡмы, тигәс, Фәнил иптәштәренә: "Егеттәр, тиҙ генә стаканды бушатып бирегеҙ",- тине. Мин тот та сәйгә саҡыр тегеләрҙе. Бүлмәләрендә майкала ултырған егеттәр баштан-аяҡ сынъяһау кейенешеп, бөхтәләнеп килеп инделәр бүлмәбеҙгә. Был да миңә тәьҫир итмәй ҡалманы, әлбиттә. Тора һалып ултырғыс тәҡдим итһенме, ишекте асып индерһенме - һәр тәрбиәле ир-егет өсөн ябай ғына ҡағиҙәләр, әммә тап шулар Фәнилде үҙем белгән башҡа егетеләрҙән, дуҫтарҙан бер башҡа юғары күтәрҙе лә ҡуйҙы. Беҙҙең Белорет яҡтарында егеттәр нисектер ҡырыҫыраҡ кеүек тойола миңә, ҡатын-ҡыҙға иғтибар күрһәтеүҙе түбәнһенеү тип ҡабул итәме, әллә оялалармы...

Бөтөн ошо танышлыҡ йәмғеһе өс көндә биләне. Конкурстан үтмәҫен белгәс, Фәнил, ғәрләнепме, миңә өндәшеп тә тормай, ауылына ҡайтҡан да киткән. Ишеген барам да шаҡыйым - яуап биреүсе юҡ. Ниндәйҙер ҡәҙерле генә нәмәмде юғалтҡан кеүек булдым. Урамда ла зәңгәр күлдәкле егеттәрҙе күреп тертләйем, күҙҙәрем халыҡ араһында уны эҙләй. Ниндәйҙер хистәр тоҡанып өлгөргәндер инде, күрәһең. Шулай бошоноп йөрөп ҡайтып киттем дә, ҡалдырған адресы буйынса хат яҙҙым. Яҙып һалыуым булды, унан да хат килеп төштө. Әле алып өлгөрмәгәнлеген аңлайым. Тимәк, икебеҙ ике яҡтан бер ваҡытта яҙғанбыҙ булып сыға. Ә иң мөһиме, минең кисерештәр уның хаттарында ла сағылыш тапҡайны. Ул хаттар һаман һаҡлана беҙҙә.

**Фәнил:** Гөлдәрҙе беренсе күргәндә сәсенә иғтибар иттем. Сәсе оҙон ине. Бындай сәстәрҙе матур итеп тәрбиәләп йөрөй алған ҡыҙҙың миңә лә сабырлығы етер, тип уйланым. Ә етди итеп әйткәндә инде, ул һөйләгән тарих шул уҡ минеке лә. Күрҙем, ғашиҡ булдым, яуланым.

**Ғаиләлә кем баш? Һорауҙы дөрөҫөрәк итеп ҡуйғанда: һуңғы һүҙҙе кем әйтә?**

**Фәнил:** Беҙҙә министрлыҡтар принцибы: кем ниндәй өлкәне яҡшыраҡ белә, шул йүнәлештә һуңғы һүҙ уныҡы.

**Һеҙҙе бер-берегеҙҙәге ниндәй сифаттар арбай? Мәҫәлән, Гөлдәр, һине Фәнилдең ниндәй холоҡ һыҙаттары тота? Фәнил, һин Гөлдәрҙең ниндәй сифаттарын юғары баһалайһың?**

**Фәнил:** Әле өйләнешмәгән саҡта ҡайнымдарға ҡунаҡҡа барып йөрөй башлағас, төүге тапҡыр ат менән дуҫлашып киттем. Беҙҙең яҡта ат менән эштәр башҡарылмағас, уны хужалыҡта тотмайҙар ҙа ине. Ҡайҙалыр урманға эш менән сыҡтыҡ, ҡайным матай менән елдерҙе, мин атта. Бер тау ситендәге йырындан үтәбеҙ. Үҙем ни эшләргә белмәгәнлектән, атты яйына ҡуям. Аҡыллы малҡай шундай һаҡ ҡына итеп, самалап, аңғарып ҡына атлап үтте шул ҡурҡыныс ерҙәрҙе. Бына шул мәлдә лә, артабанғы төрлө эштәрҙә лә, был йән эйәһендәге сабырлыҡҡа һәм һаҡланыу көсөнә иҫ-аҡылым китте. Һәм әлеге мәлдә, ошо һорауға яуап уйламаҡсы булғанда, хәтергә әлеге ваҡиға килде һәм нисек кенә яйһыҙ кеүек булһа ла, Гөлдәрҙе шул башҡорт аты менән сағыштыра алам. Уның һөйләгән хәбәренән алып башҡарғанына тиклем тормошсан, айыҡ аҡыл нигеҙендә, көйлө. Шарт-шорт килеп, ҡабаланып, асыуланып хәл итмәй бер нәмәне лә. Әгәр ул ярһыу, күп һөйләгән, артығы менән ҡыҙыҡһынған йәки көнсөл ҡатын булһа, мин ни эшләр инем икән? Күҙ алдына ла килтерә алмайым! Ни генә булғанда ла, йөҙгә бәреп һорау бирмәй, ныҡышмай, ирекһеҙләмәй. Һиҙеү аппаратымы ни, хәл-торошомдо телефон аша уҡ аңғара ала, әммә баҫым яһамай, кирең һенсә, өйҙә миңә бөтөн проблемаларҙан азат булырҙай зона яһарға тырыша. Бына шулайыраҡ инде, аңлата алдым микән... Башта телгә алған башҡорт аты кеүек, күҙгә-башҡа салынып бармай, йылҡылдап-йылпылдап тормай, шул уҡ ваҡытта һәүетемсә генә итеп үҙенән торғанды башҡарып йөрөй. Бер һүҙ менән әйткәндә - ышаныслы. Тағы ла бер яғы - кире тип баһаланырҙай һәр хәл-ваҡиғала ла ыңғай нәмәләр таба белә, төшөнкөлөккә урын ҡалдырмай.

**Гөлдәр:** Йәш саҡтан уҡ Фәнилдең шундай бер һыҙатын билдәләгәнмен: ул бер осраҡта ла ситтән күҙәтеүсе генә булып ултырмай. Проблеманы асыҡлай һәм хәл итә белә. Төрлө яҡлап белемле, киң ҡарашлы. Артыҡ комплекстары юҡ. Урынһыҙға оялып, тартынып тормай. Кем менән булһа ла уртаҡ тел таба ала. Бер-бер хәл килеп тыуып, кемгәлер ярҙам итергә кәрәк булһа, шунда уҡ, уйлап та торма ҫтан, нимәлер эшләй башлай. Ошо сифаты әле һаман, ҡабатланған һайын, һоҡланыу уята. Мин үҙем дә ҡулдан килгәнсә ярҙамсыл булырға тырышам, әлбиттә, әммә уның кеүек үк булдыра алмайым.

Күптән түгел Фәнилгә шундай һорау бирҙем: "Әгәр ҙә бөтә нәмә менән тәьмин ителеп, аҡса табырға кәрәкмәһә, нимә менән шөғөлләнер инең?" Үҙемсә уйлайым инде, сәйәхәт итер инем, йә булмаһа, оҫтахана асып, ағас йә техника йыйыу-йүнәтеү менән булышыр инем, тиеберәк әйтер тием. Яуабынан үҙем дә шаҡ ҡаттым: "Дәрестәр генә алыр инем дә балалар уҡытыр инем", - ти.

**Бына ошо йәшәйештә ярҙам иткәндәй ыңғай сифаттарығыҙҙың ҡайһылары һеҙгә ата-әсәйҙәрҙән күскән, тип уйлайһығыҙ? Ғөмүмән, әлеге ғаиләгеҙгә үҙегеҙ үҫкән ғаиләнең йоғонтоһо бармы, булдымы?**

**Гөлдәр:** Роберт Кийосакиҙың киң билдәле ошондай һүҙҙәре бар: "Һеҙҙең мейегеҙ бар нәмәне лә булдыра. Иң мөһиме - үҙеңде быға ышандырырға кәрәк. Шул сағында һеҙ ысынлап та бөтә нәмәне лә булдыра алырһығыҙ". Әлбиттә, бала кеше быны аңлы рәүештә үҙе эшләй алмай. Унда үҙ-үҙенә ышаныс тәрбиәләү, һинең ҡулдан барыһы ла килә, тигән фекерҙе тыуҙырыу һәм үҫтереү - ата-әсәнең бурысы. Күңеле лә бөтөн шәхес тәрбиәләү өсөн тамағы туҡ, өҫтө бөтөн булыу ғына етмәй. Ошо йәһәттән бигерәк тә Фәнилдең ғаиләһен өлгө итеп ҡуйырға булыр ине. Бер генә миҫал: танышыуыбыҙға өс йыл тигәндә өйләнешеп, бергә йәшәй инек инде, ауылдан ҡайным килеп төштө. Ятаҡтағы төүге йыһазды Фәнил үҙе яһағайны. Әйткәндәй, ул әле лә ағастан да, башҡа материалдан да кәрәк йыһазды тота ла үҙе эшләй. Стенаға яңы ғына эшләп эленгән этажерканы күреп, ҡайным шул саҡ: "Оо, минең улым конструктор икән дә", - тип маҡтап алды. Мин, атайымдың нимә тотһа, шуны эш итә белеүен күреп үҫкән кеше: "Уның нимәһе бар икән, егет кеше шуны ғына белергә тейештер ул..." - тип эстән генә аптырайым. Баҡһаң, был һәр ыңғай нәмәне күрә һәм баһалай белеү ғәҙәте икән. Үҙ-үҙеңә ышаныс, донъяға оптимистик ҡараш уятыусы бер алым.

Ҡайным ғүмер буйы тиерлек мәктәп директоры булып эшләне, ауылда ғына түгел, районда абруйлы кеше булды. Ҡәйнәм менән тауыш күтәреп һөйләшкәнен дә ишетмәнем. Ҡәйнәм ҡайсаҡ ҡатындарса зарланып алған була торғайны ла, ҡайным килеп инһә: "Жәми-ил", - тип ҡояштай балҡып уға ҡаршы атлар ине. Аҡыллы, һығылмалы холоҡло ҡатын булды. Балалары алдында ла, сит кешеләр алдында ла иренең абруйын күтәрҙе. Ҡайнымды маҡтап, хуплап, уның күңелен үҫтереп, уның яҡлауында ғына йәшәне үҙе. Мәрхүмә инде, йәне йәннәттә булһын. Ҡайныма хәҙер 86 йәш, һаман эҙләнеүҙән, нимәгәлер өйрәнеүҙән туҡтағаны юҡ. Аллаға шөкөр, әле һаман руль артына ла үҙе ултырып сығып китә, бал ҡорттары менән булышыр өсөн һәр яҙҙы көтөп ала.

**Фәнил:** Беҙҙең телдә иркенлек, байманлыҡ тигән матур һүҙҙәр бар. Бәпкә үләнендә тәгәрәп үткән бала саҡҡа ҡарата шуларҙы ҡулланыр инем. Мин тыуыуға атай-инәйем инде дүрт бала үҫтереп, тәжрибәле атай-әсәй булған, шуға педагогик тәрбиәнең иң "һыналған" алымдары минең "өлөшкә" төштө. Өйҙәге теләгән нәмәне һүтеп ташлай ала инем. Атайымдың әллә нисә фотоаппаратын шулай тиреп һалдым. Хатта мәктәптең техникаһына ла барып етешә инем. Электр приборҙары менән булышҡанда ла "Ярамай, ҡурҡыныс", тип тыймаһылар. Берәү ҙә, бына шуның менән шөғөлләнең, шулай ит, тимәне. Ә үҙебеҙҙең балаларға килгәндә, улар, нисектер, икенсерәк. Эсен асып ҡарағығыҙ килмәйме ни, тип, фотоаппарат йә башҡа нәмәне махсус рәүештә биреп тә ҡуйғаным булды, юҡ, аҡтармайҙар.

**Йәш саҡтан йыш хәтерләгән ҡыҙыҡлы хәлдәр ҙә барҙыр тормошоғоҙҙа?**

**Гөлдәр:** Бер хәлде һаман көлөшөп хәтерләп алабыҙ. Дуҫлашып йөрөгәндә, Фәнил килһә, мин уны йәһәтләп ашатып ебәрергә тырыша инем. Егеттәр ас йөрөгән кеүек бит инде. Бер шулай, имтихандар ваҡыты, ул ашығып ҡына килеп инде. Мин тиҙерәк ашарға йүнәтә башланым, әммә был ашауҙан баш тартып сығып китте. Бик ҡаты асыуым килде. Ул ваҡытта бит телефон юҡ. Артынан барырға сәбәбем дә юҡ. Шунан ул биреп торған түшәкте күтәреп алдым да, ятағына киттем. Йәнәһе, ашымды ашамағас, түшәгеңде лә ал, үҙең дә килеп йөрөмә. Был түшәкте нисек күтәреп килдең ул, тип, Фәнил аптырай. Көлөп-көлөп, түшәкте кире алып килеп, бешергәнемде ашап, тынысландырып ҡуйҙы. Әле лә ашҡа ҡайтып өлгөрмәгәндә йәки ваҡыты булмағанда: "Түшәккә теймәҫһең ул?" - тип шаярта.

**Фәнил:** Ҡайным иҫән саҡта күмәкләшеп бесән эшләүҙәр матур



✔ ***Һин ул кешене һайлап алғанһың, унан балалар тапҡанһың, бергә йәшәгең килә икән - яманлама. Унан ғына ул яҡшы булып китә лә алмай. Нимәләр килеп сыҡмаған осраҡта ла уға ышаныуыңды белдер. Был ир кешегә яуаплылыҡ һала.***



# ҮҘЕҢДЕ ТӘРБИӘЛӘ...

## һиңә оҡшаясаҡ

бер хәтирә булып һаҡлана күңелдә. Беҙҙең Дыуан районында бесәнде ҡул менән сапмайҙар, шулай уҡ бесән сабыу ҡатын-ҡыҙ эше лә һаналмай. Белорет районында ҡатын-ҡыҙҙар, шулай уҡ Гөлдәр ҙә, балдыҙ ҙа зыйлатып бесән сабалар. Ҡәйнәм хаҡында әйтеп тә торорға түгел. Ҡайным салғыны яныП бирә лә, шунан салғы артынан осоп сығып китәһең, ә инде артымдан ҡәйнәм төшһә, хәл бөтә лә ҡуя. Ҡара тиргә төшөп, быуындар ҡалтырап, саҡ барып сығам осҡа. Белореттарса кәбән ҡойорға ла өйрәндем хатта.

**Малайҙар тәрбиәһе хаҡында һүҙ алып барғанда, уларға ҡаты булыу урынлымы икән, нисек уйлайһығыҙ? Йәки ғаиләһенә баш була алырлыҡ, уның бөтөнлөгө өсөн тулыһынса яуап бирә алырлыҡ ир-егетте үҫтереү алымдары бармы ул? Булһа - ниндәй?**

**Гөлдәр:** Малайҙарыбыҙ бәләкәйҙән бик йыш икеһе генә өйҙә ҡала торғайны. Үҙем телеүҙәктә эшләнем, атайҙары мәғариф өлкәһендә, хатта ауырығандарында ла өйҙә ултырыр форсат булманы. Йыш ҡына бына шуларҙы иҫләп, малайҙарыма бәләкәй саҡтарында етерлек иғтибар бирмәнем, тип, эсем бошоп китә.

Үрҙә әйткәнемсә, беҙҙең ғаилә ир-егеттәре баҫым яратмай, шунлыҡтан мин уларҙы үҙ иректәренә ҡуйғанмын. Хатта күп тапҡыр кәңәшләшеүҙе лә улар аталары менән генә башҡарып, мин ҡайһы бер нәмәләрҙе аҙаҡтаныраҡ ишетеп ҡуям. Әммә үпкәләмәйем. Ҡыҙҙар булһа, минең янымдараҡ булырҙар ине, малайҙар шундай булырға тейештер, тип уйлайым. Уның ҡарауы, мин ҡурсаулы. Әле яңы ғына шундай хәлде кисерҙем: кесе улым менән кисен йүгерергә сыҡҡайныҡ. Шамонин ауылын күҙ алдына килтерәһегеҙҙер, йорттар бер-береһенә ҡапма-ҡаршы ултыра. Иғтибар итәм - улым минең әле бер яғымдан йүгерә, бара-бара икенсе яғыма сыға. Баҡһаң, ҡайһы яғымда абаулап эт өрә башлай, шул яҡҡа сығып, мине ҡурсалай икән балаҡайым, үҙе бер ни ҙә өндәшмәй.

Малайҙар улар аҙ һүҙлеләр, ҡыҙыҡһыныуҙарын да үҙҙәре һайлай, үҙҙәре билдәләй. Улары ваҡыты-ваҡыты менән үҙгәреп тора. Әммә хәйләләшә, яраҡлаша белмәйҙәр. Шунлыҡтан, уларҙы үҙгәртеү, һин теләгәнсә итергә тырышыу ярамай, киреһенсә, үҙенә улар йәйына булырға, аралашыу, аңлашыу юлдарын эҙләргә тура килә. Ир баланы, ғөмүмән, балаларҙы ҡурҡытыу, баҫыу, ирекһеҙләү яҡшыға алып бармай. Билдәле бер йәшкә еткәс, ул әсәйҙән ҡурҡмаясаҡ та, аңлашыу ҙа мөмкин булмаясаҡ...

**Фәнил:** Дүрт йәштәр самаһы булды микән, апайым менән аҙбар артына уйнарға сыҡтыҡ. Ул, ҡыҙ кеше булараҡ, "ашарға хәстәрләй", мин, "ир заты", уға усаҡ әҙерләйем. Шул саҡ ут эргәләге бесән өйөмөнә тоҡанып, дөрләп янып китте. Ярай әле инәйем өйҙә ине, йүгереп сығып, күршенең йыуып эленгән еүеш простыняларын ҡаплап, өҫтөндә тәгәрәп йөрөп һүндерҙе. Үҙенең ҡулдары бешеп бөттө... Шул хәтләм ҡыйын булғанын хәтерләйем... Исмаһам, әрләмәнеләр ҙә. Бәлки, еңелерәк булыр ине. Ошонан һуң тәүге йәмәғәт "йөкләмәһе" алдым - өйгә ут яғыу минең бурысҡа әйләнде.

Ә дөйөм алғанда, тәрбиә тураһында бик тос итеп әйтелгән бер фекер бар, шуны тулыһынса ҡабул итәм: баланы тәрбиәләмә, үҙеңде тәрбиәлә, ул барыбер һиңә оҡшаясаҡ.

**Күп йәш ғаиләләргә бер-береһенә өйрәнеп, бергә йәшәүгә күнеп киткәнсе төрлө ҡытыршылыҡтар аша ла үтергә тура килә. Ҡайһылар был һынауҙы үтә алмай, айырылышып та ҡуя. Бөгөн матур пар булыуығыҙға ҡарағанда, һеҙ был осорҙо уңышлы кисергәнһегеҙ. Иҫләйһегеҙме, нисек булғанын?**

**Гөлдәр:** Хәтерләйем, әлбиттә. Мин бит инде бөтөн эште ир-егеттәр менән ҡатар эшләп өйрәнгән урман ҡыҙы. Кейәүгә сыҡҡас та, һәр эште үҙем башҡарырға тотона инем. Фәнилдең уйлағанын көтмәйенсә йәки уға әйтеп тә тормайынса, сарбаулап, ҡаңғырып йөрөп, үҙем хәл итәм. Фәнил тотонһа, һәр нимәне тыныс, тауыш-тынһыҙ ғына башҡарып ҡуя. Бер-ике йыл шулай ҡаңғырҙыҡ, мин йәйләп етди мәсьәләләрҙе ир иненә һалырға икәнде аңлап алдым. Бөгөнгө көндә мин коммуналь һәм башҡа хеҙмәттәрҙең ҡайҙа, нисек түләнгәнен дә, үҙем йөрөгән машинаның хеҙмәтләндереү нескәлектәрен дә, ремонт-төҙәлеш мәшәҡәттәрен дә белмәйем.

**Фәнил:** Шулай тигән булһа ла, минең барлыҡ эштәремдә иң беренсе ярҙамсы һәм кәңәшсе инде ул Гөлдәр. Уҡыуҙы алданыраҡ тамамланы, эшләй башланы, мин икенсе юғары белем алыу өсөн уҡыуҙы дауам иттем. Ул бер ваҡытта ла минең менән ярышманы, бер ҡатар булырға ынтылманы. Киреһенсә, минең үҫешкә уңдырышлы тупраҡ булды. Әйтәләр бит, һәр уңышлы ирҙең артында аҡыллы ҡатын тора, тип. Бына шул миҫал беҙҙә лә. Ҡатыным һәр ваҡыт иң беренсе мине ҡайғыртты, минең һаулығымды, кейенеүемде, ваҡытымды, кәйефемде үҙенекенән өҫтөнөрәк күрҙе. Бер ваҡытта ла эштән һуң ҡайтҡанда йәки һуңларымды хәбәр итә алмағанда "Гөлдәр нимә әйтер?" тип борсолманым. Ҡайтып "шулай-шулай булды" тип аҡланманым. Ҡайҙалыр барырға булғанда ҡатынымды көйләп, аңлатмалар биреп ултырманым. Сөнки ҡатыным мине шул кимәлгә төшөрмәне, вәкламаны, кәмһетмәне, һорау алып, яуап талап итеп йөҙәтмәне. Ә бит шундай мәшәҡәттәр йөкмәгән ир-егеттәр аҙ булманы эргә-тирәмдә.

**Гөлдәр, ә был һорау һиңә. Нисек уйлайһың, иркәлек бөтә ҡатындарға ла хасмы, әллә был холоҡҡа һалынған үҙенсәлек кенәме? Һин бит инде үҫкәндә икенсерәк булғанһың һәм әле лә мин һинең ошо матур йылмайыуың артында ныҡлы ғына характер ҙа тоям...**

**Гөлдәр:** Беҙҙең милләт ҡатын-ҡыҙында яугир ҡаны бар һәм бынан бер нисек тә ҡасып булмай. Ысынлап та, һеҙ әйтмешләй, көләп торһам да, күп осраҡта юл бирһәм дә, ниндәйҙер айырым осраҡтарҙа мин ҡаты тора алымды беләм. Көсөмдө лә, мөмкинлектәремде лә самалайым. Тик ғәҙәти көнкүрештә был ҡатылыҡ миңә кәрәк түгел. Әрһеҙ, ҡаты, ҡырҡыу булған ҡатынды ир-егет тә йәлләп, яҡлап бармай бит. Улар уны көслө, үҙаллы, ти ҙә ҡуя. Былай мин артыҡ хәйләләп, һылап-һыйпап та тормайым, тураһын, әммә ҡаты бәрелмәйенсә әйтә беләм. Сөсөләнеү миңә хас түгел.

Негатив уйҙар, насар хәбәрҙәр һөйләү кешенең үҙенә генә түгел, тирә-яғындағыларға ла кире тәьҫир итә. Позитивҡа көйләнеү, шул уҡ рәүешле, ыңғай энергия тыуҙыра. Шуға, һин ул кешене һайлап алғанһың, унан балалар тапҡанһың, бергә йәшәгең килә икән - яманлама. Унан ғына ул үҙгәрә лә, яҡшы булып китә лә алмай. Нимәләр килеп сыҡмаған осраҡта ла уға ышаныуыңды белдер. Был ир кешегә яуаплылыҡ һала.

**Фәнил, бына һин башҡорт ҡатын-ҡыҙын нисегерәк итеп ҡылыҡһырлар инең? Беҙҙең ир-егеттә "Ошо беҙҙең башҡорт ҡыҙҙары..." тигән бер ғәйепләү тонындағы реплика ла бар бит...**

**Фәнил:** Ишеткәнем юҡ ундайҙы һәм ҡабул да итмәйем. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарында тура һүҙлелек бар барлығын. Уларҙың артыҡ асыҡ-ярыҡ булмауы ла шул йомоҡлоҡҡа бер аҙ төҫ бирәләр. Уның ҡарауы, башҡорт ҡатындары улар шундай тоғро халыҡ. Мин быны Гөлдәр миҫалында ғына түгел, ә ошо йәшәйештә күҙәтә барғандарымдан да сығып әйтәм. Беҙҙең ҡатындарҙа ғаиләгә, балаларға нык бирелеү бар. Ҡарап торһаң, бешмәгән генә бер ҡыҙыҡай ҙа, тормошҡа сығып, әсәй булып алһа, сат йәбешеп донъя көтөп ала ла китә. Балаларын инә бүреләй һаҡлай, иренә күнә. Ҡул аҫтымда эшләгәндәр араһында ла, эргә-тирәмдә лә унған, аҡыллы, эшлекле, һәләтле башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары бихисап, улар менән кәңәшләшеп, уларҙың фекеренә ҡолаҡ һалып, аралашып йәшәп өйрәнгәнмен.

**Һеҙҙең ғаиләлә ниндәй кәмселектәр бар? Мәҫәлән, ниндәй ҡылыҡтарығыҙҙы үҙгәртергә теләр инегеҙ? Нимәләрҙе, киреһенсә, ҡағыҙҙа итеп индерер инегеҙ?**

**Фәнил:** Ваҡытты артҡа әйләндереп булһа, балаларға күберәк иғтибар бүлер инем. Әлегә уларҙа бының борсолорлоҡ сәбәптәрен күрмәйем, әммә үҙемдең намыҫым тыныҫыраҡ булыр ине. Шулай уҡ ғаилә менән йышыраҡ була алмау ҙа минең өсөн артыҡ күңелле хәл түгел. Ә былай, башҡа үкенестәрем юҡ, Аллаға шөкөр.

**Гөлдәр:** Шундай кешеләр була бит, үтеп сыҡҡан, тиҙәр. Улар таба, һөйләшә, кәрәкле кешеләр менән мөнәсәбәт урынлаштыра, сәмләнеп, ярышып донъя көтә. Быларҙы мин һәйбәт сифаттар тип ҡабул итәм, әммә үҙебеҙгә ҡарата бер нисек тә ҡуллана алмайым. Өйҙә шул кәрәк, был эшләнмәгән, тип, бер-беребеҙҙе игәмәйбеҙ. Үҙ йәйы менән барғаньна күнеккәнбеҙ... Шулай уҡ, уңышҡа өлгәшеүҙең нигеҙе - планлы, көндәлек, ныҡышмал эш, тиҙәр бит инде. Режим, план буйынса йәшәү йыйнаҡлыҡҡа, ваҡытты дөрөҫ бүлә белеүгә өйрәтә. Ошолар беҙгә һис кенә лә ҡамасауламаҫ ине.

**Ғаиләнең яратҡан шөғөлдәре бармы? Башҡорт ғаиләһе булыуығыҙҙың ниндәй күрһәткестәре бар?**

**Гөлдәр:** Бергәләп походҡа, тәбиғәткә йөрөргә яратабыҙ. Башҡорт мәҙәни сараларынан ҡалмайбыҙ. Әйткәндәй, шул сараларға Фәнилгә йыш ҡына саҡырыу ҡағыҙы тәҡдим итәләр. Ул унан мотлаҡ баш тарта, сөнки концертҡа ғына түләп инерлек хәл бар бит инде. Сараларға халыҡ йөрөмәй, тиҙәр, ысынлап та, курсташтарымдың күбеһе Өфөлә йәшәһә лә, мин унда таныштарымды һирәк осратам. Ә бит хәҙер бөтә нәмә иҡтисади яҡтан килемле йәки килемһеҙ тип баһаланған һәм ошонан сығып уның киләсәге хәл ителгән осорҙа мәҙәниәт усаҡтарының яҙмышын тамашасы ғына билдәләй.

Малайҙарға "башҡорт килене алып ҡайтаһығыҙ" тигәнде әйтеп ҡуйғанбыҙ, уларҙа милләттәш ҡыҙҙарына ҡыҙыҡһыныу булһын өсөн таныштарыбыҙҙың ҡыҙҙарын маҡтап телгә алып ҡына торам. Бер менталитетта, бер тамырҙа үҫкән иштәр союзының ҡатнаш никахтарға ҡарағанда булған өҫтөнлөктәрен миҫалдарҙа күрһәтәм. Ғәҙәттә, ғаиләлә ошондай хәбәрҙәр ыҫҡынғылаһа, бала-саға бәләкәйҙән атай менән әсәйҙең позицияһын аңғарып үҫә бит ул. Ҡәйнәм дә, ҡайным да үҙ ғаиләләрендә бер генә бала булып үҫкәндәр. Ейәндәре тыуғас, ҡайным атҡа менгәндәй булып ҡыуанғайны. "Затым ҡоромай икән, фамилиямды дауам иттереүселәр булды", - тигән булды. Малайҙарға ошо хәлде лә һөйләп-һөйләп алам. Улар бит, өндәшмәһә лә, мыйыҡтарына урап, күңелдәренә һеңдереп ултыра.

Беҙҙең шәжәрә әлегә тулы итеп ҡайным яғынан ғына төҙәлгән, атайымдың бер нисә быуын олатаһының исем-шәрифтәрен генә беләбеҙ. Ошо йәйҙә кесе улым Ирхан менән архивҡа йөрөп, инәйемдең, ҡәйнәмдең нәҫел тамырҙарын юлларға тигән ниәт бар. Ирхандың тарихҡа ҡыҙыҡһыныуы көслө, шуға уның өсөн ул ҡағыҙҙарҙы үҙ ҡулдары менән тотоп өйрәнеү, ата-бабаларының рухына ҡағылыу бөтә һөйләгәндәрҙән дә тәьҫирлерәк булыр, тип уйлайым.

**Ауыл менән бәйләнеш бармы? Был бәйләнеш балаларҙа дауам итәсәкме?**

**Фәнил:** Малайҙар бәләкәйҙән йәйҙәрен ауылда үткәрҙе. Бигерәк тә, тәүге ейәндәр булараҡ, Йәйәктәге олатай-өләсәй өсөн танһыҡ булды улар. Улыбыҙ Иҙел хатта олатаһы менән эшкә йөрөй торғас, бөтә ауыл тигәндәй уны танып бөттө. "Тамыр"ҙа сығыш яһауының да касафаты булғандыр. Мине инде "Иҙелдең атаһы" тип кенә белделәр.

**Башҡорт милләтенә артабан йәшәү, рухи ҡиммәттәрен һаҡлап ҡалыу һәм үҫеү өсөн ниндәй алымдар ҡулланып ҡарау кәрәк, нисек уйлайһығыҙ?**

**Гөлдәр:** Тел үҫешһен өсөн унда мохтажлыҡ булырға тейеш. Уны ҡулланыу даирәһен киңәйтергә, рәсми рәүештә ҡабул ителгән статусын ғәмәлдә тормошҡа ашырырға кәрәк. Уҡырға ингәндә, эшкә урынлашҡанда республиканың төп халҡының телен белеүселәргә ниндәйҙер өҫтөнлөк бирелә икән, был үҙенән-үҙе телде өйрәнергә этәргес буласаҡ һәм "көсләп уҡытыу" тигән фекергә урын ҡалмаясаҡ. Был инде иң юғары етәкселектең ихтыяри ҡарары булырға тейеш. Ә беҙ быны талап итергә хаҡлыбыҙ, сөнки милли ихтыяждарыбыҙҙы беҙ бары ошо ерҙә, ошо республикала ғына ҡәнәғәтләндерә алабыҙ. Беҙҙең башҡа Ватаныбыҙ юҡ.

**Фәнил:** Башҡорт теле күп һанлы төрки халыҡтар донъяһына ла асҡыс бит ул. Телде өйрәнгәндә, уҡытҡанда ошо ғәмәли яғына баҫым етеңкерәмәй һымаҡ.

Үҙем дини кеше булмаһам да, Алланы инҡар итмәйем һәм халыҡты һаҡлау өсөн иң прагматик юл - ул дингә килеүҙер, тип иҫәпләйем. Сәләмәт милләттең инде талаптары ла, маҡсаттары ла, ынтылышы ла аныҡыраҡ була. Ә инде рухи ҡиммәттәрҙе һаҡлау һәм киләһе быуындарға тапшырыу хеҙмәтен мин ғаилә яуаплылығында, тип иҫәпләйем. Кейек тә бит балаларын бөтөн нәмәгә үҙе өйрәтә. Һунарға ла, һаҡланырға ла, аҙыҡ табырға ла. Кеше лә шулай булырға бурыслы. Бөтөн башланғыстың инеше - ғаиләлә. Башҡорт итеп үҫтерһәк, балабыҙ башҡорт булыр, башҡа телдә, башҡа мәҙәниәт өлгөһөндә тәрбиәләнһәк - ул бер кем дә булмаҫ. Барыһы ла үҙебеҙҙән тора.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Дөрөҫ әйтте ғаилә башлығы: "Башҡа телдә, башҡа мәҙәниәт өлгөһөндә тәрбиәләнһәк - ул бала бер кем дә булмаҫ". Ошо хәҡиҡәтте башҡалар ҙа аңлаһын ине. Һинең бөгөн башҡорт ғаиләһе булыуың - бер, балаларың, ейәндәрең ошо исемде күтәрә алырмы, лайыҡлы булырмы был атамаға - быныһы инде икенсе мәсьәлә.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

**✓ Бер бөртөк улы атаһының күңелен аңламаған. "Мәрхүмкәй" тип өҙөләп торған кейәүенә лә асыла алмағандыр, әсәһе әйтмешләй, "кеше балаһы" бит.**



# АҘАН МОҢО

**Миңнур ҠАСИМОВА**

Балтаны ҡулына тәү башлап әсәһе тотторҙо. Бағаналыҡ әрсеп ултырттылар, унан икәүләшеп индек үткәрҙеләр. Урманда ағастарға мөшкәт ҡуйып ятҡан атаһы ҡайтып инеүгә баҡсаның ере һөрөлөп, картуфы сәселгәйне. Күкрәк, ос һәнәктәрен дә әсәһе менән бергәләп яһанылар. Ғаилә башлығы сайыр һыҙып ҡайтыуға, яҡындағы сабынлыҡтарында ун бишәр күбәлек ике кәбән ҡуҡырайып ултырыр ине. Һуғыш мәлен картуф кәйелтмәге ашап, күршеләренән йомортҡа урлап эсеп етем үҫкән атаһы эш мәнен белмәне. Ә әсәһе иһә, баҡсаһындағы йәшелсәне урыҫтарҙың үҙҙәренә һатып йәшәгән кеше, имеш. Ата-әсәһенең икәү-ара ирешкәндәренән шуны белде малай.

Кемгә оҡшағандыр, балта эшенә оҫта булды Йәүҙәт. Тик әсәһенең теләге башҡасараҡ ине. Ҡыҙҙар араһында үҫкән бер бөртөк малайына әсәһе тәүҙә күрше ауылдан ҡумыҙ килтереп бирҙе, унан почта аша мандолина яҙҙыртып алды. Аҙаҡ сайыр йыйған аҡсаһын тотоноп, Мәғниттең үҙенән гармун йөкмәп ҡайтты ла, "Казанка"ла аяҡ бармаҡтары менән бейеү көйҙәре уйнап, бар ғаләмде оҫталығы менән хайран иткән ҡустыһына Йәүҙәтте музыкант итергә наказ биреп ҡуйҙы. Атаһының "шайтан аҙаны" тип өнәмәгәнен күрһә лә, әсәһенә "юҡ" тип әйтергә ҡыйманы, ике айҙа "Әпипә"не тысҡылдатырға өйрәнеп алды.

Өфөнән килгән күренекле баянсы менән йырсы ауылдарҙан һәләтле балаларҙы йыйған уңай мәле тура килеп, баш ҡалалағы музыка мәктәбенә уҡырға китте Йәүҙәт. Тыуған йортона йылына ике мәртәбә генә ҡайтып йөрөй алған малай атаһынан бөтөнләй ситләшеп үҫте. Каникулға барып алып, аҙаҡ Өфөгә кире илткәндә генә аралашырға әмәл сыға ине. Мең ыҙа менән поезда, унан автобуста, өсөнсө көнөнә белештәрендә ҡалдырылған атта юл үткәндә лә улы атаһы хәбәрҙәренә илтифат итмәне.

Музыка мәктәбенән һуң ингән сәнғәт училищеһында уҡыу еңел бирелде: дүрт йыл урынына ике йылда диплом алып, армияла булырға, сәнғәт институтында уҡырға, унан тағы ла бер нисә йылдан ҡалалағы күренекле сәнғәт мәктәбенең директоры вазифаһына үрләргә лә өлгөрҙө. Ҡатыны менән икәүләп бер өлкәлә эшләгәс, ижадтары гөрләне, уңыштары күп булды. Яңы йыры сыҡҡан һайын әсәһе күршеләрен сәйгә алып, магнитофон таҫмаһын өйрөлттө - улары ауылдарынан ҙур кеше сыҡҡанына һөйөнөстәрен йәшермәне.

Ә Йәүҙәт баянсылары менән республиканы иңләне, Рәсәйҙә лә күренде. Конкурстар араһында көнөнә генә ҡайтып, атаһын ерләшергә лә өлгөрҙө. Ҡыҫҡаһы, риза ине тормошонан.

Әсәһе ҡартайҙы инде. Хәлен белергә ҡайтҡан Йәүҙәт менән яҙылып һөйләшеп ултырмай. Сәйнәлеп бөткән кассетанан композитор улының йырҙарын ҡуйыуын һорап, өйҙәгеләрҙең тәңкәләрен ҡоротто. Йәүҙәт: "Әйҙә, әсәй, үҙем йырлайым", - тип янына ултырһа ла, ыңғайламай. Яҙмаларҙы дискка күсереп биргәйне, үпкәләп, бөтөнләй тыңламаҫ булды. Һәр шәмбе Заволокиндың "Уйна, һөйөклө гармун!" тапшырыуын ҡарарға әүәҫләнеп алған. Иң сағыу күлдәген кейеп, тештәре төшкәнлектән эскә батҡан урттары йомро күренһен өсөн икмәк ҡабып, телевизор алдына ултырып ала ла, донъяһын онота. Оло кешенең был шөғөлө ҡыҙы менән кейәүенә ҡулай - өй тынсып ҡала.

Отпускыға яңғыҙ ҡайтҡан ҡайнағаһын бауыр аҫтынан ел үткәреп, сабынлыҡтарҙы урап ҡайтырға саҡырҙы бөгөн кейәүе. Телевизор алдында ултырған әсәһенә аңғартып китәйем тип ингәйне, унышы үпкәләп хәбәр һалды:

- Ағайың мәрхүм кеүек, аяҡ бармаҡтарың менән гармун уйнай белһәң, күптән ошолар араһында телевизорҙан күрһәтерҙәр ине үҙеңде. Кемдең улы - шуныҡы, тиерҙәр ине. Ҡасандан бирле көтәм.

Артына ултыра төшә яҙҙы Йәүҙәт. Үҙен оҫтамын тип уйлап тик йөрөгән дәһә. Ысынлап, ҡалайтһа ла өҙҙөрөп уйнаған ағаһына етә алманы бит! Уның хатта аяҡ бармаҡтары менән дә уйнай белеүен ҡарарға күрше ауылдарҙан да эркелеп килерҙәр ине. Һеңдерә әйтте лә ҡуйҙы әсәһе.

- Һинең әллә нисә йыл уҡып, ҙур гармун күтәреп йөрөүең нимәгә? Исмаһам, ауылға шул бергә эшләгәндәреңде алып килеп, концерт та ҡуймағас! - Телевизорҙағы Заволокинға матур күренәйем тип уртына тыҡҡан икмәктәрен сығарып һалып, үпкәләп тороп китте.

Йәүҙәт ауыр уйҙар менән сығып ултырҙы кейәүенең атына. Әсәһенең иргә мах бирмәй, "төкөрҙөм танауына тутырғансы" тип йәшәгән йылдарын иҫкә төшөрҙө. Урман юлына төшкәс кенә, туҡтауһыҙ һөйләп килгән кейәүенә ҡолаҡ һалды:

- Ҡолон ғына ине әле ҡайным мәрхүм булғанда. Шәп атҡа әйләнде лә ҡуйҙы хәҙер. Төҫө итеп кенә тотам...

"Ҡара әле, атайымдың атын нимә эшләттегеҙ, тип һорарға ла баш етмәгән бит..."

- Бына ошо ҡарағайы йығылған диләнкәләрҙе таҙалап, дүрт кейәүенә сабынлыҡ итеп ҡалдырҙы. Ҡағыҙҙа икешәр гектар тип яҙылһа ла, үҙәктәре менән бергә унауҙы үтеп китә. Ана теге баштағыһы, ғүмер буйы үҙе сапҡан ер - һинеке. Танныйһыңдыр?

"Нисә йыл йөрөмәнем икән бесән сабырға?.."

- Ҡайнаға! Пенсияңа ла күп ҡалманы, бәлки, ҡайтып йәшәрһең? Өйөңә мейес сығартайыҡ. Кирбесен алдыртып, мунсаһына өйөп ҡуйғайны ла, сығартырға оҫтаһын тапманы, мәрхүмкәй...

"Эш мәне белмәгән һымаҡ ине лә..."

- Бына һуңғы төйәге. Өлкән бажаның бесәне имен ултырамы икән, тип, кәбән башын ҡарап, һикереп төшкәнендә сүкергә эләккән бит... - Хәбәргә ҡушылыусы булмаһа ла, хәтирәләргә бирелеүен дауам итте кейәү.

- Аңламаным. Салғы сүкергәме?

- Сүкер, тим бит. Сабылған ерҙәге кипкән үлән төпһәһе. - Күҙҙәрен тултырып ҡараны кейәүе. - Сүкергә аяғының тамыры эләгеп, шаулап ҡан киткән. Ҡатаһының эсе туп-тулы ине.

Йәүҙәттең тамағына төйөр тығылды. Атаһының һуңғы минуттарын уйлап түгел, ошо хәлдәрҙең аңын-тоңон бөгөн төшөнгән үҙен йәлләне ул...

Салғыһын сүкеп бирҙе лә, яныу тотҡан ҡайнағаһын һыртта ҡалдырып, түбәнгә төшөп китте кейәүе. Кеше техника менән сапһа ла, сабынға ҡыҙығыусылар күп, теге осон да биләп ҡуйырға кәрәк. "Быуынына ултырған тоҙҙар сығыр", - тип, йүкә шына ҡатып алырға ла онотманы.

Ҡасандыр кәртә тотҡандағы ише һыҙат булып ҡалдырылған сауҡаларҙың буйына ҡарап, үҙенең сабынлыҡтарында күпме ваҡыт булмағанын тоҫмалларға тырышты Йәүҙәт - иҫәпләй алманы. Атаһының үлгәненә лә һигеҙ йыл булып киткән. Ғүмеренең аҙағына тиклем ҡулынан салғы төшмәне, тигәйнеләр.

Ҡара тиргә батып оҙон бакуй сыҡты. Селек баҫҡан был тирәгә күптән ҡул теймәгән - хәлен алды. Бакуйын ҡаршылап сапты ла салғыһын янырға тип дыңғырҙап торған сайыр төпһәгә эйелде. Сауҡа аҫтындағы ошо түңгәккә нисә терәлде икән? Ана, ҡайыны ниндәй булып киткән! Шулай уйлана-уйлана төпһәгә терәлгәйне, ҡапыл яртылаш ер күмгән бөкөлө таныш шешәне күреп ҡалды. Сайҡатып ҡарамаһа ла, эсендә шәрбәтле һөтһөҙ сәй икәнен белә - быуынға ултыра тип, айран йөрөтмәнеләр, һыуһынды ҡандырмай тип, аҡ ҡойманылар. Ҡасандыр үҙенең дә ошондай шешәнән сәй һемергәне иҫенә төштө. Һигеҙ йыл буйы яттымы икән? Шешәне ҡулына алыуға, тәне зымбырҙап ҡуйҙы. Күҙенә шешә ултырған соҡорҙағы беләү салынды. Салғының сүкеүе бөтмәһен тип, шуның менән генә яныр ине атаһы. Уны тик Үҙән ташынан ала торғайны...

Ир ике иләләй беләүҙе, атаһының ҡул йылыһын тойорҙай булып, усына йомоп тора бирҙе - эҫе көндә ерҙә ятҡан таш һалҡын. Һулаҡай түше тапҡырындағы күлдәк кеҫәһенә һалырға итте - футболка кейгәнен аңғарып, салбарҙыҡына тыҡты. Күңеленә лә ошо таштай һалҡын һәм ауыр һағыш инеп ятты.

Шул минутта әллә ҡайҙан аҙан тауышы ишетелде. Һул ҡулынан шешәһе төшөп китте. Йөрәге ҡыҫып алды. Әллә өйҙәгеләрҙән уңайһыҙланып, намаҙҙы ситтә уҡыған, әллә ошонда килгән саҡта һыртҡа менеп аҙан әйткән атаһының тауышы салынғандай булды ҡолағына. Күҙҙәренә йәш тығылды. Шул саҡ кейәүенең:

- Ҡайнаға! Аптырап китмә - телефонима яҙҙырылған аҙан тауышы өйләне күрһәтә. Мине юғалтма. Тәһәрәтләнеп киләм, - тип һөрәнләүен ишеткәс, шул яҡҡа ыңғайланы.

Атаһының һыулауға төшкән һуҡмағын тоҫмаллап, үҙәккә төшөп алды. Юлының ҡап уртаһында, һөҙәк битләүҙең тигеҙ ерендә, түбәлек кеүек нәмә күҙенә салынып, шып туҡтаны. Ҡасан бөткән леспромхоздың мазутлы гараж таҡталарынан армы-тормо ҡоршалған аласыҡ ишаратының бында ни хикмәттән ултырыуын бик аңлап та етмәне. Сабын алыҫ түгел - көнөнә йөрөй инеләр. Һуңғы йылдарында атаһы ятып эшләнеме икән ни? Ҡайһылай бер ҙә ҡыҙыҡһынмаған һуң ул? Ҡулы эш рәте белмәгән кеше ошо хәтлемде атҡа тейәп, юҡҡа ҡыялмағандыр инде.

Ипләп кенә тартҡайны, үпкәләгән кеүек торған салыш ишек күгәне менән килде лә төштө. Тәнтерәкләп сыҡҡан атаһын күтәреп торғоҙғандай булып, уны аласыҡтың ҡабырғаһына һөйәп, һыйпап алды. Башы менән төкөмәҫ өсөн иңкәйә биреп эскә үтте. Күҙенә стенаға һуҡтырып яһалған баҫҡыс салынды. Өҫтөндәге бесәне ҡарайып, күптән әүрәүгә әйләнгән урындыҡтың мурт һайғауҙарын ипләп кенә бер яҡҡа шылдырып һалды ла, һуҡҡылап, ныҡлығын тикшереп алғас, баҫҡыс буйлап өҫкә үрмәләне. Боролоп баҫҡан яғының ҡибла икәнен самалап, мәсет манараһы ише нәмә әтмәләп алған атаһының ошонда намаҙ уҡығанын аңланы.

Йүгереп шишмәгә төштө. Атаһы ҡуйған ҡайын туҙлы улаҡта (ошо көнгәсә серемәүен әйт әле!) кейәүе йыуынып тора ине. Тамағына тығылған төйөрҙө йота алмай, оҙаҡ торҙо ир. Ҡайнағаһының был хәлен үҙенсә аңлаған кейәүе уға тәһәрәт тәртибен өйрәтергә тотонодо.

...Һыртҡа менгәндә алдан төштө Йәүҙәт. Юл үтә лә оҙон булып тойолдо. Дүрт ҡыҙына, бер бөртөк улына оҫталар яллап өйҙәр һалышҡан, һәр ҡайһыһына исемләп сабынлыҡтар ҡалдырған, мал инселәгән атаһы ер йөҙөндәге бурыстарын теүәлләп киткән икән мәңгелек йортона. Ауылдан әллә ни алыҫ түгел урында бесәнде ҡуна ятып эшләүе лә сараһыҙлыҡ билдәһе булған. Бер бөртөк улы атаһының күңелен аңламаған. "Мәрхүмкәй" тип өҙөләп торған кейәүенә лә асыла алмағандыр, әсәһе әйтмешләй, "кеше балаһы" бит.

Әллә баш, әллә таш ҡалала йәшәп, күңеле ҡатып бөткәнен яңы аңланы ир. Сәнғәткә, музыкаға бағышланған ғүмере үтә мәғәнәһеҙ булып тойолдо уға. Ошоғаса, иң оло әҫәре яҙылмаған тип иҫәпләп, күпме эҙләнгәйне. Ә ул моң эргәләге мәсеттән көнөнә биш мәртәбә яңғырап торған. Күңеле менән тоймаған уны, башҡаның көйөн көйләп йәшәгән.

...Һыртта аҙан тауышы яңғыраны. Был мондоң киләсәктә атаһының исемен йөрөтәсәк мәсет манараһынан ишетелерен тойған Йәүҙәттең ҡәлебе иман нурына күмелде.

✓ ***Башҡорт ҡурайы - үлән ҡурай! Шуға ла Йомабай ағай үҙе менән төбө-тамыры менән алынған үлән ҡурайҙы бөтөн ғәм алдында ҡырҡып, яһап, башҡорт моңон таратҡан Парижда. Шуға аңлы рәүештә үҙ асылыбыҙҙан тайпылмайыҡ.***



КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# ЫСЫН ҠУРАЙСЫ ИКӘНҺЕҢ,

## ҡынында үлән ҡурай йөрөт

**"Киске Өфө"нөң быйылғы 8-се һанында ҡурайсы Илнур Хәйруллин "Ҡурай ҡурайсыны үҫтерәме, әллә ҡурайсы ҡурайҙымы?" тигән һорауҙы асыҡларға тырыша. Мин уның менән бәхәсләшергә йыйынмайым. Ә шулай ҙа ҡурай буйынса үҙ фекерҙәремде яҙып үткем килде минең дә.**



Ҡурай тауышын беренсе тапҡыр Ҡашҡар ауылы клубы (элекке мәсет) эргәһендә үҫкән тирәккә урынлаштырылған патефондан ишеттем. Күрәһең, берәр байрам уңайынан урамды йәнләндергәндәрҙер. Ишеткән көй бөгөн дә хәтеремдә, уның "Мөғлифә" тип аталғанын да белдем аҙаҡтан. 4-5 йәшлек бала күңеленә һеңде лә ҡуйҙы бит ҡурай моңо! Вәли ауылында (хәҙер ул юҡ инде) йәшәйбеҙ. Күршебеҙ Мәхмүтйән ағай ҡунаҡ саҡырған. Ҡунағы Айса ағай һәр ергә үҙе менән патефонын йөрөтә икән. Патефонға ҡушылып ҡурайҙа Мәхмүтйән ағай уйнай, ә Айса ағай дәртле итеп бейей. Көй иҫемдә. Ул - "Зарифа". Пластинкала, бәлки, Йомабай Иҫәнбаев ҡурайы яҙмаһы булғандыр. Был ваҡиғалар һуғыштан алдағы тыныс яҙҙа булды. Мәхмүтйән ағай яу ҡырында ятып ҡалды. Шуны ла әйтеп китәйем: ул ҡурайсы Азат Айытҡоловтың өләсәһе Хөсниямал апайҙың бер туған ағаһы. Ҡурайсылар төҫкә бер-береһенә оҡшап торалар. "Киске Өфө" гәзитендә (№19, 2010 йыл) Мәхмүтйән ағайҙың ҡыҙы Ғилмияза һауанан осоп барған самолетҡа: "Атайымды төшөрөп кит", - тип ҡысҡырыуы тураһында яҙғайны инде. Айса ағай яуҙан именаман ҡайтты, патефонын гел үҙе менән йөрөтөүҙе дауам итте. Ул әле лә ғаиләләрендә ҡомартҡы булып һаҡлана.

Ҡурай үләне беҙҙә күп үҫә. Үҙем үҫә төшкәс, шул үләнде тишкеләп, өргөләп, көй сығарырға өйрәндем. Ауылдаштарымды бейетеп, йырлатып алыр инем. Бер мәл дәртләнеп ҡурай уйнау һәләтемде камиллаштырмаҡсы булдым. Ғата ағай Сөләймәновтың китабын һатып алдым. Ауыл-район кимәлендә ойошторолған концерттарҙа ҡатнаштыҡланым. Әммә шартәмәл булманымы, ниңәлер был шөғөлдә артабан дауам итә алманым. Бөгөн дә дәртләнеп китеп өргөләп ҡарайым. Тик "алтын" тештәр тауыш сығарырға булышлыҡ итмәй икән...

Элек ҡурайсылар һирәк ине. Ишғәлә һәм Ишмулла Дилмөхәмәтовтар менән таныш булдым. Сәйфулла Дилмөхәмәтов менән бергә уҡыныҡ, бер ятаҡта йәшәнек. Күберәген артистарҙы тыңланыҡ, уларҙы алҡышланыҡ. Ғата ағай 1969 йылда Ленинградҡа барасаҡ ҡурайсыларҙы бөтөн Башҡортостан буйлап йыйҙы. Ул көндәр тарихы фотоларҙа һаҡланған. Һуңғы осорҙа ҡурайсылар, шөкөр, ишәйҙе. Ҡыуаныс, ҡәнәғәтләнеү кисермәй әмәл юҡ, бигерәк тә балаларҙың ошо боронғо шөғөлөбөҙгә ылығыуы ҙур ҡаҙаныш. Быға Ғата ағайҙың тырышлығы, хатта ҡаһарманлығы башланғыс һалды, әлбиттә. Өфө сәнғәт училищеһында ҡурай класы асылыуының һәҙемтәһен күрәбеҙ бөгөн. Тик элекке ҡурайсылар һәр саҡ беләк йыуанлыҡ, үҙе оҙонлоҡ үлән ҡурайҙа уйнар инеләр. Иҫеме һирәк телгә алынған Абдулла Хәлфетдиновтың ҡурайы ысынлап та үҙе оҙонлоҡ булғандыр. Ул осорҙа ла еҙ, пластмасса ҡурай булды, тик үлән ҡурайға өҫтөнлөк бирә инеләр. Ә бөгөн шпон ҡурай ҡулланалар. Унда уйнауы енел. Тын да әҙ тотонола. Шуғалырмы, хәҙер "виртуоз" ҡурайсылар күбәйҙе. Ағас ҡурай - ағас ҡурай инде, тауыш сыға, моң юҡ. Шпон ҡурайҙы музыка нотаһына тап килтереп, камертон ярҙамында көйләргә мөмкин, һәм шулай эшләнә лә. Шпон ҡурай бөгөн соло өсөн түгел, бәлки, башҡа инструменттарға ҡушылып уйнарға ҡулай. Шуға ла ундай ҡурай теләһә ҡайһы көй, теләһә ниндәй халыҡ көй-моңон уйнарға йәтеш.

Тик "башҡорт ҡурайы" тигәндә, иң тәүҙә үлән ҡурай күҙ алдыбыҙға баҫһын ине. Башҡорт иле - Урал. Ҡурай тик Уралда ғына үҫә. Шуға ла ул "реброплодник уральский" тигән фәнни исем алған. Ҡурайсы, әгәр ул үҙен ысын ҡурайсы тип иҫәпләй икән, ҡынында үлән ҡурай йөрөтһөн. Шундай ҡурайҙа ғына боронғо йырҙарыбыҙ, боронғо моңдарыбыҙ ысын йөкмәткеһе менән яңғырай. "Көйҙө тышынан түгел, эсенән уйнарға, эстән кисерергә кәрәк", - ти Илнур, һәм ул бик хаҡлы. Ҡурайҙы "күкрәккә һалып" уйнағандар борон ҡурайсылар. Ә тик өрөп тауыш сығарыу - һыбыҙғының бер төрөндә уйнау менән бәрәбәр. Уйын ҡоралы ҡурайлығын юғалта, тип борсолам. Бәйгеләрҙә лә үлән ҡурайҙа уйнап ярышһындар ине. Иғтибар итәм: үлән ҡурайҙан баш тартмаған, унан айырылмаған Илһам Байбулдин бәйгеләрҙә еңеүсе бит. Уға аманат итеп мин тиҫтәләгән ҡурай туплаһам, тапшырырға форсат ҡына сыҡмай тора. Ә былай ҡурайсылар бәйгеләре үткәрелеүе хуп - үҙ асылыбыҙҙы, үҙ тамырыбыҙҙы юғалтыу сигендә инек бит.

Мәшһүр ҡурайсыларыбыҙ үлән ҡурай алырға ауылдарына ҡайта торғайны. Ишмулла ағайҙың Йылайыр районы Яңы Яҡуп ауылына ҡайтып, ҡырға сыҡҡанда, аҡланда ҡурай күплеген күреп, "Бына был бит бәхет!" тип һөҡланыуы тураһында гәзиткә лә яҙғайнылар. 1970 йылдамы икән, Баймаҡ кунаҡханаһында ағай менән осраштыҡ. Ул 15-20 үлән ҡурайҙы төрөп алғайны.

Ҡурайҙы аҡландың (үҙәндең) башында үҫкәнен өҙөп алалар. Улар йөкараҡ та, яңғырауыҡлы ла. Тулыһынса кипмәгәнен дә ҡырҡып алалар һәм эсенә ҡом тултырып, киптерәләр. Ҡурай йыл һайын уңып тормай бит. Ҡурай эшләп алыу һәр кемдең мөмкинлегенә ҡағыла: ҡуҡрәк кинлеге, ус яҫылығы, бармаҡтар йыуанлығы - төп параметрҙар. Әгәр ҡурай ауыҙға "һыймаһа", ос башынан уйнағандар бит хатта.

Бөгөн ҡурайҙы заманлаштырырға тырышыуҙар бар инде ул. Ваҡытында Ишморат Илбәковты ла "теткеләп" алдыҡ. Илнур Хәйруллин да, хроматик ҡурайҙа уйнаған өсөн күптәр мине битәрләй, ти. Үпкәләрһең дә. Сөнки ул яңы типтағы музыка ҡоралы. Ҡурай түгел, тиһәң дә була. Ҡабатлайым: башҡорт ҡурайы - үлән ҡурай! Шуға ла Йомабай ағай үҙе менән төбө-тамыры менән алынған үлән ҡурайҙы бөтөн ғәм алдында ҡырҡып, яһап, башҡорт моңон таратҡан Парижда. Шуға аңлы рәүештә үҙ асылыбыҙҙан тайпылмайыҡ. Шунда ғына ҡурайҙың тик башҡорттоҡ милли уйын ҡоралы булғанын донъяға тарата, инандыра алырбыҙ. Уны урлаусы, файҙаланыусы, үҙләштереүсе булмаҫ. Ҡурай уйнарға теләгән, өйрәнгән һәр беребеҙ сәхнә түрен биләмәҫ. Әммә һәр беребеҙ халҡыбыҙ булмышын һаҡларға бурыслы.

**Йәмних ҠАШҠАРОВ.**
**Баймаҡ районы**
**Әбделкәрим ауылы.**

---

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО




* * *

Бер еҙнә менән осраштыҡ һәм унан:

- Еҙнә, хәлдәрең нисек? - тип һораным.

- Ятһам, йоҡлап барам, торһам, ашап барам, ауырыйым, шикелле... - тип яуап бирҙе ул.

* * *

Яҙҙың йыбандырғыс, болоҡһоу көндәренең береһендә әсәйем атайыма тышта эшләй торған йомош ҡуша икән. Атайым иһә, ишетмәмешкә һалышып, гәзит уҡып тик ята, ти. Әсәйемдең сираттағы үтенесенә ул әйләнеп былай тигән:

- Ауырыйым, тиһәм, ышанмаҫһың инде, ялҡауым килә...

* * *

Атайымдың һуғыштан һуң Украинала ҡалып, шунда өйләнеп йәшәгән ағаһы бар ине. Уның Салауат тигән улы, Саша булып, башҡорт икәне тик паспортында һәм хоҡонда ғына сағылып, хәҙер ҙә Украинала йәшәп ята. Башҡортостанға ҡайтҡанда ул беҙҙе башҡортса аңларға тырышһа, беҙҙекеләр телдәрен һындыра яҙып, уға рус телендә аңлатып маташа.

Бер көн былар һунарға сығырға йөрөй икән.

- Рафил агай, мы на кого будем охотиться? - тип һораған Саша-Салауат.

Ағайым эргәләге Байҙаҡан тауына ҡарап торған да:

- Байҙаҡан перевернем, - тигән.

Шунан яңылышыраҡ әйткәнен шәйләп:

- Переворачиваем и что-нибудь найдем, - тип өҫтәп ҡуйған.

* * *

Һунарға ике ат егеп ҡуҙғалғандар. Әлбиттә, йола буйынса, "йылыткыс" һалып алырға ла онотмағандар. Юлда барғанда:

- Рафил, тороп тор әле, - тип, алда барған атты туҡтатып, "йылынып" алалар ҙа, ары ҡуҙғалалар икән.

Арыуыҡ ара үтһәләр ҙә, һаман да "йылынырға" туктамағастары, Саша "башҡортса" былай тип өндәшкән:

- Рафил агай, айда, по сто грамм тороптор сделаем...

* * *

Һуғыштан һуңғы аслыҡ йылдарында малайҙар өйгә аҙыҡ алып ҡайтыу юлын эҙләп, һунарға йөрөй торған булған. Бер көн шулай һунарға сыҡҡас, Рафил ағай ҡуян ҡыуырға алдан киткән, минең атай мылтыҡ тотоп, ағас артына йәшенгән. Йәшеренеп күп тә тормаған, аҡланға ике ҡуян килеп сыҡҡан да, береһенән-береһе ике метрлап арала ултырғандар.

Атайым: "Береһен атһам, Рафилға булмай, дробь тарала, тиҙәр, моғайын, тейер әле", - тип, ике ҡуяндың уртаһына тоҫҡап атҡан.

- Бер ҡуянды икегә бүлер инек, хәҙер нимәне бүләбеҙ инде, - тип, үҙе һуңынан үпкәләй, ти.

* * *

Алты-ете ир-уҙаман ҡыштың бер көнөндә, айыу алырға тип, һунарға сыҡҡан. Ишморат тигәндәре, мылтығы булмаһа ла, ҡапҡандарығыҙҙы тотоп барырмын, тип, быларға эйәргән. Өңдө табып, әҙерләнеп тә өлгөрмәгәндәр, йоҡоһонан уянған айыу, ҡапыл өңөнән сығып, һунарсыларға ташланған. Тегеләй-былай итеп, кумәкләп айыуҙы атып йыҡҡандар. Иҫтәрәнә килеп, улай-былай ҡараһалар, Ишморат юҡ икән. Аптырашҡан һунарсылар ҡысҡырышып, быны эҙләргә тотонған. Өҫтән тауыш сыҡҡанға ҡараһалар, саңғыһын да сисмәгән Ишморат, ике ауыр ҡапҡан тотоп, ҡайын башында ултыра, ти.

**Азамат БАГАУВ.**
**Әбйәлил районы**
**Тал-Ҡусҡар ауылы.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЯБЫҒЫУ ӨСӨН...

## һыу кәрәк

■ Матдәләр алышыныуҙы тиҙләтеү - көүҙәне һомғол тотоуҙа ҙур роль уйнай. Кемгәлер был нәҫелдән бирелә. Ир-егеттәр, мәҫәлән, ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда калорияларҙы тиҙерәк яндыра. 40 йәште үткәс, күптәрҙең метаболизмы яйлай. Ғалимдар билдәләүенсә, беҙ хатта тик ултырғанда ла, организм калорияларҙы яндырыуын дауам итә. Кемдең мускулдар массаһы күберәк, уларҙы матдәләр алышыныу тиҙлеге лә ҙурыраҡ. Сама менән иҫәпләгәндә, 500 грамм мускул туҡымаһы көнөнә 6 калория тотона. Шул уҡ ваҡытта, 500 грамм май көнөнә 2 калория ғына яндыра. Шуға ла мускулдарҙы үҫтерегеҙ. Калорияларҙы эшкәртеү өсөн организмға һыу кәрәк. Һыу етешмәй башлаһа, матдәләр алышыныуы шунда уҡ яйлай. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, көнөнә 6-8 стакан һыу эсергә кәрәк.

■ Яланда үҫкән аҡ сәскә стресс, нервы көсөргәнеше һәм хәүеф тойғоһонан ҡотолорға ярҙам итә. Ул хатта химик юл менән яһалған ҡиммәтле тынысландырыусы дарыуҙарҙы ла алыштыра ала. Аҡ сәскәнең файҙалы яҡтарын АҠШ-ла тикшереп ҡарағандар. Эксперимент барышында аҡ сәскә төнәтмәһе ҡулланыусылар стресс һәм хәүеф тойғоһонан тулыһынса арына алған. Аҡ сәскә төнәтмәһе сәләмәтлеккә зыян килтермәй генә йоҡоһоҙлоҡтан дауалай, шулай уҡ артыҡ әүҙем балаларҙы тынысландырырға ярҙам итә.

■ Үҙҙәрен агрессив тотҡан ир-егеттәрҙең үҙ-үҙенә ышанысы түбән була. Дөйөм алғанда, бөтөн ир-аттарға ла ирҙәрсә ҡылыҡтар, мәҫәлән, үҙенде хәүеф аҫтына ҡуйыу, психоактив матдәләр ҡулланыу, агрессияға бирелеү хас. Атлантала ғы ауырыуҙарҙы контролдә тотоу һәм профилактикалау үҙәге тикшеренеүселәре үҙен ысын ир-егет итеп тоймаған ир-аттарҙың ҡылыҡтарын тикшереп ҡараған. Һынауҙарҙа 18 йәштән 50 йәшкә тиклемге 600 кеше ҡатнашҡан. Улар үҙҙәренең ҡылыҡтары тураһында һөйләгән, уның фекеренсә, ысын ир-егет ниндәй булырға тейеш тигән һорауға ла яуап биргән. Ғалимдар асыҡлауынса, кем үҙен етерлек кимәлдә ҡыйыу һәм көслө тип иҫәпләмәй, улар күпкә агрессивыраҡ булған. Ундайҙар үҙенә ҡорбан табып, уға зыян килтереүҙән дә тартынмай, алкоголде лә йышыраҡ ҡуллана.

■ Ҡайһы саҡта кире тойғолар һәм уйҙар шул тиклем биләп ала, уларҙан ҡотолоу ысулдары юҡ кеүек тойлоп китә. Белгестәр был проблеманы түбәндәгесә хәл итергә кәңәш итә. Америка ғалимдары мәктәп уҡыусылары ярҙамында тикшеренеүҙәр үткәргән. Үҫмерҙәр үҙҙәренең кире тойғоларын һәм хәүефтәрен ҡағыҙға яҙған. Уларҙың яртыһы был ҡағыҙҙарҙы һаҡлаған, яртыһы утта яндырған. Психологтар билдәләүенсә, кире тойғолары яҙылған ҡағыҙҙарҙы утҡа яҡҡан уҡыусылар психологик яҡтан үҙҙәрен күпкә яҡшыраҡ тойған, улар стрестарҙы ла еңелерәк кисергән. Уйҙарҙы ҡағыҙҙа һаҡлау хәлде киҫкенләштерә генә, ти ғалимдар. Ә была яҡшы уйҙар яҙылған яҙмаларҙы ваҡыты-ваҡыты менән уҡып тороу кәйефте күтәрә, эмоциональ торошто яҡшырта.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

**Теге йәки был сиргә зарланып, табипҡа мөрәжәғәт иткәндә, улар иң тәүҙә ябай ғына булып күренгән анализ тапшырырға - ҡан бирергә йүнәлтмә яҙа. Уның өсөн аҙналар буйына әҙерләнергә лә кәрәкмәй, йоҡонан уяндың да, барҙың да тапшырҙың. Әммә был тәү ҡарашҡа ғына шулай икән. Баҡтиһәң, ҡан анализы буйынса табип дөрөҫ һығымта яһаһын тиһәгеҙ, 100 процентҡа дөрөҫ һөҙөмтә алырға теләһәгеҙ, ҡан биргәндә лә ҡайһы бер ҡағиҙәләрҙе аныҡ үтәргә кәрәк. Был хаҡта бөгөн табип-диетолог Зөлфиә ХӘБИБУЛЛИНА аңлата.**

# КҮП МӘҒЛҮМӘТТЕ...

## ҡан аша белеп була



**➔ Анализға ҡан тапшырғанда ниндәй ҡағиҙәләрҙе белергә кәрәк һәм уларға күҙ йоморға ярамай?**

- Ҡан анализын тапшырыу өсөн иң оптималь ваҡыт - иртәнге 8-ҙән 11-гә тиклем. Уны ас ҡарынға тапшырыу мотлаҡ, йәғни ашау, эсеү, һағыҙ сәйнәү тыйыла. Һуңғы тапҡыр ашағандан һуң кәмендә 12 сәғәт үтергә тейеш. Бигерәк тә был ҡанды липидограммаға (холестерин кимәлен, уның "яҡшы", "насар" икәнлеген, триглицеридтарҙы билдәләгәндә), ҡандағы шәкәр күләмен асыҡлау өсөн тапшырғанда бик мөһим. Сөнки ашау ваҡыты менән ҡан тапшырыу ваҡыты араһында айырма ни тиклем әҙерәк, күрһәткестәр ҙә шул тиклем дөрөҫ булмаясаҡ. Һөҙөмтәлә табип нигеҙһеҙ дауаланыу билдәләйәсәк. Ә был һеҙгә кәрәкме? Шулай уҡ ике көн алда майлы, ҡыҙҙырылған ризыҡ ашамаҫҡа, алкоголь ҡулланмаҫҡа кәңәш ителә. Әгәр ҡан тапшыра торған көндән бер көн алды байрам итһәгеҙ икән, лаборатор тикшереүҙәрҙе ике көнгә алға күсерегеҙ. Алкоголдең сәләмәтлеккә кире йоғонтоһо, уның организмдың барлыҡ фермент системалары көсөргәндереүе тураһында аңлатып тороу кәрәкмәйҙер, моғайын. Төнгө дежурство, йоҡоһоҙ төн йәки таңға тиклем күңел асҡандан һуң ҡан анализы тапшырмағыҙ. Мотлаҡ 7-8 сәғәт йоҡлағыҙ.

Анализды диагностик йәки терапевтик процедуралар башҡарылғанға тиклем тапшырыу мотлаҡ. Рентгенография, ультратауышлы тикшеренеү, массаж, косметология, физиотерапевтик процедуралар, веналарға система ҡуйылғандан һуң ҡан тапшырыу ярамай.

**➔ Кемдер һыу эсмәй тора алмай. Улар нисек түҙергә тейеш? Сөнки түҙеү - үҙе үк кешене стресҡа килтереүе ихтимал. Ҡайһы берәүҙәр билдәле ваҡытта дарыу эсә...**

- Ҡан тапшырыр алдынан 1-2 стакан газһыҙ һыу эсергә мөмкин. Әммә сәй, бигерәк тә шәкәрле, кофе, һут йәки башҡа эсемлектәр эсеү ҡәтғи тыйыла. Хатта ике сәғәт алда тәмәке тартырға ла ярамай. Шулай уҡ анализ тапшырғанға тиклем өс көн ҡала барлыҡ физик көсөргәнеште кәметергә кәрәк. Хатта шәп атлап йөрөү, баҫҡыс буйлап йәйәү менеү ҙә тыйыла, тренажер залында шөғөлләнеү һәм йүгереү тураһында әйтеп тораһы ла түгел.

Стресс тураһында ла дөрөҫ әйтеп киттегеҙ: психик көсөргәнеште, стресты булдырмаҫҡа, бер иртәлә булһа ла бар нәмәгә битараф ҡалыу зарур. Әгәр рулдәһегеҙ икән, берәүҙең дә юлын ҡыймағыҙ, уң яҡтағы һыҙатҡа тороп алығыҙ ҙа, тыныс ҡына йылап барығыҙ. Кәрәк икән, туҡтап алығыҙ. Ҡан тапшырыу процедураһы алдынан лабораторияның ҡабул итеү бүлмәһендә 10-15 минут ултырып, тынысланығыҙ.

Әгәр дарыу ҡабул итһәгеҙ, дауалаусы табип менән кәңәшләшеп, ҡан тапшырғанға тиклем уларҙы бер тәүлек эсмәҫкә тырышығыҙ.

**➔ Былар - дөйөм ҡағиҙәләр. Әммә ҡатын-ҡыҙ организмы ир-аттыҡына ҡарағанда икенсе төрләрәк. Анализға ҡан тапшырғанда ҡатын-ҡыҙ нимәләрҙе белергә тейеш?**

- Эйе, гүзәл зат өсөн тағы ла өҫтәмә тыйыуҙар бар. Мәҫәлән, уларҙың физиологик торошона бәйле, ФГС (фолликулаларҙы стимуллаусы гормон), ЛГ (лютеотропин, лютропин), пролактин, эстриол, эстрадиол, прогестерон гормондарын тикшереү хаҡында әйтеп китергә кәрәк.

12-13 йәштән алып тулдән ҡалғанға тиклем һәр ҡатын-ҡыҙҙың күреме килә. Ай дауамында уның организмында енси гормондарҙың тупланыуы һиҙелерлек үҙгәрә. Шуға күрә "ҡатын-ҡыҙҙар" анализына күрем циклының билдәле көндәрендә генә ҡан тапшырыу мотлаҡ. Был көн дауалаусы табип тарафынан, ниндәй гормонды көйләү кәрәклегенән сығып билдәләнә.

Шулай уҡ йөклөлөктөң нисә аҙна булыуына/лактацияға (бала имеҙеү) ҡарап, ҡандағы гормондар, ҡайһы бер үҙенсәлекле аҡһымдар, фермент системаһы, гемостаза күрһәткесе үҙгәрә.

**➔ Ә аныҡ һөҙөмтәләр алыу өсөн нимә эшләргә кәрәк?**

- ФСГ, ЛГ, прогестерон, эстрадиол, андростендион, 17-гидроксипрогестерон, пролактин, шулай уҡ айырым маркерҙар: ингибин В һәм АМГ (антимюллер гормоны) тапшырыу өсөн дауалаусы табиптан күрем циклының/йөклөлөк ваҡытының оптималь көндәрен билдәләү зарур.

Әгәр башҡа кәңәштәр юҡ икән, ҡағиҙә буларак, ФСГ һәм ЛГ кимәлен билдәләү өсөн анализдарҙы күрем циклының 4-6-сы көнөнә тапшыралар. Эстрадиол һәм прогестерон кимәлен билдәләргә кәрәккәндә - циклдың 21-23-сө көнөндә. Йүнәлтмәлә күрем циклының/йөклөлөктөң/имеҙеүҙең фазаһын күрһәтеү мотлаҡ. Пролактинға ҡан тапшырғанда, алда бирелгән кәңәштәрҙән тыш, бер көн алдан енси бәйләнеш тыйыла.

**➔ Ҡайһы бер кеше ҡандан ҡурҡа, шуға ла ҡан тапшырыу улар өсөн яза кеүек...**

- Ҡандан ҡурҡһағыҙ икән, ҡан тапшырғанда башығыҙҙы ситкә борорға, ҡанға ҡарамаҫҡа кәрәк. Әгәр ошо көндә баш әйләнә, хәлһеҙлек тойола икән, был хаҡта шәфҡәт туташын иҫкәртеү зарур, ул процедураны һеҙгә ятҡырып эшләр. Ҡан тапшырғандан һуң ҡулды терһәктән бөгөп, уны шулай 5 минут самаһы тотоп торорға кәңәш ителә, был венаға энә ҡаҙалған урында гематома барлыҡҡа килеү ихтималлығын кәмета.

**➔ Ғәҙәттә, аныҡ диагноҙығыҙҙы белергә теләһәгеҙ, бер нисә табипҡа мөрәжәғәт итегеҙ, тиҙәр. Анализдар дөрөҫ булһын тиһәң, төрлө лабораторияларға тапшырыу яраймы?**

- Ҡан анализдарының динамикала үҙгәреүен сағыштырып ҡарарға теләһәгеҙ, уны бер лабораторияла ғына тапшырығыҙ. Сөнки төрлө медицина лабораторияларында төрлө ысулдар, төрлө реактивтар, төрлө нормалар ҡулланыла. Әгәр анализдарығыҙҙа тайпылыштар күрһәгеҙ, хәүефләнмәгеҙ. Ҡайһы берҙә лаборатория ла хаталана, кеше факторы ла йоғонто яһауы мөмкин. Йәки реактив сифатлы түгел, ҡан тапшырыуға әҙерлеккә илке-һалҡы ҡарау, әҙер булмау. Был осраҡта мәҡәләнең башында яҙылған ҡағиҙәләрҙе иғтибарлап уҡып, ҡабаттан тапшырырға кәрәк.

Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.

**✓ *Әгәр кемдер анығ кешенең исемен атамай, йәғни уның кем икәнен башҡаларға белдермәй, "ниндәйҙер бер кеше" тип кенә ғибрәт йә фәһем өсөн уның тураһында имеш-мимеш һөйләй икән, был ғәйбәткә һаналмай.***



СӘЙЕР ҒӘҘӘТ

# ИМЕШ-МИМЕШТӘРҘЕҢ...

## ғәйбәт тигәне - оло гонаһ

**Үҙе хаҡында, йәиһә башҡалар тураһында һәр төрлө мәҙәк, көлкөлө, ә ҡайһы берҙә хатта насар имеш-мимештәр ишетмәгән кеше юҡтыр. Кемдер тарафынан тыуҙырылып, унан икенсеһенә һәм башҡаларға күсә-килә ниҙер өҫтәлә, эшкәртелә-шымартыла барып, бөтөнләй икенсе мәғәнәгә күсеп тә ҡуя бындай хәбәрҙәрҙең йөкмәткеһе.**



Күптән түгел Магнитогорск ҡалаһына юлым төшкәйне. Ҡыҙыл район үҙәген үткәс, Увальский тигән ауыл тапҡырына килеп еттем. Был ауылда беҙҙең хәрби госпиталдә санитар булып хеҙмәт иткән Олег Токарев йәшәгәнен беләм. Ул һалдат хеҙмәтен үтәгән мәлдә ата-әсәһе беҙҙең гарнизонға килеп тә ҡайтты. Силәбе өлкәһендә йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, Сибай ҡасабаһына яҡын булғас, мин уларҙы "земляктар" тип йылы ҡабул итеп, хатта яҡшы ғына ҡунаҡ итеп тә ҡайтарғайным. Ул ваҡыттарҙан һуң егермe биш йылдар самаһы ла үтеп киткән икән. Шул таныштарыма инеп, хәл-әхүәлдәрен белеп сығырға булдым. Кешеләрҙән һорашып, өйҙәрен таптым. Йорттары янына килеп туҡтау менән ҡаршыма олпат кәүҙәле элекке һалдатым килеп сыҡты. Мине танырмы-юҡмы тип торам: таныны! Тик... уның йөҙөндә ниндәйҙер ҡурҡыу менән аптырау ҡатыш билдәләр сырамыттым.

- Олег, привет! Танымайһыңмы әллә? - тием тегегә.

- Товарищ подполковник, был - һеҙме?..

- Тап үҙе!

- Һеҙ тереме ни?..

- Үҙең күреп тораһың бит!

Бына шулай икеләнә-икеләнә һалдатым мине ҡосаҡлап алды, күҙҙәре сыланғанын да шәйләнем.

- Иптәш подполковник, беҙ һеҙҙе бынан әллә нисә йыл элек "ерләгәйнек" бит... Һеҙҙе һәләк булып ҡалған тип ишеткәйнек.

- Берәйһе менән бутағандарҙыр...

- Атайыма шылтыратып шатландырайым әле... - Олег телефондан һөйләшә башланы. - Атай, беләһеңме беҙгә кем килеп төштө? Доктор Суюндуков!.. Эйе, эйе, теп-тере, бына ҡаршымда баҫып тора...

Элегерәк, хеҙмәт иткән дәүерҙә лә шундай осраҡтар булғылағаны бар. Түбәнге Тагил ҡалаһынан Ҡарталыға хеҙмәт итергә күсҡәс, ҡыш көнө тайып йығылып, бер ҡабырғамды һындырғайным. Шул мәл элекке бер хеҙмәттәшемдең вафат булыуы хаҡында телефон аша хәбәр иттеләр. Ерләшергә лә саҡыралар ине. "Йығылып, ҡабырғамды һындырып йөрөп ятам, килә алмайым", тип әйттем. Бер-ике йыл үткәс, әлеге ҡалаға командировка төштө. Унда осраҡҡан элекке хеҙмәттәштәрем: "Һине аварияға осрап, ауыр хәлдә ята, тип ишеткәйнек", - тип аптыратты.

Бер йылда Дағстанда күпмелер ваҡыт командировкала булырға тура килгәйне (ул саҡ Афғанда һуғыш барған мәл). Мин отпускыға ҡайтып төшкәс, таныштарым "Афғанстандан имен-һау әйләнеп ҡайтыуым менән" ҡотлағыланы. Мин дин юлына баҫҡас, подполковник Һөйөндөков хәрби ҡаласыҡта мәсет асып, шунда имам булып тора, имеш, тип тә, мине йога менән шөғөлләнә башлаған икән тип тә ишетеүселәр булған...

Һикһәненсе йылдар башында беҙҙең Баймаҡ районы Аҡтау ауылы егете - минең яҡын танышым Абдрахман исемле егет Афғанстанда һәләк булғайны. Цинк табутында уны ауылға алып ҡайтып ерләнеләр. Шунан һуң ун биш-егерме йылдар үткәс, хеҙмәт итеп йөрөгән еремә тыуғандарҙың кемеһелер ғәжәп бер яңылыҡ тураһында хат яҙҙы, имеш, был танышым һәләк булмаған, ә оҙаҡ йылдар әсирҙә булып, өйөнә әйләнеп ҡайтҡан... Сираттағы отпускыға ҡайтып, хәрби комиссариатҡа иҫәпкә торорға ингәндә был хаҡта һораштым. "Был хәбәр беҙгә лә ишетелде, тик буш һүҙ ул", тинеләр унда. Тап ана шул имеш-мимешкә таянып, сюжет ҡороп, үҙемдең иң тәүге "Тау тотҡоно" исемле повесымды яҙып, "Шоңҡар" журналына бирҙем. Әҫәр журналда баҫылып сығып, күпмелер ваҡыт үткәс, ниндәйҙер бер туй мәлендә ҡоҙаларҙың береһе менән һөйләшеп торабыҙ. Һүҙебеҙ әлеге Афған тураһында сыҡты. Һүҙ араһында теге ҡоҙа миңә әйтә:

- Беҙҙең бер башҡорт һалдаты егерме йылдан ашыу Афғанда тау мәмерйәһендә бикләнеп йәшәп, тере көйөнсә табылып, өйөнә әйләнеп ҡайтҡан икән! Белорет районынан. Ауылының исемен дә беләм инем, онотҡанмын...

- Булмаған хәлдер ул, - тигән булам, кем хаҡында һүҙ барғанын шунда уҡ аңлап.

- Ысын булған. Ышанмаһаң, ана теге "Шоңҡар" журналын алып уҡы.

- Кем яҙған уны? - тип һораған булам тағы.

- Әллә, уныһын кем белгән. Ней булһа ла ана шул журналда инде...

Матбуғат баҫмаһында минең әлеге повесымды уҡыған икән ҡоҙа. Тик авторына иғтибар итмәгән. Был хәлдең ысынбарлыҡта булмағанлығы хаҡында әйткәс, уның хатта кәйефе ҡырылып китте.

- Эй, мин уны ысын тип иҫәпләп йөрөһәм әле...

Үҙем менән булған ошондай имеш-мимеш хәбәрҙәргә әллә ни иҫем китмәй, әлбиттә. Күберәк йылмайып ҡына ҡуям. Әммә имеш-мимештәрҙең артыҡ уҫалы, ауыҙы ла була шул. Улары иһә ғәйбәт тип атала.

Шәриғәт ҡануниарына ярашлы, кемдер тураһында уның артынан насарлап һөйләү ғәйбәт һанала. Моғайын, иғтибар иткәнегеҙ барҙыр: кем менәндер булған ниндәйҙер бер мәҙәк хәлде һөйләп, көлөшөп алғандан һуң, "Ярай, был кешенең гонаһтары кәмер", тип, үҙ-үҙҙәрен тынысландырып ҡуйлар бәғзеләр. Ә был бит ысынлап та шулай, йәғни кемдеңдер "гонаһы кәмеү" мөмкинлеге хаҡында һүҙ юҡтан ғына килеп сыҡмаған. Тик ошо хаҡтағы хәҙистең мәғәнәһен дөрөҫ кенә итеп аңлап, уға ифрат та етди ҡарау кәрәк. Аллаһ илсеһенең ошондай мәғәнәле бер хәҙисе бар: Хоҙай ҡаршыһына тау ҡәҙәре яҡшы ғәмәлдәре, ғибәҙәттәре менән килеп баҫып та, тереклектә сағында башҡалар хаҡында ғәйбәт һөйләгән йәиһә башҡа ҡылыҡтары менән бүтәндәрҙе ҡыйырһытҡан икән, был кешенең яҡшы ғәмәлдәре уның тарафынан ҡыйырһытылған кешеләргә күсереләә. Ысынлап та, ғәйбәт һөйләргә әүәҫ кешенең изге ғәмәлдәре уның гонаһтарын ҡаплауға етмәй ҡалыуы һәм уға үҙе тарафынан ҡыйырһытылғандарҙың гонаһтары күсерелә башлауы мөмкин. Бына ниндәй ҡурҡыныс икән ул ғәйбәт һөйләү тигән нәмә! Бәғзеләр тик яған хәбәрҙәр генә ғәйбәт була икән тип уйлап хаталана. Ялған хәбәрҙәр һөйләү тағы ла ҡурҡынысыраҡ, сөнки ул, Бәйғәмбәребеҙ әйтеүенсә, яла ягыуға һанала.

Шуны ла белеп ҡуйыу кәрәк: әгәр кемдер анығ кешенең исемен атамай, йәғни уның кем икәнен башҡаларға белдермәй, "ниндәйҙер бер кеше" тип кенә ғибрәт йә фәһем өсөн уның тураһында имеш-мимеш һөйләй икән, был ғәйбәткә һаналмай. Ниндәйҙер еңәйәтсене фаш итеү өсөн һөйләнгән имеш-мимештәргә лә ташламалар бар. Ә инде алдыңды-артыңды уйламай, хатта бер килке деталдәр өҫтәй биреп, башҡаларҙы көлдөрөү һәм аптыратыу өсөн генә кемдер хаҡында имеш-мимеш һөйләйһең икән, был иһә оло гонаһ икәнен һәр кем белеп торорға тейеш.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

---

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

### Ә кем йәшәү еңел булырға тейеш тине?

Бер ваҡыт бер ҡатын: "Тормошомда бер ваҡытта ла үҙемә оҡшаған эш менән шөғөлләнмәнем", - тине. "Үҙемде ҡорбан иттем", - тип кенә өҫтәмәне. Бик аяныс. Ә тормош асылда ҡыуаныс килтерергә тейеш! Ҡоштар ояныу менән һайрай башлай, бәләкәй балалар бер сәбәпһеҙ көлә. Дельфиндарҙы күҙәтегеҙ. Пляжда тулҡындар күмеп киткәндә эттәр үҙҙәрен нисек тотоуын ҡарағыҙ. Кем тормошта ҡыуаныс юҡ, ти? Йыһан бәхет һәм шатлыҡ менән тулы. Кемдер, ҡыуанып йәшәү - яҡшы түгел, тип тыҡлый икән, үҙегеҙҙе был инаныуҙан кире дүндерегеҙ.

Күңел асыу һәм ял итеү өсөн ваҡыт йәлләмәгеҙ. Йығылғансы эшләү - үҙ-үҙеңдә "тормош - көрәш" икәнлегенә тағы бер тапҡыр инандырыу ғына ул. Тормошҡа ҡыуанырға өйрәнегеҙ, сөнки бының өсөн дә күнекмә кәрәк. Әгәр тормошоғоҙ майлап ҡуйған кеүек алға тәгәрәй, ә эске тауышығыҙ: "Был оҙаҡҡа түгел", - ти икән: "Сөнки алда тағы ла яҡшыраҡ буласаҡ" - тип әйтегеҙ.

Был тормошта нимәгәләр: әйбергә, кешеләргә, аҡсаға... ныҡ бәйле булһағыҙ, тормошоғоҙ кирегә китәсәк. Шуға күрә иң ауыры - бөтөн нәмәне анығ баһалап, бер нәмәгә лә бәйле булмау.

### Бәйлелек

Нимәнәндер артынан ҡыуалаһаң, ул мотлаҡ һинән ҡаса. Был ҡағиҙәне бөтөн нәмә: хайуандар, кешеләр, аҡса һ.б. ҡарата ҡулланырға була. Ҡайһы берҙә ниндәйҙер кисәлә иҫ китмәле ҡыҙ-егет менән танышаның, ул һинә шылтыратырға вәғәҙә бирә. Аҙна буйына өйҙән дә сыҡмай унан шылтыратыуы көтәһең - ә ул юғала! Йәки нимәнәлер тиҙ генә һатып ебәрергә кәрәк. Әммә телеүселәр юҡ. Аптырағандан, хаҡын кәметәһең. Барыбер бер кем дә килмәй. Ни өсөн? Сөнки эш барышында күңел төшөнкөлөгө ярҙамсы түгел!

Һатыу буйынса теләнә ниндәй белгестән һорағыҙ: хатта реактив самолеттар менән һатыу итһең, йәиһә кер йыуыу порошогы менән - ул шуны уҡ ҡабатлаясаҡ. Күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп, үҙебеҙҙе көрсөккә терәйбеҙ. Йәғни ни тиклем тыныслыҙланаһың, шул тиклем әҙерәк һатасаҡһың! Ә инде магазинға тотош исемлек төҙөп, тиҙ генә алып сығам тип инһәң - ҡағыҙыңды таба алмайһың.

Ниндәйҙер һөҙөмтәгә хис-тойғо менән бәйләнеп, уны тиҙ арала башҡарырға теләгән һайын һөҙөмтә беҙҙән алыҫҡараҡ ҡаса. Ә был принцип кире яҡҡа эшләйме? Әлбиттә, саҡ ҡына тынныслан - һәм барыһы ла үҙенән-үҙе килеп сыға!

Бындай миҫалды бәхәстә лә күрергә мөмкин. Кемгәлер нимәнәлер ныҡ итеп аңлатҡыңыҙ, уны еңеп ҡуйғығыҙ килә. Әммә ул кеше фекерен үҙгәртәме? Юҡ! Уға баҫым яһауҙы туҡтататыу менән ул шунда уҡ һинең хаҡлы булыуыңды аңлай.

Түҙемһеҙлегебеҙ менән үҙебеҙ тирәләй тап ошо ваҡиғаларҙы беҙҙән алыҫлаштырыусы кәртә ҡорабыҙ ҙа инде.

**Эндрю Мэтьюз.**
**(Дауамы бар).**



## 31 ИЮЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Королева игры". 9-я и 10-я серии. Мелодраматический сериал (16+).
23.40 "Полуночное солнце". 1-я и 2-я серии. Криминальный сериал (18+).
01.50, 03.05 "Тора! Тора! Тора!". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "По горячим следам". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Фотограф". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Московская борзая". 1-3-я серии. Криминальный сериал (16+).
23.50 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
02.15 "Наследники". Криминальный сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Прорицатель Омар Хайям. Хроника легенды". Сериал (12+).**
**11.00 Новости недели.**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00, 23.30 "Автограф" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Наука 102" (12+).**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**17.15 "Неизвестный Башкортостан" (12+).**
**17.45 "Наши годы" (12+).**
**18.15 "Орнамент".**
**18.55 Хоккей. "Кубок ХК "Салават Юлаев-2017".**
**22.00 "Легенды спорта" (12+).**
**23.00 "Бай" (12+).**
**24.00 "Медвежатник". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.30 "Бәхетнамә" (12+).**

## 1 АВГУСТА
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 03.50 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле" (16+).
19.50 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым" (16+).
21.30 "Время".
21.30 "Королева игры". 11-я и 12-я серии (16+).
23.40 "Полуночное солнце". 3-я и 4-я серии (18+).
01.50, 03.05 "Руководство для женатых". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "По горячим следам". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Приличные люди". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести. Местное время".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Московская борзая". 4-6-я серии (12+).
23.50 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
02.25 "Наследники". Криминальный сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Прорицатель Омар Хайям. Хроника легенды". Сериал (12+).**
**11.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Бизнес-проба" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму" (6+).**
**15.30 "Йырлы кәрәҙ".**
**15.45 "Бауырһаҡ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр" (6+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Дознание" (16+).**
**18.15 "Орнамент".**
**18.55 Хоккей. "Кубок ХК "Салават Юлаев"-2017". "Толпар" (Уфа) - "Реактор" (Нижнекамск).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Бала-саға" (6+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Блуббери". Худ. фильм (18+).**
**02.00 "Бәхетнамә" (12+).**

## 2 АВГУСТА
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 03.45 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Королева игры". 13-я и 14-я серии (12+).
23.40 "Полуночное солнце". 5-я и 6-я серии. Криминальный сериал (18+).
01.50, 03.05 "Опасный Джонни". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "По горячим следам". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Смерть за кадром". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Московская Борзая". 7-я и 8-я серии (12+).
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.50 "Триумф Прометея". Док. расследование Аркадия Мамонтова(16+).
01.50 "Наследники". Криминальный сериал (12+).
02.50 "Родители". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Прорицатель Омар Хайям. Хроника легенды". Сериал (12+).**
**11.00 "Наука 102" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Тәмле" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "У дачи" (12+).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра" (6+).**
**17.15 "Дорожный патруль" (16+).**
**17.45 "С.Юрский. "Я пришел в кино как клоун" (12+).**
**19.15 "Три письма". Худ. фильм (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.15 "Үткән ғүмер" (12+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Полный контакт". Худ. фильм (18+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

## 3 АВГУСТА
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 04.00 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 "Новости" (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Королева игры". 15-я и 16-я серии (12+).
23.40 "Полуночное солнце". 7-я и 8-я серии. Криминальный сериал (18+).
01.50, 03.05 "Самозванцы". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести - Башкортостан".
11.55 "По горячим следам". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести - Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Вопросы воспитания". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести - Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир" (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести - Башкортостан".
21.00 "Московская Борзая". 9-я и 10-я серии (16+).
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.50 "Свои люди". Док. расследование Аркадия Мамонтова (16+).
01.55 "Наследники". Криминальный сериал (12+).
03.55 "Родители". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Прорицатель Омар Хайям. Хроника легенды". Сериал (12+).**
**11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Бай" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Неизвестный Башкортостан" (12+0.**
**15.15 "ДОСААФ: испытано на себе" (12+).**
**15.30 "Борсаҡ".**
**15.45 "Фанташ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Берегите женщину" (12+).**
**18.55 Хоккей. "Кубок КХ "Салават Юлаев-2017".**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Колесо времени" (12+).**
**24.00 "Последний герой". Худ. фильм (18+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

## 4 АВГУСТА
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00 Новости.
09.10, 05.20 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.35 "Победитель". Финал.
23.15 "Линкольн". Историческая драма (16+).
01.50 "Поймет лишь одинокий". Худ. фильм (16+).
03.50 "Приключения желтого пса". Худ. фильм.

### РОССИЯ 1
05.00 "Утро России".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "По горячим следам". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Юморина". Главный юмористический фестиваль года (12+).
23.20 "Понаехали тут". Мелодрама (12+).
03.15 "Родители". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Валентина Талызина. Время не лечит" (12+).**
**11.00 "Автограф" (12+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 Р.Кинзябаев. "Караул, тещу украли!" (12+).**
**13.30 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.00 "Хазина" (6+).**
**14.30, 19.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**15.30 "Сулпылар".**
**15.45 "Шәп арба" (6+).**
**16.00 "Перекличка" (6+).**
**16.15 "Зеркальце" (6+).**
**16.55 Хоккей. "Кубок ХК "Салават Юлаев-2017".**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.15 "Йома".**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Аль-фатиха" (6+).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Песня года" (12+).**
**23.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**24.00 "Выкуп". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 Н.Асанбаев. "Райса + Файзи" (12+).**

## 5 АВГУСТА
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.50, 06.10 "Россия от края до края" (12+).
06.00 Новости.
06.50 "Три мушкетера". Сериал (12+).
08.40 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости.
10.15 "Эдита Пьеха. "Я отпустила свое счастье" (12+).
11.20 "Смак" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "Человек-амфибия". Фантастическая мелодрама.
15.10 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Давай поженимся!" (16+).
19.20 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым".
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым" (16+).
23.00 "КВН". Премьер-лига (16+).
00.35 "Родительский беспредел". Комедия (6+).
02.30 "Жюстин". Худ. фильм (16+).
04.45 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1
05.15 "Без следа". Сериал (12+).
07.10 "Живые истории".
08.00 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа"
09.20 "Сто к одному". Телеигра.
10.10 "Пятеро на одного". Развлекательно-интеллектуальное шоу.
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" (16+).
13.10, 14.20 "Русская наследница". 8 серий. Мелодраматический сериал (12+).
14.00, 20.00 "Вести".
20.50 "Пятый этаж без лифта". 4 серии. Мелодраматический сериал (16+).
00.45 "Танцуют все!". Развлекательное шоу.
02.55 "Марш Турецкого-3". Криминальный сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45, 12.30, 19.15 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Астерикс в Британии" (6+).**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00 "У дачи" (12+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15 "Клио" (6+).**
**12.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**13.00 "Бай" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2017" (12+).**
**16.45 Футбол. Росгосстрах. Чемпионат России по футболу 2017-2018.**
**19.45 "Замандаш" (6+).**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.15 "Осиротелый". Худ. фильм (12+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "ДОСААФ: испытано на себе" (12+).**
**21.15 "Неизвестный Башкортостан" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**22.30, 03.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2017" (12+).**
**23.45 "Кинзя". Худ. фильм (12+).**

## 6 АВГУСТА
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости.
06.10 "Три мушкетера". Сериал (12+).
08.10 "Смешарики. ПИН-код".
08.25 "Часовой" (12+).
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости.
10.10 "Непутевые заметки".
10.30 "Честное слово" с Юрием Николаевым.
11.10 "Пока все дома".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Фазенда".
13.30 "Дачники" (12+).
17.10 Большой праздничный концерт к Дню Воздушно-десантных войск.
19.00 "Три аккорда" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Клуб веселых и находчивых". Встреча выпускников (16+).
0.25 "Молодая кровь". Боевик (16+).
02.25 "Целуя Джессику Стейн". Худ. фильм (16+).
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00 "Без следа". Сериал (12+).
07.00 "Маша и Медведь".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20, 03.15 "Смехопанорама" Евгения Петросяна".
08.50 "Утренняя почта". Музыкальная программа.
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
11.20 "Вести - Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.20, 14.20 "Синяя роза". Драматический сериал (12+).
14.00, 20.00 "Вести".
21.45 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.15 "На балу у Воланда. Миссия в Москву" (12+).
01.15 "Подруги". Мелодрама (12+).

### БСТ
**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Мультфильм" (0+).**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай баҡса".**
**10.00 "Физра" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Байтус" (6+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар".**
**11.15 "Листок" (6+).**
**11.45 "Алтын тирма".**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.00 "Млечный путь" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.00 "Приключения Бэйли: ночь в Каутауне". Худ. фильм (12+).**
**18.30 "Чак-чак" (12+).**
**20.00 "Байыҡ-2017" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Вечер.com" (12+).**
**23.15 "Свидание с джазом" (12+).**
**00.15 "Белый олеандр". Худ. фильм.**
**02.15 Н.Гоголь. "Женитьба" (12+).**

✓ ***Баймаҡтарға ырымбурҙарҙан өйрәнәһе тәжрибәләр ҙә бар ине. Әйтәйек, унда төҙөкләндереү мәсьәләһенә етди иғтибар бүленә, ауылдар, урамдар таҙа һәм архитектура яғынан төплө уйланылған булыуы менән айырылып тора.***



*ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ*

# ТУҠ БУЙҘАРЫНА СӘФӘР

**Ошо көндәрҙә Ырымбур өлкәһе Красногвардейский районы үҙәге Плешаново ауылында ҙур байрам саралары үткәрелде. Унда Баймаҡ район делегацияһы ла ҡатнашты.**



Баймаҡ районы делегацияһының сәфәре Плешаново, башҡорттар күпләп йәшәгән Бәхтийәр, Пролетар ауылдары менән танышыуҙан башланды. Бәхтийәр ауылында йәшәүселәр беҙҙе айырыуса ҡыуандырҙы. Бында үҙ тыуған ерен яратҡан, тарихын, йолаларын, мәҙәниәтен ихтирам иткән, үҙ тамырҙарын онотмаған рухлы башҡорттар йәшәй. Урындағы ауыл биләмәһе башлығы Радик Бәхтийәров бына оҙаҡ йылдар инде ошо яуаплы вазифаны башҡара, ә быға ҡәҙәр ул тарих уҡытыусыһы булған. Бәхтийәрҙәр кемдәндер ярҙам көтөп ултырмай, ауылдың социаль инфраструктураһын үҫтереүгә һәр береһе тос өлөш индерә. Тап ауыл халҡының тырышлығы менән бынан алты йыл элек өр-яңы мәсет төҙөлгән, зыярат кәртәләп алынған, Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған һәм унан еңеү менән ҡайтҡан яугирҙар иҫтәлегенә мәрмәр обелиск асылған. Хатта япмалы каток та эшләп ултыртҡандар. Балалар аҙ булыу сәбәпле мәктәп ябылған, әлбиттә. Ләкин иҫке булһа ла клуб бар, унда мөдире Юлиә Бәхтийәрованың тырышлығы менән төрлө милли мәҙәни саралар үтеп тора.

Пролетар урта мәктәбе - районда иң алдынғы мәғариф учреждениеларының береһе. Уның менән ике тиҫтә йылға яҡын инде Л. Бәхтийәрова уңышлы етәкселек итә. "Рәсәйҙең иң яҡшы 100 мәктәбе" конкурсында еңеүсе булған был коллективтың ҡаҙаныштары етерлек. Бында бик үҙенсәлекле һәм ҙур тарих һәм тыуған яҡты өйрәнеү музейы булыуы, унда башҡорт халҡы тарихына лайыҡлы урын биреләүе һоҡланыу тойғолары уятты.

Красногвардейский районы хакимиәте башлығы Н.В. Чернышев Баймаҡ районы делегацияһын шулай уҡ бик йылы ҡабул итте һәм ҡунаҡтарҙы районды социаль-иҡтисади тормошо менән яҡындан таныштырҙы, үҫеш перспективалары тураһында һөйләне. Эшлекле һөйләшеү һәм фекер алышыуҙар барышында иң мөһим проблемаларҙың береһе - төбәктә башҡорт телен уҡытыу һәм өйрәнеү мәсьәләһе лә күтәрелде. Район хакимиәте башлығы әйтеүенсә, бөгөн Юлтый һәм Иҫке Юлдаш ауылдарындағы мәктәптәрҙә башҡорт теле уҡытыла, Плешановолағы гимназияла факультатив булараҡ өйрәнелә. Әммә башҡа ауылдарҙа башҡорт милләтле ата-әсәләр балаларын русса уҡытырға теләк белдергән, шунлыҡтан улар бөгөн әсә телен өйрәнмәй. Артабан ысын мәғәнәһендә тарихи ваҡиға булды - Башҡортостан Республикаһының Баймаҡ районы һәм Ырымбур өлкәһенең Красногвардейский районы араһында мәҙәниәт, мәғариф, иҡтисад, сәнәғәт, урта эшҡыуарлыҡ, социаль өлкәләрҙә үҙ-ара хеҙмәттәшлек итеү тураһында ике яҡлы килешеүгә ҡул ҡуйылды.

Ошо уҡ көндө кискеһен Плешаново ауылының мәҙәниәт йортона район башҡорттары Баймаҡ районы делегацияһы менән осрашырға, сәнғәт оҫталарының ҙур концертын тамаша ҡылырға йыйылды. Фойела Башҡортостан "Китап" нәшриәтенең Баймаҡтағы "Башҡорт китабы" магазины үҙенең бай ассортиментлы продукцияһын тәҡдим итте. Шәхси эшҡыуар Наил Мортазиндың сувенирҙары милләттәштәребеҙҙең береһен дә битараф ҡалдырманы. Өфөнән Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаһы, тарих фәндәре кандидаты Нурислам Ҡалмантаев етәкселегендәге делегация ла килгәйне. "Тыумышым менән ошо төбәктән булараҡ, мин һәр ваҡыт тыуған төйәгемә ҙур тулҡынланыу менән аяҡ баҫам, - тине Нурислам Мирхәйҙәр улы үҙенең сығышында, - ә бөгөн ысын мәғәнәһендә тарихи көн - Баймаҡ менән Ырымбур дуҫлығына нигеҙ һалына. Ошо ике төбәк башҡорттарын беҙҙең яҡташыбыҙ, Үрге Ильяс ауылынан сыҡҡан атаҡлы сәсән Мөхәмәтша Буранғолов бәйләп тора. Тап ул "Урал батыр" эпосын баймаҡтарҙан барып яҙып ала һәм халыҡҡа еткерә. Аҫыл хазинаны түкмәй-сәсмәй киләһе быуындарға еткергәндәре өсөн баймаҡтарға мең рәхмәт!"

Икенсе көнөнә Красногвардейский районы ойошторолоуының 50 йыллыҡ юбилейына арналған тантаналы саралар Плешаново ауылы янындағы ҙур майҙанда үтте. Темәс ауыл биләмәһе (башлығы Бикйән Камалетдинов) тарафынан ҡоролған тирмә байрамда ҡатнашыусыларҙың иғтибарын үҙенә йәлеп итеп кенә ҡалманы, ә уның ысын биҙәге һәм ҡото булды. Байрам тантанаһына Ырымбур өлкәһенең ауыл хужалығы министры Михаил Маслов етәкселегендәге ҙур делегация, күрше райондарҙың хакимиәт башлыҡтары килгәйне. Юғары ҡунаҡтарҙы Баймаҡ һылыуҙары халҡыбыҙҙың милли аш-һыуы - ҡымыҙ һәм сәк-сәк менән ҡаршы алды. Баймаҡтар ҡунаҡсыллығы, һәр кемдең иғтибарын үҙенә йәлеп итеп торған күркәм тирмә комплексы, ҡабатланмаҫ йыр-моңо менән барыһын да таң ҡалдырҙы.

Әйтергә кәрәк, Баймаҡ районы делегацияһының һәр ағзаһы был сәфәргә изге маҡсат, милләттәштәребеҙгә рухи ярҙам күрһәтеү ниәте менән барғайны һәм уларҙың барыһы ла иңдәренә йөкмәтелгән бурысты намыҫ менән атҡарып сыҡты. Өмөтбай мәктәбенең тарих уҡытыусыһы, "Төньяҡ амурҙары" клубы ағзаһы Айҙар Мәжитов, мәҫәлән, башҡорт казагы кейемендә халҡыбыҙҙың данлы яу юлы тураһында булған һәр ерҙә бәйән итеп кенә ҡалманы, балаларға уҡты атыу буйынса оҫталыҡ дәрестәре лә күрһәтте. Район делегацияһының иң йәш ағзаһы - Татлыбай ауылынан билдәле спортсы Венер Нәбиев ырымбурҙар өсөн милли көрәш буйынса шулай уҡ оҫталыҡ дәрестәре үткәрҙе. Райондың "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Хөрмә Биктимерова Красногвардейский районы ағинәйҙәрен бер ойошмаға туплау буйынса һөйләшеүҙәр алып барҙы, үҙенең кәңәштәрен бирҙе. Баймаҡ районы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе Ришат Ишембәтов иһә Ырымбурҙағы милләттәштәребеҙ менән урындағы ҡоролтай эшмәкәрлеген йәнләндереү буйынса һөйләшеүҙәр алып барҙы, үҙенең төплө фекерҙәрен еткерҙе.

Шуныһы үҙенсәлекле, баймаҡтарға ырымбурҙарҙан өйрәнәһе тәжрибәләр ҙә бар ине. Әйтәйек, унда төҙөкләндереү мәсьәләһенә етди иғтибар бүленә, ауылдар, урамдар таҙа һәм архитектура яғынан төплө уйланылған булыуы менән айырылып тора. Ундағы милләттәштәребеҙ туған телен бөгөнгәсә һаҡлап ҡала алған: олоһо ла, кесеһе лә ауыҙ тултырып башҡортса һөйләшә, беҙҙәге кеүек вата-емерә урыҫса аралашмай. Башҡорт милләтенән булған ябай кеше лә, хакимиәттә ултырған чиновник та, эшҡыуары ла туған телебеҙҙә һөйләшә. Өлкәндәр менән бер рәттән йәштәрҙең дә башҡорт телендәге китаптарҙы һатып алыуына ҡыуанып ҡайттыҡ. Ырымбурҙар үҙҙәренең шәхестәрен данлай белә, бай эшҡыуарҙары тыуған еренә аҡсалата ярҙам күрһәтеүгә һәр саҡ мөмкинлек таба. Бына кемдәрҙән өлгө алырға кәрәк беҙгә!

**Азамат МӨХӘМӘТШИН,**
**Баймаҡ районының "Һаҡмар" гәзите хәбәрсеһе.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Июль - Август (Зөлҡағиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 31 (8) дүшәмбе | 3:56 | 5:26 | 13:30 | 19:47 | 21:17 | 22:47 |
| 1 (9) шишәмбе | 3:58 | 5:28 | 13:30 | 19:45 | 21:15 | 22:45 |
| 2 (10) шаршамбы | 4:00 | 5:30 | 13:30 | 19:43 | 21:13 | 22:43 |
| 3 (11) кесе йома | 4:01 | 5:31 | 13:30 | 19:41 | 21:11 | 22:41 |
| 4 (12) йома | 4:03 | 5:33 | 13:30 | 19:39 | 21:09 | 22:39 |
| 5 (13) шәмбе | 4:05 | 5:35 | 13:30 | 19:37 | 21:07 | 22:37 |
| 6 (14) йәкшәмбе | 4:07 | 5:37 | 13:30 | 19:35 | 21:05 | 22:35 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ЙОНДОҘНАМӘГӘ КЕМ ЫШАНА?



**"Фәлән йондоҙҙа фәлән әйберҙәр бар", - тиһәң, кеше һис икеләнеүһеҙ ышана. Ә: "Эскәмйәгә ултырмағыҙ, яңы ғына бурау яғылған уға", - тип яҙып ҡуйһаң, әҙәм балаһы, эскәмйә таҡтаһына бармаҡ тейҙереп ҡарап, тикшерә.**

Йондоҙнамә хаҡында һүҙ сыҡҡанда әле әйтелгәндәр хаҡтыр. "Йондоҙҙарҙың торошо тегеләй, йондоҙҙарҙың торошо былай" тип, йондоҙнамә асыусылар бәғзеләрҙе тулыһынса ышандырып та ҡуя. Әммә йондоҙнамәлә аныҡ ҡына итеп әйтеү юҡ. Ундағы юрауҙар теләһә кем өсөн тап килерҙәй дөйөм һүҙҙәрҙән тора. Етмәһә, һәр кемдең күңеленә ятырҙай "мәғлүмәттәр" бирә йондоҙнамә асыусылар.

Мосолман кешеһенең аңы ундай уйҙырмаларҙан күпкә юғары. Беренсенән, яҙмышҡа бер ниндәй ҙә йондоҙ ҙа, Ай йә Ҡояш та түгел, ә Аллаһ сүбхәнәһү үә Тәғәлә хужа. Икенсенән, кеше бәхетле булырға үҙе сәбәп ҡылырға тейеш. Сәбәп ҡылмаған, сәбәпсе булмаған кешегә Раббыбыҙ мөлкәт тә, ниғмәт тә, зиннәт тә бирмәй. Донъя бәрәкәтенә лә, уңышҡа - һәммәһенә үҙебеҙ сәбәпсе булырға тейешбеҙ.

Йондоҙҙарҙың торошо, Айҙың, Ҡояштың хәле, әлбиттә, Ерҙең магнит һыҙаттарына, тәбиғәт хәленә билдәле бер кимәлдә йоғонто яһай. Әммә күк есемдәренең хакимлығы түгел был. Был хәлдәрҙең барыһы ла - Аллаһы Тәғәлә ихтыярынан. Сөнки уларҙың барыһын да, шулай уҡ Ерҙе, Күк менән Ер араһындағы, Ерҙәге һәр нәмәне Раббыбыҙ юҡтан бар иткән. Уның бөйөк аҡылы нисек ҡушһа, шул хәлдә, шул рәүештә көн итә улар.

Кеше Раббыһына даими ялбара. Унан ярҙам һорай, Уның ярлыҡауына, һаҡлауына мохтаж әҙәм балаһы.

**"Башҡортса дини календарь"ҙан.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

# ҒӘСКӘРОВСЫЛАР ПРОЕКТЫ



**Ф. Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле яңы ижади проект тәҡдим итә. "Күлтабан күленең серле йымылдауы" тип атала ул.**

"Экология йылында республика халҡының иғтибарын тирә-яҡ мөхиттә, айырып әйткәндә, төбәктең һыу объекттарын һаҡлауға йүнәлтергә булдыҡ. Ансамбль репертуарында Күлтабан күле менән бәйле бейеү-легенда бар, шуға ла проект шулай атала", - тине ансамблдең йәмәғәтселек менән бәйләнеш буйынса белгесе Элиза Сынбулатова.

Ысынлап та, күл исеменең барлыҡҡа килеү тарихы бик үҙенсәлекле. Бер ваҡыт ҡаҙаҡтар башҡорттарға һөжүм итеп, сибәр башҡорт ҡыҙҙарын әсирлеккә ала. Улар ҡасып китмәһен өсөн, табандарын ярып, ат ҡылы һибәләр. Аяҡ табаны йүнәлгән, тик яҡшы итеп атлап йөрөү, ҡасыу тураһында хыялланырға ла мөмкин булмаған. Шулай ҙа ҡыҙҙар ҡасҡан. Ҡаҙаҡ яугирҙары быны белеп ҡалғас, арттарынан ҡыуа төшкән. Алдарында күл күренгәс, дошмандарынан ҡасып ҡотола алмаясағын аңлаған ҡыҙҙар, ҡулға-ҡул тотоношоп, күлгә төшөп юғалған. "Шул рәүешле, был күл тәбиғәт һәйкәле генә түгел, ә республикабыҙ тарихи-мәҙәни мирасы ла. Шуға ла бында билдәле легендар "Ете ҡыҙ" бейеүенә клип төшөрөләсәк", - ти Элиза Сынбулатова. Бынан тыш, әлеге мәлдә ансамбль Баймаҡ районында хәйриә концерттары бирә. Бөгөн, 29 июль концерт Иҫке Сибайҙа, 30 июлдә Темәс ауылы Мәҙәниәт йортонда үтәсәк.

ПОЗИТИВ

# КҮҢЕЛҺЕҘМЕ?

## Бәлеш бешерегеҙ!



**Электрон почтама иртүк бер һылыуҙан хат килде. "Һеҙ депрессиянан нисек сығаһығыҙ? Әллә был һүҙ һеҙгә бөтөнләй ятмы?"- тип һораған ул. Әлбиттә, депрессия, йәғни күңел төшөнкөлөгө, мөйөш һайын һағалап тора. Саҡ ҡына һиҙгерлегеңде юғалт, шунда уҡ елдереп килеп етә. Әммә йылдар дауамында шуны аңланым, ҡатын-ҡыҙ үҙенең һәр ваҡыт кемгәлер, йә нимәгәлер булһа ла кәрәклеген тоймаһа, күңел төшөнкөлөгөнә тиҙ бирешә. Эшкә, балаларға, ғаиләнә, яратҡан шөғөлөңә алданып ҡына был "әрһеҙ ҡунаҡтан" ҡотолоп була. Һәм үҙ кәйефегеҙҙе үҙегеҙ күтәреп, тормошҡа ыңғай ҡараш менән йәшәргә өйрәнгәндә генә һәр көнөгөҙҙөң ни тиклем сағыу биҙәктәргә бай икәнен күрерһегеҙ!**

Ә инде бөтөнләй күңелегеҙ бер нәмәгә лә ятмаған мәлдә, һикереп тороғоҙ ҙа, бына ошо татлы бәлеште бешерә башлағыҙ. Арыуығыҙ, хәсрәттәрегеҙ, аһзарығыҙ шул мәлдә һыпырылып тигәндәй юҡҡа сығасаҡ. Янығыҙҙа ғына осоп йөрөгән илһам ҡошон яман кәйефегеҙ менән ҡурҡытмағыҙ. Йылмайҙыҡ та эшкә тотондоҡ!

Был татлы бәлештең эслегенә йәнегеҙ теләгән емеш-еләкте һалырға була. Минә бигерәк тә туңдырылған сейә (һөйәге алынған) менән ҡара ҡарағаттан бешереүе оҡшай. Тәме лә әскелтатлы ғына була, күңелдә лә күтәреп ебәрә. Туңдырылған емеште ҡамыр баҫыр алдынан тәрилкәгә һалып ҡуям, ирей торһон әйҙә. Әйткәндәй, интернетта был бәлештең рецептары күп кенә. Төрлөсә бешереп ҡарағандан һуң, үҙемә бына ошолай ҡулайлаштырып алдым ул рецепты.

Шулай итеп, беҙгә ике һауыт кәрәк буласаҡ. Берешендә бер ҡап аҡ май менән бер ҡалаҡ ҡабартҡыс (разрыхлитель) ҡушылған ике стакан тирәһе ондо ыуабыҙ. Икенсе һауытта йәһәт кенә бер йомортҡа менән ярты стакан шәкәрҙе туғыйбыҙ ҙа, бөтәһен бергә ҡушып, ҡамыр баҫабыҙ. Кәрәк булһа, ондо йәнә өҫтәйбеҙ. Майлы ҡамыр ондо үҙенә күп ала, ҡулға йәбешмәһә, тимәк, еткән. Ваҡытығыҙ булһа, әҙер ҡамырҙы 15-20 минутҡа аҙыраҡ туңдырғысҡа һалып торһағыҙ ҙа була.

Ҡамыр әҙер! Эслегенә тигән емеш көтөп ята! Табаны майлағандан һуң (пергамент ҡағыҙы һалһағыҙ ҙа була), эсенә ҡамырҙы ҡул менән йәйә башлайбыҙ. Ситтәрен матур итеп күтәрәбеҙ, төбөн үтә ҡалын итмәгеҙ. Минең һәр ваҡыт ҡамырым артып ҡала, унынан тәмле печенье бешерергә була! Артып ҡалған ҡамыр һыуытҡыста ике көн ятһа ла бер нәмә лә эшләмәй. Ҡамырҙы йәйеп бөттөгөҙмө? Улайһа, эсенә башта бер ҡалаҡ крахмал һибәбеҙ, әгәр крахмалығыҙ юҡ икән, кәсәл һибегеҙ. Шунан ҡарағатты һалабыҙ, уға бер ҡалаҡ шәкәр һибеп бутайбыҙ. Алдан шәкәр менән бутамағыҙ, һуты сығып бөтәсәк.

Хәҙер ҡарағаттың өҫтөнә ҡоя торған ҡатнашманы әҙерләйбеҙ. Бер стакан магазин ҡаймағына бер йомортҡа, ике ҡалаҡ он, алты ҡалаҡ шәкәр ҡушып бутайбыҙ ҙа, емеш өҫтөнә ҡоябыҙ. Һәм уртаса ҡыҙыулыҡтағы мейескә оҙатабыҙ. 35-40 минуттан һуң өйөгөҙ түрендәге өҫтәлгә хуш еҫле бәлеш менеп ҡунаҡлаясаҡ. Тик саҡ ҡына һыуынғанын көтөгөҙ, эсе килеш ҡырҡһағыҙ, эслеге ағып сығасаҡ. Һыуынһа, формаһын тотасаҡ. Ошо урында тағы шуны әйткем килә, күп кенә рецептарҙа ондо дүрталты ҡалаҡ һалырға ҡушалар. Улайтып ҡарағаным да булды, ысынлап та, уңайлы ғына ҡырҡыла, әммә эслегенән бешеп етмәгән сей ҡамыр тәме сыҡҡылай тойолдо минә.

Дуҫтарым! Мин әйтте тиерһегеҙ, был бәлеш тылсым көсөнә эйә. Бер тапҡыр тәмен татыған кеше уны һәр ваҡыт бешерәсәк! Иң мөһиме, бөтә арыу-талыуығыҙҙы онотоп, көнө буйы йылмайып йөрөйәсәкһегеҙ! Бәхетле булығыҙ! Күңел төшөнкөлөгөнә үҙегеҙ менән идара итергә юл ҡуймағыҙ!

**Гөлназ ИШЕМҒОЛОВА.**

ТӘМЛЕ БУЛҺЫН!

# ҠАРАҒАТ ҠАЙНАТМАЛАРЫ



• Ҡара ҡарағаттан желены шулай эшләргә була: 2 кг ҡарағат, 2 әфлисун, 4 кг шәкәр ҡомо алаһың. Ҡарағатты, әфлисундарҙы йыуып, ит турағыстан үткәрәһен. Әҙер массаға 4 кило шәкәр һалып, ирей бөткәнсе болғатаһың. Шәкәре ирей, ҡуйыра килә желе хасил була. Ҡара ҡарағаттың барлыҡ витаминдары үҙендә ҡала. Банкаларҙы быуҙа тотоп, тултырырға ғына ҡала.

• Тағы бер һыналған рецепт. 2 стакан һыу, 6 стакан шәкәр, 4 стакан ҡарағат алаһың. Һыуға өс стакан шәкәр һалып, ағарып сыҡҡансы ҡайнатаһың да, өҫтөнә ҡарағатты һалаһың. 7 минут ҡайнатырға, күбеген алырға. Уттың самаһын үҙегеҙ ҡарағыҙ. Артабан ҡатышма өҫтөнә ҡалған өс стакан шәкәрҙе һалырға ла, тағы 5 минут ҡайнатырға. Һеркелдәк кенә тәмле желе килеп сыға. Банкаларҙы быуҙа тотҡас, ҡайнар вареньены һалып, ябып ултыртып ҡуяһың.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЮҒАРЫ ОСҠАН...

## түбән ҡуныр

Ирҙең нәфсеһе - бер, ҡатындың нәфсеһе - туғыҙ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Батырлыҡтың шундай ҡапма-ҡаршы яҡтары ла бар: ғүмерендә лә бирергә ризаһың, шул уҡ ваҡытта йәшәү теләгең дә бик көслө.

**(Гилберт Честертон).**

Тормошто тормоштоң үҙенән түгел, китаптарҙан һәм сәнғәт әҫәрҙәренән ныҡыраҡ тоябыҙ.

**(Теодор Драйзер).**

Теләһә кем ғүмеребеҙҙе өҙөргә мөмкин, әммә бөрәү ҙә үлемдән арындыра алмай.

**(Луций Сенека).**

Үлем нимә икәнен беҙ ҡайҙан беләйек, тормоштоң ни икәнен дә белеп булмай бит әле.

**(Конфуций).**

Ҡартаям тип үкенмә; ҡартлыҡ та һәр кемгә бирелмәй.

**(Огден Нэш).**

Күп кешеләр өсөн тәҙәлеү - ул етешһеҙлектәрен алмаштырыу ғына.

**(Вольтер).**

Уйҙарығыҙға иғтибарлы булығыҙ. Улар - эштәрҙең башланғысы.

**(Лао-Цзы).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер малай йәшәгән. Уның бик хәтәр бер "сире" булған: теле бер туктауһыҙ, сама белмәй һөйләнгән дә һөйләнгән. "Был ниндәй яза булды әле беҙгә? Ҡасан тынысланыр һәм беҙгә ял бирер был тел?" - тип зар түккән тештәр. "Һеҙҙең миндә ни эшегеҙ бар? - тип ярһыған тел. - Сәйнәүегеҙҙе белегеҙ ҙә, тыныгыҙ. Минең һеҙҙең менән бер уртаҡлығым да юҡ. Берәүегеҙгә лә минең эшкә ҡыҫылырға, етмәһә, ахмаҡ кәңәштәрегеҙ менән тығылырға юл ҡуймам!" Шулай итеп, малай урынлыға ла, урынһыҙға ла гәп һатҡан. Ә тел, мәғәнәһенә үҙе лә төшөнмәстән, туктауһыҙ матур-матур һүҙҙәр сәсеүенән кинәнгән. Бер ваҡыт малай һүҙ һөйләү менән шул тиклем мауығып киткән, хатта ниҙелер яңылыш әйтеп, ауыр хәлгә ҡалғанын да аңламай ҡалған. Бәләнән ҡотолоу өсөн ул телендә күрәләтә ялған һүҙ әйтергә юл ҡуйған. Шул саҡта тештәрҙең дә түҙемлеге шартлаған һәм улар телде шул тиклем ныҡ итеп ҡыҫып алған, тел хатта ҡанап киткән. Теле ауыртыуҙан да, оялышынан да илап ебәргән малай. Бына шунан алып тел үҙен бик һаҡ тота башлаған, малай ҙа ниндәйҙер һүҙ әйтер алдынан ике тапҡыр уйлап ала торған булған..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 27 июль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4727
Заказ - 1515/07